ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-2 апрель - май (алағарай - һабанай)

2024

№16 (1109)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был шаярыуҙың...**

аҙағы хәйерле булырмы?



6

**Был сихри йортта...**

гражданлыҡ хәлендә белешеп була



8-9

**Рухи маяҡтарҙы емермәйек**



11

**Таяҡты артыҡ ныҡ бөгөүме?**



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***"Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн 897 һум 06 тингә баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

КӨН ТЕМАҺЫ

# БАШҠОРТОСТАН...

## Рәсәйҙең иң көслө терәктәренең береһе

**Мәскәүҙә дипломатик хеҙмәткәрҙәрҙе һәм сит илдәрҙең төрлө кимәлдәге эксперттарын Башҡортостандың иҡтисади, инвестиция һәм туристик ҡеүәте менән таныштырыу сараһы булып үтте. Унда Рәсәйҙең сит ил эштәре министры, илдең Ишеү слаломы федерацияһының попечителлек советы рәйесе Сергей Лавров менән республика етәксеһе Радий Хәбиров та ҡатнашты.**



**(Дауамы 4-се биттә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Ауыл ерендә эшҡыуарлыҡҡа тотоноу бик ҡыйын шөғөлмө? "Еләкле урындар" бөтмәгәнме, йәғни ниндәй эшҡыуарлыҡ төрҙәре менән шөғөлләнеп була?*

***Әмир ҠУНАҠҠУЖИН, Мәләүез районы:*** Йыш ҡына ҡала кешеһе, замана иҡтисадсылары: "Ауылда эшһеҙлек юҡ, унда мал аҫрап та донъя көтөргә була", - тип һығымта яһап ҡуя. Ә ауыл халҡы был турала ни уйлай һуң?

Мал аҫрар өсөн бесән-һалам, ҡатнаш аҙыҡ, көтөүлек, белемле ветеринар һәм башҡа бихисап әйбер кәрәк. Берике һыйыр менән генә әллә ни эш ыратып булмай. Килем алам, аҡса эшләйем, тиһәң, һөт һыйырын кәмендә ун башҡа еткерергә кәрәк. Әйткәндәй, улар күп һөт бирә торған нәҫелдән булырға тейеш. Ярар ҙа дәүләттең фермерҙар өсөн бүленгән субсидияһына эләкһәң. Әҙер продукцияңды һатыу ҙа әллә ни еңелдән түгел.

Яңыраҡ телевизорҙан Санкт-Петербург ҡалаһынан репортаж күрһәттеләр. Унда, элекке кеүек, урамдарҙа мискәләрҙән һөт һата башлағандар. Халыҡҡа бик оҡшай икән, тик репортаж алып барыусы хәбәрсе быны ишетмәҫкә тырышып, һатыусынан документ таптырып-таптыра. Әҙерләгән продукцияһын ошо рәүешле лә һата алмағас, фермерлыҡ хәрәкәте нисек үҫешһен инде?

Бер таныштарым 2014 йылда беҙҙең илгә санкциялар индерелә башлағас, сыр етештереүгә тотондо, сауҙаһы ла һәйбәт кенә башланғайны, тик күрше-тирә ҡалаларҙа һөт заводтары ла тик ултырманы - дефицит продуктты етештерергә тиҙ арала өйрәнеп алды һәм таныштарымды эшһеҙ ҡалдырҙы.

Ә бына мебель йыйыусылар, автомобиль ремонтлауҙы ҡул оҫталарына һорау һәр ваҡытта ла бар һәм буласаҡ. Ауылдарҙа ошо һөнәр менән шөғөлләнеүселәр ҙә булһа, отор ғына ине.

Шулай уҡ ауылда ҡымыҙ, буҙа һәм башҡа милли ризыҡ етештереүҙе кәсеп иткәндәр һәр ваҡыт отасаҡ, тип уйлайым, сөнки һуңғы йылдарҙа күптәр сәләмәт туҡланыуға күсте. Башҡорт тоҡомло ат һаны артҡан һайын, бейә һөтөнән бешелгән ҡымыҙ үҙенең ҡулланыусыларын табасаҡ. Тимәк, ауылда йәшәүселәр киләсәктә йылҡысылыҡҡа күсәсәк.

Әйткәндәй, ҡымыҙҙы борон-борондан бейә һөтөнән етештергәндәр, хәҙер кәзәнекенән дә, һыйырҙыҡынан да эшләйҙәр. Мин йыш ҡына: "Һыйыр һөтөнән ҡымыҙ эшләп һатыусы "эшҡыуарҙар" ниңә һаман һыйыр эсәгенән, итенән ҡаҙы етештереп һатмайҙар икән?"- тип көләм. Ҡала халҡын алдарға була, ә ауылда тыуғандарҙы алдап булмай ул был йәһәттән. Ауылда йәшәп эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнһәң дә һатып алыусыларҙы алдамаҫҡа кәрәк. Мин ҡыҙыҡ өсөн генә һыйыр, кәзә һөттәренән етештерелгән ҡымыҙ алып эсеп ҡараным. Улар ысын ҡымыҙға яҡын да килмәй.

Һәм шуныһы: һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығы үҫешен күҙәтһәң, шул күҙгә ташлана - етештереүсе, эшкәртеүсе эре хужалыҡтар артҡандан-арта. Ошо урында бынан утыҙ йылдар элек булып үткән ваҡиғалар иҫкә төшә. Мәскәүҙән, колхоз-совхоздарҙы таркатырға, тигән указ төшөрөлгәс, тик бер Башҡортостандың беренсе Президенты ғына ҡаршы төштө, бөтә либераль матбуғат быны тәнҡитләп сыҡты. Тормош Мортаза Ғөбәйҙулла улының хаҡлы булыуын раҫланы. Киләсәктә фермерлыҡ хужалыҡтарын эреләре "йотасаҡ", ауылда эш башлағанда быны иҫәпкә алыу мөһим.

12+

✓ *Сәнғәткә ғашиҡ халыҡ йәшәгән районлар башҡаларҙан айырылып тора бит ул. Уларҙың күңеле генә түгел, йәшәйеше лә матур. Өйҙәре генә түгел, ауылдары төҙөк, ғаиләләре күркәм, насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ торалар.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# БАЙРАМДАР ҘА...

## үҙлегебеҙҙе һаҡлай бит!

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

*Салауат КИРӘЙЕВ, Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры:* Йыш ҡына, республикала мәҙәни саралар бигерәк йыш үтә, тигәнерәк фекерҙәр ишетелеп тора. Әгәр ҙә был байрамдарға ниндәйҙер мәғәнә һалып ҡарамаһаң, бәлки, ситтән шулай күренәләр ҙә. Мәҫәлән, Республика халыҡ ижады үҙәге белгестәре ниндәйҙер байрам үткәреүҙе планлаштыра икән, улар башҡорт халыҡ ижадын, йолаларын тергеҙеү аша



уларҙы һаҡларға, артабан йәштәргә өйрәтеп ҡалдырырға тигән маҡсаттан сығып эшләй. Быйың ни тиклем мөһим икәнлеген хәҙер халыҡ үҙе лә аңлай, шуға ла беҙгә районларҙа үтеп торған сараларҙа ла әүҙем ҡатнашырға, кәрәк булғанда консультациялар үткәрергә тура килә.

Республика Башлығы ҡарары менән былтырҙан һәр төбәк үҙ ерлегенә хас традицияларҙы тергеҙә башланы. Әйтәйек, Ейәнсура тигәндә - шәл, Бөрйән тигәндә - солоҡ балы, Бөрө тигәндә уның алмалары күҙ алдына баҫа. Шуның шикелле, һәр райондың брендҡа әйләнерҙәй нәмәләре бар. Уларҙы үткәреү өсөн Хөкүмәттән матди ярҙам да күрһәтелә. Иң мөһиме, шул төбәктә үҫеп килгән йәштәр, уҡыусылар ҙа ошо традицияларҙың нескәлектәренә төшөнә, уларҙы дауам итеүсе сылбырға әүерелә. Йолалар үткәреп, уларҙы был эштәргә йәлеп итмәһәк, бөгөнгө заманда балаларыбыҙҙы йолоп алырға әҙер торған башҡа күренештәр аҙ түгел. Былтыр тәүге тапҡыр булғас, бренд һайлауҙа ниндәйҙер ауырлыҡтар ҙа булды, әммә сираҡныс алынды, эш дауам итә, быйыл районларҙан тағы ла үҙенсәлеклерәк саралар көтәбеҙ.

Ул байрамдарға ниндәйҙер бер ауылса ябай ғына тамаша, фольклор күрһәтеү тип кенә ҡарарға ярамай. Һәр береһенең сценарийы, режиссеры бар, йәғни, улар юғары сәнғәт кимәленә еткерелгән, уйланылған байрамдар. Икенсенән, сәнғәткә ғашиҡ халыҡ йәшәгән районлар башҡаларҙан айырылып тора бит ул. Уларҙың күңеле генә түгел, йәшәйеше лә матур. Өйҙәре генә түгел, ауылдары төҙөк, ғаиләләре күркәм, насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ торалар - тормош көтөр өсөн кешенең дәрте лә булырға тейештәр. Ошо дәрт-дарман уларға мәҙәниәт донъяһында ҡайнап йәшәүҙән килә. Бер мәл бейек ҡоймалар менән уратып алынған йорттарға бикләнеп бөткән, ҡулындағы телефонындағы виртуаль донъяға башкаләй "сумған" халыҡтың яңынан күңел ҡапҡалары асыла - быныһы ла яҡшы бит. Күмәкләп, берҙәм булып, ярҙамлашып йәшәгәндә генә күңелдәр бөтөн була.

Күп йөрөгәс, күрәһең дә: халыҡтың әүҙем булыуы район етәкселегенән дә тора. Етәкселектең мәҙәниәткә ҡарашы ыңғай икән, уға халыҡ та эйәрә. Клубтар тулы кеше, ниндәй генә түңәрәктәр эшләмәй. Беҙгә бер нәмә лә кәрәкмәй, тип йәшәгән районлар ҙа бар. Шулай ҙа тәүгеләре күберәк булыуы һөйөндөрә. Шуға ла беҙҙең Үҙәктең белгестәре лә ал-ял белмәй, уларға методик яҡтан да, тәжрибә йәһәтенән дә, хатта ҡайһы саҡта йыйылы һүҙ, ҡараш менән дә ярҙамға килергә әҙерҙәр. Киләсәктә лә матур проекттар халҡыбыҙҙы бер маҡсатҡа туплар, тигән ышаныстабыҙ.

**Ләйсән ВӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Ауыл ерендә эшҡыуарлыҡҡа тотоноу бик ҡыйын шөғөлмө? "Еләкле урындар" бөтмәгәнме, йәғни ниндәй эшҡыуарлыҡ төрҙәре менән шөғөлләнеп була?***

*Албина һәм Радик ИЛЬЯСОВТАР, Стәрлебаш районы:* Ауылда ла эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеү мөмкин, әлбиттә. Бөгөн был йәһәттән бар юлдар ҙа асыҡ. Ниәтең һәм тырышлығың ғына булһын.

Беҙ тәүҙә буҙаны үҙебеҙ өсөн генә эшләй инек. Был эсемлекте Сибай яғында йәшәгән кейәүебеҙ алып килеп тәмләткәйне, барыбыҙға ла бик оҡшаны. Үҙебеҙ эшләп ҡарарға булдыҡ. Был файҙалы эсемлекте эшләүҙең төрлө ысулдары бар бит. Интернетта Гөлназ Азатова ҡуйған рецепт күңелгә ятты. Уның менән һөйләшеп, осрашып, оҫталыҡ дәресе алдым. Ул ваҡытта уҡытыусы булып эшләй инем әле. Бергә эшләгән хеҙмәттәштәремә, балаларҙы уҡытҡан уҡытыусыларға тәмләп ҡараһындар өсөн мәктәпкә алып барғайным, улар ҙа бик оҡшатты. Шунан иң беренсе 5 полиэтилен шешә буҙаға тәүге заказ алдым.

Ауыл ерендә йүкә телефоны шәп эшләй бит ул. Тиҙҙән уҡытыусылар, дауахана хеҙмәткәрҙәре, һатыусылар заказ бирә башланы. Бер йылы 1 майҙа үткәрелгән район йәрминкәһендә 100-200 граммлыҡ стакандарға һалып, дегустация ойоштороғайныҡ. Бик күптәргә оҡшаны. Иртәгәһенә Ураҙа байрамы тура килгәйне ул йылды. Район хакимиәте башлығы беҙҙе Ғәйет байрамында ҡатнашырға саҡырҙы. Шулай итеп, Ураҙа ғәйетендә лә, Еңеү көнөндә лә күргәҙмә-һатыуға сыҡтыҡ. Йәйләп беҙҙең буҙаның даны район буйынса тарала башланы. Хәҙер байтаҡ байрамдар сиктәрендә ойошторолған сараларҙа ҡатнашабыҙ.

Биш шешә буҙанан башлағайныҡ кәсебебеҙҙе, бөгөн иһә уны көнөнә 70-80 литр һатабыҙ. Өйҙән дә килеп алалар, магазиндарға ла һатыуға ҡуйғанбыҙ. Бөгөн был тәмле эсемлектең 4 төрөн эшләйбеҙ: имбир һәм бал, корица, лимон һалынғаны һәм классик буҙа. Ҡуйыу итеп ҡоябыҙ, шыйығыраҡты яратҡандар ҡайнатып һыуытылған һыу ҡатыштырып эсә ала.

Буҙа - бик шифалы эсемлек. Һыуһағанда һыуһынға яҡшы, асыҡҡанда - бик туҡлыҡлы. Ураҙа ваҡытында бигерәк файҙалы, сәхәрҙә бер стакан буҙа эсеп ебәрһәң, һыуһатмай ҙа, асыҡтырмай ҙа. Насар холестеринды кәметә. Косметик йөғонтоһо ла бар. Бер аҙ буҙа һөртөп йөрөһәң, бит тиреһе шыма ғына булып, ваҡ йыйырсыҡтар күренмәй ҡала. Ҡайһы бер гүзәл заттар мунсала тәнгә буҙа һөртөп ултырабыҙ, ти. Даими клиенттарыбыҙ араһында өлкән йәштәгеләр күп. Бер 80 йәшлек инәй бына ике йыл эсә беҙ ҡойған буҙаны. Ибрай ауылынан бер егет бер алғанда 6-7 шешә һатып ала.

Быларҙы нимә өсөн тәфсирләп һөйләй тиһегеҙме? Ауылда ла эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә була, тип әйтергә теләйем. "Еләкле урындар"ҙы табырға була. Ниәтегеҙ изге булһын, иң мөһиме. Шулай уҡ күрһәткән хеҙмәтегеҙ, етештергән әйберегеҙ һорау менән файҙаланыуын белеү, өйрәнеү мөһим. Кеше өсөн эшләгән әйбер сифатлы булырға, күңел һалып эшләнергә тейеш. Шул ваҡытта эшегеҙҙең алға китеүен күрегеҙ ҙә торор.

Әле бына беҙ йәнә эсенә сәтләүек, кокос валсыҡтары һалып, талҡандан печенье етештерә башланыҡ. Йәйләп ҡына һатып алыусылар арта бара. Хәҙер бит күптәр сәләмәт аҙыҡҡа, дөрөҫ туҡланыуға күсә башланы. Был продукциябыҙ ҙа тиҙҙән танылыу яулар тип уйлайбыҙ.

Бына шулай. Уҡытыусылыҡ эшен ташлап, ике йыл буҙа ҡойоу менән шөғөлләнәбеҙ һәм, әйтергә кәрәк, был эшебеҙ ҙә бик оҡшай.

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

# ҒАИЛӘЛЕ БУЛ!



**Башҡортостанда йәшәүселәрҙең никахҡа инеүҙәренең уртаса йәше билдәләнде. Ирҙәр - 28,8 йәштә, ҡатын-ҡыҙҙар 26,5 йәштә никахлаша, тип хәбәр иттеләр республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан. Белгестәр рәсми никахтың бер нисә өҫтөнлөгөн һыҙыҡ өҫтөнә алды:**

***Мөлкәт мәсьәләләрен хәл итеү.*** "Никахта тупланған мөлкәт дөйөм. Никахҡа ингәнгә тиклемге булған милек ирҙең йәки ҡатындың милке генә булып тора. Әгәр былдай тәртип оҡшамаһа, никах килешеүе төҙөргә хоҡуҡығыҙ бар", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында.

***Ата-әсә булыу.*** Законлы никахта атайлыҡты иҫбатларға кәрәкмәй. Әгәр никах теркәлмәһә, баланың атаһына үҙ хоҡуғын таныу тураһында ғариза яҙырға кәрәк.

"Никахта бала ауырып китһә, кем больничныйға барыуын хәл итә алаһығыҙ. Эш биреүсе кемгә сығымдарҙың күп өлөшөн ҡаплай, мәҫәлән, шул баланы ҡарай ала", - тип өҫтәнеләр министрлыҡта.

***Һаулыҡ.*** Ир менән ҡатын реанимацияға һәм берберенең һаулығы тураһында мәғлүмәткә эйә булған яҡын туғандар иҫәбенә инә. Никах рәсми теркәлмәһә, уларҙың был хоҡуғын кире ҡағырға мөмкин.

***Ғаилә бюджеты.*** Ир ҙә, ҡатын да бер үк фатирға һалым түләүҙән аҡса ала ала. Был ипотека проценты буйынса түләү алыуға ла ҡағыла.

Ир менән ҡатынға, сит кешегә бүләк итеүҙән айырмалы рәүештә, күсемһеҙ милек, транспорт саралары, акциялар, өлөш, пайҙар бүләк итеүгә һалым һалынмай.

"Ғаиләләр өсөн шулай уҡ дәүләт ярҙамы менән кредиттар ҙа бар", - тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында.

Билдәле булыуынса, 2024 йылдың 24 февралендә (24.02.2024) Башҡортостанда 246 никах теркәлгән.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡарары менән 2024 йыл Рәсәйҙә Ғаилә йылы тип иғлан ителде.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың рәсми делегацияһы 23-24 апрелдә Дубайҙа "Мөмкинлектәр донъяһы" халыҡ-ара бизнес-форумында эшләне. Был ҙур эшлекле сара эшҡыуарҙар берләшмәһе, власть һәм халыҡ-ара ойошмалар вәкилдәрен берләштерҙе. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, ошондай күләмле сарала республика исеменән сығыш яһау - оло мәртәбә, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә 6-сы урынды биләй, тип билдәләне. "Былтыр сауҙа күләме биш ярым тапҡырға артты. Беҙ юғары технологиялар, спорт һәм туризм өлкәләрендә бәйләнештәрҙе әүҙем кинәйтәбеҙ", - тип яҙа Башҡортостан Башлығы социаль селтәрҙә.

✓Башҡортостандың бәләкәй ауылдары буйлап йәнә "Сәләмәтлек поездары" йөрөй башлай. 2019 йылда Башҡортостан Башлығы тәҡдиме менән башланған акция 15 апрелдән 15 сентябргә тиклем ғәмәлдә. Уҙған биш йылда табиптар 150 меңдән ашыу кешене ҡабул иткән. "Сәләмәтлек поездары" республиканың һәр районына килә. Комплекстар составында күсмә флюорографтар, маммографтар, һаулыҡ үҙәктәре һәм фельдшер-акушерлыҡ пункттары бар.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Урал Искәндәровты республиканың Үҙйөрөшлө машиналарҙың һәм башҡа төр техниканың техник торошон күҙәтеү буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп тәғәйенләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документ Башҡортостандың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Указға ярашлы, дәүләт комитеты башлығы вазифаһы буйынса Башҡортостандың үҙйөрөшлө машиналарҙың һәм башҡа төр техниканың техник торошон күҙәтеү буйынса баш дәүләт инженер-инспекторы ла.

✓Рәсәйҙәр Әсәлек капиталы аҡсаһын таунхаустарҙы һәм башҡа йорттарҙы реконструкциялау өсөн файҙаланырға мөмкин. Был хаҡта ил Хөкүмәтендә хәбәр иттеләр. Билдәләнеүенсә, ярҙам сараһын ошондай типтағы биналарҙы яңыртҡанда ла, реконструкциянан һуң да алырға була. "Торлаҡты үҙ көсөң, шулай уҡ төҙөлөш ойошмаһы ярҙамында төҙөкләндерергә рөхсәт ителә. Беренсе осраҡта Социаль фонд Әсәлек капиталы аҡсаһын - ата-әсәләрҙең береһенә, икенсеһендә предприятие иҫәбенә күсерә", - тиелә федераль власть органының рәсми ТГ-каналында.

**✓ Ҡайһы саҡта барыһына ла ҡул һелтәп, малдарҙы үҙебеҙгә һөт-ит бирерлек итеп кенә ҡалдырғы килә, сөнки арытылған. Ләкин балаларҙы уҡытырға кәрәк, кредиттар бар, аҡсаһыҙ нисек йәшәмәк кәрәк!**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?** ***Ауыл ерендә эшҡыуарлыҡҡа тотоноу бик ҡыйын шөғөлмө? "Еләкле урындар" бөтмәгәнме, йәғни ниндәй эшҡыуарлыҡ төрҙәре менән шөғөлләнеп була?***

***Рәмилә СӨЛӘЙМӘНОВА, Көйөргәҙе районы:*** Эшҡыуарлыҡ - ғаиләгә киләсәк килем өсөн яуаплылыҡ, тимәк, был өлкәлә эшләү үҙендә, яҡындарыңдың яҡшы тормошта йәшәүен тәьмин итеү һинең өҫтөңдә, тигәнде аңлата. Эшҡыуарлыҡ, ниндәй өлкәне алып ҡарағанда ла, еңел шөғөл түгел икәненә яҡшы төшөнәм. Дәүләткә йәки кемгәләр ялланып эшләү урынына, үҙеңдең эшеңде булдырыуҙың тәүге аҙымдары ла еңелдән түгел. Беҙҙә ҡайһы берәүҙәр кеше аҡсаһын һанарға ярата бит инде, һәм уларҙың күҙлегенән ҡарағанда, эшҡыуарҙар аҡсаны күрәп ала ла, донъяның артына тибеп йәшәй. "Күрәп алынған" аҡса өсөн күпме тир түгелеүен, нервы бөтөүен, һаулыҡ ҡаҡшауын, балаларҙың бәләкәй генә көйө эшкә егелеүен һәм башҡа күп төрлө һынауҙарҙы белеп бөтмәйҙәр.



Өйләнешкәс тә Өфөгә сығып киттек. Ирем төҙөлөштә, мин һатыусы булып эшләнем. Унан бер-бер артлы ике бала тыуҙы, бөтә финанс йөкләмә иремдең иңенә ятты. Шулай биш йылдар тирәһе баш ҡалала фатирҙан фатирға күсеп йөрөп арыныҡ та, иремдең ауылына ҡайтып төпләндек. Ҙур йорт һалып сыҡтыҡ, ике яҡтан да атай-әсәйҙең ярҙамы ҙур булды. Ауылда ирем фермала эшләне, мин тәүҙә өсөнсө бала менән өйҙә ултырҙым, унан ирем вахта менән Себер тарафтарына китте. Ул өс ай эшләне, бер ай ял итте, йәғни күберәген донъя минең ҡарамаҡта булды. Ул ваҡытта ҡулда өс бала, кәртә тулы мал-тыуар ине. Еңел булманы, иремә лә, миңә лә. Һәм бер ялға ҡайтҡанында ирем Себергә башҡа бармаҫҡа булды. Ләкин өйҙә лә ятып булмай, донъя көтөргә кәрәк һәм беҙ мал башын күбәйтеп, үҙебеҙгә эшләргә ҡарар иттек.

Был эшкә тотоноуыбыҙға 15 йыл. Бөгөнгө көндә ҡурала 15 баш һыйыр, үҫтереп һатырға алған 20 бәләкәй быҙау, 5 ат. Шулай уҡ яҙ етеү менән өйрәк һәм ҡаҙ бәпкәләре алып, көҙ-ҡыш буйы итен һатабыҙ. Һыйырҙарҙың һөтөн эшкәртеп һатыу миненң иңдә. Яҙын-көҙөн көн аша, ҡышын аҙнаһына ике тапҡыр Мәләүез ҡалаһына һөт, ҡаймаҡ, эремсек һатырға алып барам. Тәүҙә баҙарҙа торҙом, хәҙер үҙемдең даими клиенттарым бар, улар телефон аша заказ бирә лә, мин өйҙәренә йөрөтөп таратып сығам. Ошо эшмәкәрлектән килгән аҡсаға өйгә аҙыҡ-түлек алына, ут, газ һәм башҡа түләүҙәр индерелә, шулай уҡ көндәлек башҡа ваҡ-төйәккә лә китә. Ә ирем башлыса ит һатыу менән шөғөлләнә һәм ул аҡсаға эре әйберҙәр - йортҡа йыһаз, кейем, машина, трактор өсөн запас частар һәм башҡалар һатып алына. Шулай уҡ икебеҙ ҙә алған килемебеҙҙән ул-былға аҡса төйнәп барабыҙ: мин машина өсөн кредитҡа игенә индерәм, ирем тракторының займын ҡаплай. Эйе, көнө-төнө эшләһәк тә, бөтә техника кредитта, сөнки миллионлап ҡулаҡса йыйыу мөмкинлеге юҡ.

Еңел түгел шөғөлөбөҙ. Иртә таңдан кискә тиклем беҙ тышта, йәйҙе лә күрмәйбеҙ, тиерлек, сөнки ирем ҡараңғы төшкәнсе бесән эшләү менән мәшғүл, ә мал-тыуар, ҡош-ҡорт ҡарау миңә һәм балаларға ҡала. Бесән эшләү үҙе бер мәшәҡәт. Ул арала ауыл көтөүен көтәбеҙ, мал күп булғас, ярты йәй буйы уларҙы көтөү беҙҙең иңдә, тип әйтергә мөмкин. Ирем бесәненән айырылып, көтөүгә сыға, йә кеше яллайбыҙ. Шулай уҡ бесән эшләү араһында урындағы фермерҙарға ашлыҡтарын йыйыша һәм эше өсөн малға ҡышҡылыҡҡа етерлек ашлыҡ ала. Йәйгеләккә икешәр тиҫтә башмаҡты ҡырға сығарып, "электр көтөүсеһенә" тапшырабыҙ. Уларҙы ла даими ҡарап торорға кәрәк: кәртәгә эт-мажар инмәгәнме, һыуҙары бөтмәгәнме, сит-ят йөрөмәйме, тигәндәй.

Дәүләт эшендәге һымаҡ, беҙҙең шәмбе-йәкшәмбе юҡ, отпуск ҡаралмаған. Шулай уҡ ҡайҙалыр ҡырға ҡунаҡҡа барыу, ял итергә китеү мәсьәләһе лә бик ауыр хәл ителә, сөнки ул тиклем малды ҡарарға, һыйырҙарҙы һауып, һөтөн эш итеп алырға теләүселәр юҡ. Хатта аҡса түләп тә кеше табыуы ауыр. Бик ныҡ кәрәк булғанда, иремдең апайҙары ҡоткара - донъяны ҡарап ҡалалар. Хәҙер ҡыҙҙар ҙа үҫте, шөкөр, ҙур ярҙамсылар, малайыбыҙ ҙа ҡул араһына инеп бара.

Ҡайһы саҡта барыһына ла ҡул һелтәп, малдарҙы үҙебеҙгә һөт-ит бирерлек итеп кенә ҡалдырғы килә, сөнки физик йәһәттән дә, мораль яҡтан да арытылған. Ләкин балаларҙы уҡытырға кәрәк, кредиттар бар, аҡсаһыҙ нисек йәшәмәк кәрәк! Шуға күрә, еңел булмаһа ла, эшмәкәрлегебеҙҙе ташламайбыҙ. Йәмле яҙ етте, баҡса эштәренә тотондоҡ хәҙер. Баҡса уңышын да арттырып һатыуға сығарам - һарымһаҡ, һуған, помидор һәм ҡыярымды алырға теләүселәр күп. Бер ниндәй химикат ҡушмайынса, һипмәйенсә үҫтергән йәшелсә-емеш һәр ваҡытта ла үҙ ҡулланыусыһын таба.

Ошолай итеп, бер минутҡа ла туҡтамайынса йүгереп, барыһына өлгөрөп донъя көтөп ятабыҙ. Йәшәйешебеҙҙең кимәле ниндәй булыуы тик үҙебеҙҙән ҡулда, шуға тәгәрмәстәге тейен һымаҡ әйләнәбеҙ, ләкин зарланмайбыҙ. Һаулыҡ булһа, бөтә эштәрҙе алып барырға, хыялдарҙы ысынбарлыҡ итергә, матур тормошта йәшәргә була. Шуға күрә һаулыҡ булһын да, донъялар имен-тыныс торһон.

Кәсебебеҙҙе бар йәһәттән дә файҙалы тип әйтә алам. Беҙгә аҡсаһы килә, һөт-итебеҙҙе һатып алғандар үҙҙәренә экологик йәһәттән таҙа аҙыҡ-түлек ашап кинәнә. Дәүләткә тейешле түләмдәрен индереп барабыҙ, тимәк, ил ҡаҙнаһын тултырыуҙа ла үҙ өлөшөбеҙҙе индерәбеҙ.

**Лена АБДРАХМАНОВА** яҙып алды.

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# УҒРЫЛЫҠ - МӘҢГЕЛЕК ХУРЛЫҠ

**АҠШ властары шашҡандан-шаша түгелме, йәмәғәт? Оятһыҙ рәүештә уғрылыҡҡа тиклем барып еттеләр бит. Америка Конгресының вәкилдәр палатаһы ике партия араһындағы тартыштарҙан һуң Украина өсөн 61 млрд доллар бүлеү хаҡында закон проектын хуплап, уны раҫланы, өҫтәүенә, Израилгә 26,4 млрд доллар хәрби ярҙам тураһында проект ҡабул итте.**

Ул ғына ла түгел, уғрылыҡ тигәндән, вәкилдәр палатаһы Рәсәйҙең АҠШ банкындағы суверенлы активтарына ҡул һуҙҙы: күпселек тауыш менән уны Украина файҙаһына конфискациялау хаҡында закон проектын хупланы. Был хаҡта РФ Сит ил эштәре министрлығы белдереүенсә, АҠШ властары миллиардлаған доллар күләмендә ярҙам бүлеп, Киевты һуңғы украин ҡалғансы һуғышыrға мәжбүр итә һәм АҠШ-та буласаҡ ноябрь һайлауҙарына тиклем Зеленский режимын һаҡлап ҡалырға маташа. Сөнки был президент һайлауҙарында Джо Байдендың "йөҙөн" ҡотҡарып ҡалыуы ихтимал, тип өмөт ителә, күрәһең.

Шуныһы ла мәғлүм булды. АҠШ Киевты ҡорал менән генә түгел, ә "тере көс" менән дә тәьмин итмәксе: Украинаның АҠШ илселегенә өҫтәмә рәүештә 60-лаған кәңәшсе ебәреү күҙаллана. Был ғына ла етмәй, Вашингтон Европа илдәрен дә үҙ "өлгөһө"нә эйәрергә һөсләй: Халыҡ-ара валюта фонды һәм Бөтөн донъя банкы ултырышында Америка чиновниктары Европа коллегаларына уларҙа һаҡланыусы Рәсәй аҡсаларын да тотонорға ҡоторта. Ләкин Евроберләшмә бер баштан күберәк һәм бөтөнләйе менән аҡылынан шашмаған әле, күрәһең: улар Рәсәй аҡсаһын уғрыларса тартып алыуҙан баш тарта һәм бының менән, әлбиттә, халыҡ-ара хоҡуҡтарҙы тупаҫ рәүештә боҙорға һәм инвесторҙары ышаныскын ҡаҡшатырға теләмәй. Өҫтәүенә, улар Рәсәй тарафынан да ниндәй яуап булырын күҙаллай, әлбиттә. The Washington Post гәзите яҙып сығыуынса, Европа чиновниктары Американың ҡыҫтауҙарына ризаһыҙлыҡ белдерә һәм аңлай: былай хәүефле юлға баҫыуҙың эҙәмтәһенән Америка күпселек Рәсәй аҡсаһын тотоусы Европаға "ышыҡланып" ҡалмаҡсы, сөнки Рәсәй ҙә яуапһыҙ ҡалмаясаҡ. Украинала махсус хәрби операция башланғандан һуң Евроберләшмә һәм G7 Рәсәйҙән үҙҙәрендә һаҡланыусы 300-ләп млрд евро аҡсаһына "тыйыу" һалды, шуның 280 млрд евроһы - Евроберләшмә банкыларына ята. Европа Үҙәк Банкы башҡа инвесторҙар алдында абруйын юғалтыу ихтималлығы хаҡында иҫкәртеп, берләшмә ағзаларына Киевты финанслауҙың башҡа юлдарын эҙләргә тәҡдим итә.

Америка властарының хаттин ашыуына тағы бер миҫал: АҠШ-тың Дәүләт секретары Энтони Блинкен 24-26 апрелдәрҙә Ҡытайға эш сәфәре менән барып, Рәсәйҙең Хәрби-сәнәғәт комплексына ярҙам иткәне өсөн Пекинды шелтәләп, уға санкциялар менән янап ҡайтырға йыйына икән, тип хәбәр итә Financial Times. "Рәсәйгә ҡорал менән бәйле технологиялар ебәреүҙән туҡтамаһа, АҠШ Ҡытайға ҡарата яза саралары ҡулланасаҡ" , - тип әйтелә гәзит мәҡәләһендә. Ҡытай властары иһә Американы Украина конфликтында бер тарафҡа ла ярҙам итмәүенә ышандырырға тырыша. Бынан алдараҡ Ҡытай банктарының Рәсәйҙән килгән түләүҙәрҙе юандарҙа ҡабул итмәүенең ғиллә һе бар ине, әйтәгүр...

АҠШ властарының бер ниндәй сиктәргә һыйышһыҙ ҡылыҡтары таяҡтың икенсе осо булып, уның үҙ башына тос ҡына төшөүе лә ихтимал, тип баһа бирә төрлө сығанаҡтар күҙәтеүселәре. Ҡырым сәйәсмәне, эксперт Владимир Джаралла НОВОСТИ Рәсәй агентлығына белдереүенсә, Рәсәй активына ҡул һуҙып, АҠШ донъя финанс хәләнең тоторохлоҡ сиген ашатланы. Рәсәй активын тартып алыу буйынса һуңғы һүҙҙе Байден һәм уның финанс кәңәшселәре әйтәсәк. Көнбайыш булмаған донъя хәҙер үҙ байлығын һаҡлау һәм уны үҫтереүҙең башҡа юлдарын эҙләргә кәрәклекте аңланы. Франция сәйәсмәне, "Патриот" партияһы етәксеһе, Европарламент һайлауҙарына кандидат Флориан Филиппо үҙенең социаль селтәрендә яҙыуынса, АҠШ-тың Украинаға туҡтауһыҙ ҡорал һәм финанс ярҙамы яңынан-яңы ҡорбандарға сәбәп кенә буласаҡ. Сәйәсмән ватандаштарын Киевҡа башҡаса аҡса ла, ҡорал да ебәрмәскә һәм Францияны НАТО-нан сығырға саҡырҙы. Бының менән ул тиҙерәк һөйләшеп килешеүҙәргә һәм тыныслыҡты яҡынайтыуға теләк белдерҙе.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан баҡсасылары үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәтте коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ эшмәкәрлегенә арналған "Минең баҡсам - Башҡортостан" телеграм-каналынан белергә мөмкин. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең агросәнәғәт комплексы һәм тәбиғәттән файҙаланыу департаменты директоры Светлана Белова хәбәр итте. "Каналда беҙ көн һайын тәжрибә уртаҡлашабыҙ, ҡануниәттәге үҙгәрештәр, дәүләт ярҙамы саралары һәм улар менән нисек файҙаланыу тураһында һөйләйбеҙ, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән бүлешәбеҙ", - тине эксперт.

✓Республика Премьер-министры Андрей Назаров белдереүенсә, бөгөн республикала 59 мендән ашыу күп балалы ғаилә бар. Волга буйында был - беренсе, ә илдә 7-се урын. Маҡсатлы йүнәлеш - ошондай ғаиләләрҙең һанын 10 процентҡа арттырыу. Башҡортостанда тыуым кимәле ил буйынса уртаса күрһәткестәргә тулыһынса тап килә - 1000 кешегә 8,7 бала. Сабыйҙар үлеме күрһәткесе ике тапҡырға кәмегән. Шулай уҡ Андрей Назаров үлем осраҡтарының кәмеүе тураһында белдерҙе. Былтыр әлеге күрһәткес 1000 кешегә 11,7 осраҡ тәшкил иткән. Был иһә 25 йыл эсендә иң түбән кимәл.

✓Башҡортостандың акробаттар командаһы, Рәсәй беренселегендә көмөш миҙалдар яулап, илдең йыйылма командаһына инде. Был хаҡта республиканың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. Спорт акробатикаһы буйынса турнир Свердловск өлкәһендә үтте. Башҡортостан исеменән унда Октябрьскийҙан Алана Зиннәтуллина һәм Роман Гилев сығыш яһаны. Спортсылар менән тренерҙар Олеся Муллағәлиева, Владислав Куприянов, Фирүзә Вәлиева һәм Сабина Вәлиуллина шөғөлләнә.

✓16 апрелдә Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә ҡойма ямғырҙар ябырылды. Ҡалала хәрәкәт туҡтап ҡалды, аэропорттыһыу баҫты. Шуға күрә авиакомпаниялар Дубайға осоштарҙы ваҡытлыса туҡтатты. 6 һәм 17 апрелдә Дубай аэропортын һәм ҡаланы һыу баҫыу һөҙөмтәһендә Рәсәйҙән 5 меңгә яҡын пассажирҙың рейсы тотҡарланыуы билдәлe. "Flydubai" авиакомпанияһының Өфөнән Дубайға осоштары тергеҙеләсәк. "Барлыҡ һорауҙар буйынса авиакомпанияға мөрәжәғәт итергә кәңәш бирәбеҙ", - тип белдерҙеләр аэропорттың матбуғат хеҙмәтендә.

✓ *Башҡортостан иһә миңә һыу туризмының бөтөн матурлығын асты, бының өсөн уға рәхмәтлемен. Йәйгеһен асыласаҡ донъя кимәлендәге Ишеү слаломы үҙәге лә яңы инвестиция проекттары үҫешенә килтерер тип ышанам.*



*ҠЫҪҠАСА*

# УЛАР БАҺАҒА ЛАЙЫҠ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 19 апрелдә Башҡортостан Республикаһы муниципаль берәмектәренең XIV съезының пленар ултырышында ил етәкселегенең, йәмғиәттең муниципаль власҡа күберәк иғтибар бүлеүен билдәләне.** Ғинуарҙа тәүге тапҡыр илебеҙҙә "Кесе Ватан - Рәсәй көсө" форумы уҙҙы, унда миллионлы ҡала мэрҙарынан алып ауыл биләмәләре башлыҡтарына тиклем 7,5 мең кеше йыйылды. Республикабыҙҙан ҙур делегация барҙы. Президенттың "Рәсәйҙең атҡаҙанған урындағы үҙидара хеҙмәткәре" маҡтаулы исемен булдырыуы әһәмиәтле ваҡиға булды. "Шуға бәйле күп коллегаларыбыҙҙың дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдарында ҙур эш стажына эйә булыуын иҫәпкә алып, "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған дәүләт һәм муниципаль хеҙмәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем булдырырға ҡарар иттек. Оҙаҡ йылдар Ватанға лайыҡлы хеҙмәт иткән коллегаларҙың эшен юғары баһаларға кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

✓**Өфөлә Ағиҙел йылғаһының яр буйын йәшелләндереү башлана. Коммуналь хеҙмәт белгестәре декоратив ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртыу өсөн сапсаҡтар һәм вазондар әҙерләй.** Быйыл Өфөлә мобиль йәшелләндереү тип нарыҡланған сара сиктәрендә Ленин, Мостай Кәрим, Киров, Карл Маркс, Чернышевский, Октябрь революцияһы, Коммунистик, Пушкин, Совет, Свердлов, Ғафури, Яңы мостовой, Цурюпа, Вәлиди, Аксаков, Пархоменко, Октябрь проспекты, Яр буйы һәм Революцион урамдарында төрлө үҫемлектәр ултыртылған 557 сапсаҡ ҡуйыласаҡ. Был эштәр өсөн кәрәк булған 31,2 млн һум аҡса менән төбәк һәм ҡала бюджеты тәьмин итә. Эштәр апрель аҙағында тамамланырға тейеш, сапсаҡтарға тал, спирея, күк һырға, туя һәм башҡа үҫемлектәр ултыртыла. Баш ҡаланы төҙөкләндереү айлыҡтарында йылына ике тапҡыр "Йәшел Башҡортостан" акцияһын уҙғарыу традицияға әйләнде. Яҙғы этапты тиҙ арала башҡарып сығыу фарыз: ер йылыныу менән үҫемлектәрҙә әүҙем вегетация фазаһы башланғансы уларҙы ултыртып өлгөрөргә кәрәк. Был беҙҙә апрелдең өсөнсө ун көнлөгөнә тура килә. Быйыл "Йәшел Башҡортостан" акцияһының берҙәм көнө 27 апрелдә була.

✓**Башҡортостандың мас-рестлинг (мас-рестлинг - таяҡ тартышыу, яҡуттарҙың милли спорт төрө) буйынса йыйылма командаһы Санкт-Петербургта Рәсәй чемпионатында һәм беренселегендә өс көмөш һәм биш бронза миҙал яуланы.** Таһир Моталлапов, Ренат Бәҙертдинов һәм Алексей Сычев көмөш миҙалға лайыҡ булды. Ильян Низакаев, Тимур Зарипов, Даниель Низамов, Денис Ваһапов һәм Ләйлә Шаһисолтанова бронза миҙал менән бүләкләнде. "Башҡортостан Республикаһының йыйылма командаһы өсөн был - Рәсәйҙең өсөнсө чемпионаты. Беренсе турнирҙа бер миҙал алдылар, икенсеһендә - алты, был юлы һигеҙ. Артабан да үҫешергә, яңы спорт бейеклектәренә өлгәшергә ниәтләйбеҙ!" - тип Башҡортостандың мас-рестлинг федерацияһы етәксеһе Раил Бикмаевтың һүҙҙәрен килтерә спорт министрлығы.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# БАШҠОРТОСТАН...

## Рәсәйҙең иң көслө терәктәренең береһе

**(Башы 1-се биттә).**

- Башҡортостан - үҙ мәҙәниәте, тарихи ҡомартҡылары, шулай уҡ иҡтисади һәм инвестицион мөмкинлектәре булған үҙенсәлекле төбәк, - тип билдәләне Сергей Лавров үҙенең сығышында. - Ул Европа менән Азия киҫелешендә, хәҙерге көндә донъя иҡтисадында һәм инвестиция эшмәкәрлегендә төп урынды биләгән Евразия континентының тап үҙәгендә урынлашҡан. Был да төбәктең тарихында һәм бөгөнгөһөндә сағылмай ҡалмай. Башҡортостанда 100-ҙән ашыу милләт вәкиле йәшәй, уларҙың диндәре, телдәре төрлө. Рәсәй халыҡтарына хас төшөнсәләр - бер-береңдең тарихына, мәҙәниәтенә, йолаларына, йәшәү рәүешенә тәрән ихтирам уларға ла хас. 2007 йылда Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуына 450 йыллыҡты байрам иткәндә ил Президенты Владимир Путин да республикабыҙҙы Рәсәйҙең иң көслө терәктәренең береһе тип юҡҡа ғына атаманы. Милләттәрҙең һәм улар тотҡан диндәрҙең үҙ-ара татыу йәшәй алыуының матур өлгөһө лә бында - был да бөгөнгө көн өсөн бик мөһим.

Сит ил эштәре министрлығында республиканы ошолай презентациялау аҙаҡҡы тапҡыр 20 йыл элек булған. Ғөмүмән, министр был осрашыуҙа башҡорттарҙың тарихи үткәне - 1812 йылғы Наполеонға ҡаршы һуғышта, шулай уҡ Икенсе донъя, Бөйөк Ватан һуғыштарындағы еңеүгә индергән өлөштәре тураһында ла телгә алды. Ошо яугирҙарҙың нәҫелдәре бөгөн бөтөн Рәсәй халҡы менән тағы ла илдең суверенитеты һәм бөтөнлөгөн һаҡлап ҡалыу өсөн көрәш юлында. "Башҡортостан халҡының махсус хәрби операцияның изге һәм ғәҙел маҡсаттарына өлгәшеүҙәге өлөшө ҙур", - тине Сергей Лавров.

Министр билдәләүенсә, Башҡортостан бөгөн Рәсәйҙең алдынғы индустриаль һәм агросәнәғәт республикаларының береһе. Уның төп тармаҡтары донъя иҡтисадының йүнәлештәре менән тура килә - нефть табыу һәм эшкәртеү, химия һәм нефть химияһы, электр энергетикаһы, металлургия, ауыл хужалығы. Республика Рәсәйҙең инвестиция климаты торошо милли рейтингына даими инә. Ул тышҡы бәйләнештәрҙе лә нығыта, бөгөн республиканың 105 дәүләт менән тышҡы сауҙа килешеүҙәре бар. Өфө ҙур халыҡ-ара форумдар һәм фестивалдәрҙе



лә йыш ҡабул итә, 2015 йылда унда БРИКС һәм ШОС саммиттары үтте.

Сергей Лавров Башҡортостандың тәбиғи байлыҡтары менән һоҡланыуын да белдерҙе: "Көньяҡ Уралға Мәскәүҙән ике сәғәттә осоп барып етеп була. Кем был мөмкинлек менән файҙаланмаған, йылдың бөтөн миҙгелендә лә күркәм булған был төбәкте барып күрегеҙ. Тауҙарға сәйәхәт, тау саңғыһы курорттары, файҙалы сығанаҡтар, тарихи экскурсиялар хайран итер. МГИМО-ла белем алғанда студент отрядтары менән дүрт тапҡыр Себер, Алыҫ Көнсығышта булырға тура килде, Тыуған илде өйрәнеүем ошонда башланды. Башҡортостан иһә миңә һыу туризмының бөтөн матурлығын асты, бының өсөн уға рәхмәтлемен. Йәйгеһен асыласаҡ донъя кимәлендәге Ишеү слаломы үҙәге лә был йәһәттән яңы инвестиция проекттары үҫешенә килтерер тип ышанам. Быйыл Өфө үҙенең матур юбилейын билдәләй, бөгөнгө презентацияны ошо дата айҡанлы уҙасаҡ сараларҙың башы тип иҫәпләргә кәңәш итәм", - тине министр.

Радий Хәбиров үҙенең сығышында республиканың илдең эске тулайым продуктының ҙур өлөшөн тәшкил итеүсе төп ун төбәк иҫәбенә инеүе тураһында һөйләне. Иҡтисадтың төп йүнәлештәре булып нефть табыу һәм эшкәртеү, машиналар, шул иҫәптән авиация двигателдәре төҙөү, ауыл хужалығы тора. "Иген, йәшелсәләр, үҫемлек майы, һөт, шәкәр, йәғни, стратегик продукттар менән үҙебеҙҙе үҙебеҙ тәьмин итәбеҙ. Улар менән халыҡ-ара баҙарға сығырға ла әҙербеҙ. Сит ил партнерҙарын беҙҙең мосолман республикаһы булыуыбыҙ һәм хәләл стандарттарына ярашлы продукция етештереүебеҙ ҡыҙыҡһындыра",- тине республика Башлығы. Әлеге мәлдә Башҡортостан донъяның 100-ҙән ашыу дәүләте менән эшмәкәрлек итә. 2023 йылдың һөҙөмтәләре буйынса, Азия илдәре менән тауар әйләнеше - 6 процентҡа, импорт 29 процентҡа артҡан. Африка илдәре менән тауар әйләнеше - 3, импорт 14 процентҡа үҫкән. "Былар барыһы ла бер-береңә дуҫтарса, ихтирамлы ҡараш булғанда һәр дәүләт, һәр компания үҙенә партнерҙар таба алыуы тураһында һөйләй", - тип билдәләне Радий Хәбиров һәм Башҡортостандың инсвестицион мөмкинлектәренә айырыуса баҫым яһап, уның территорияһындағы 12 технопарк, 19 сәнәғәт паркы, "Алға" үҙенсәлекле иҡтисади зона менән таныштырҙы.

- Башҡортостан - һөҙөмтәле инвестицион төбәк. Шул уҡ ваҡытта беҙ партнерҙар менән тәрән мөнәсәбәттәр яҡлы. Мәҫәлән, Беларусь Республикаһы менән аралаша торғас, бер-беребеҙгә күберәкте бирә алыуыбыҙ асыҡланды. 9 ай эсендә ауыл хужалығы техникаһы етештереүсе компания төҙөп тә ҡуйҙыҡ. Әле Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өсөн ҙур, ауыр техника сығарасаҡ предприятие төҙөлә. Был башҡа дәүләттәр менән эшмәкәрлек итеүҙә бик яҡшы миҫал, - тине республика Башлығы һәм фән һәм мәғариф өлкәһендәге яңылыҡтар менән уртаҡлашты. Уның билдәләүенсә, әлеге мәлдә республикала 10 меңдән ашыу сит ил студенты белем ала. Был өлкәләге хеҙмәттәшлек артабан да үҫәсәк әле.

- Ҙур саралар үткәреүҙе ышанып тапшырған өсөн ил етәкселегенә рәхмәтлебеҙ. Былтыр Рәсәй һәм Беларусь төбәктәренең X форумы үтте. Быйыл РФ Президенты ҡарары менән Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәк-ара хеҙмәттәшлеге форумы буласаҡ. 2024 йылда беҙҙе ҙур байрам көтә, Өфөнөң 450 йылығын билдәләйәсәкбеҙ. Барығыҙҙы ла ошо байрамда көтәбеҙ!

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Журналистарҙың киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре һәм блогерҙар менән осрашыуында Өфөнөң 450 йыллығын билдәләү тураһында һорауға яуап биреп, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баш ҡалала тормошто уңайлыраҡ итеү төп маҡсат булыуын әйтте. "Был ҡалала таҙалыҡты һәм тәртипте тәьмин итеү, ремонт эштәре аша башҡарыла. Икенсе бурыс - федераль һәм халыҡ-ара кимәлдә Өфө тураһында белдереү", - тине республика етәксеһе.

✓Өфөлә 22 апрелдән "Бурыслы" иҫкәртеү саралары башланды, улар аҙна дауамында бара. "Рәсәй Федерацияһы Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 20.25-се статьяһына ярашлы, штрафты 60 көн эсендә түләмәгән осраҡта икеләтә штраф йәки 15 тәүлеккә ҡулға алыу, йә иһә 50 сәғәткә тиклем мәжбүри эштәр янай. Штрафты 20 көн эсендә түләгәндә, уның 50 процентын ғына ҡаплау мөмкинлеге бар", - тип белдерҙеләр ведомствола. Түләнмәгән штрафтар тураһында мәғлүмәтте дәүләт автоинспекцияһының рәсми сайтында, шулай уҡ дәүләт хеҙмәттәре порталында алырға мөмкин.

✓Өфө мэры Ратмир Мәүлиев Башҡортостандың баш ҡалаһында фонтандарҙы асыу көнө һәм ваҡыты тураһында хәбәр итте. Әйтәйек, Мостай Кәрим һәйкәле янындағы фонтан- 25 апрелдә, "Ете ҡыҙ" - 25 апрелдә, Салауат Юлаев майҙанындағы "Ҡурай" - 25 апрелдә, Совет майҙанындағы фонтан - 25 апрелдә, Имәндәр скверындағы "Бейеүсе торналар" - 1 майҙа, Орджоникидзе исемендәге майҙанда фонтан - 25 апрелдә, "Сәғәт" - 25 апрелдә, "Ҡашҡаҙан" паркындағы фонтан - 26 апрелдә, ә Беренсе Май паркындағы фонтан 1 майҙа асыла.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында ике көн эсендә 24 водитель эскән килеш тотолған, тип хәбәр итә ҡала дәүләт автоинспекцияһының матбуғат хеҙмәте. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, үткән ял көндәрендә Өфөлә 49 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, өс аварияла биш кеше йәрәхәтләнгән, уларҙың береһе - бала. Юл-патруль хеҙмәте инспекторҙары юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙың 635 осрағына юл ҡуймаған. Тәғәйенләнмәгән урындарҙа юл аша сыҡҡан өсөн 122 йәйәүлегә штраф һалынған. Водителдәргә килгәндә, улар йышыраҡ хәүефһеҙлек ҡайышын тағырға онотҡан (90), йәйәүлеләргә юл бирмәгән (47), балаларҙы ташыу ҡағиҙәләрен боҙған (32), юл билдәләренә иғтибар итмәгән (9).

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН




# КҮҘМӘ-КҮҘ ҠАРАШЫП...

**Донъя кимәлендәге Евразия фәнни-мәғариф үҙәгенең вуз-ара кампусында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика һәм Башҡортостанда эшләгән федераль киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән осрашты.**

Осрашыуҙа Радий Фәрит улы ни өсөн икенсе мөҙҙәткә кандидатураһын күрһәтергә ҡарар итеүен аңлатты. Уның һүҙҙәренсә, ул һайлауҙа ҡатнашыу-ҡатнашмау тураһында уйланғанда бер нисә фекерҙән сығып эш иткән. Беренсенән, башланған проекттарҙы тамамларға кәрәк. Уларҙың ҡайһы берҙәрен дүрт-биш йыл эсендә тамамлау күҙаллана. "Икенсенән, беҙ яугир егеттәребеҙгә ярҙам күрһәтеү эшен тейешенсә яйға һалдыҡ. Барлыҡ ошо ярҙам сараларын, гуманитар ылауҙарҙы беләһегеҙ. Шундай ваҡытта был эштән китергә кәрәкмәй тип иҫәпләйем, - тигән фекерҙә Радий Хәбиров. - Халыҡҡа биргән вәғәҙәләребеҙҙе үтәйбеҙ. Ләкин тамамланырға тейешле эштәр ҙә бар әле". Радий Хәбиров икенсе мөҙҙәткә һайланырға хәл итеүенең өсөнсө сәбәбен дә әйтте. Ошо ауыр осорҙо бергәләп үткәреп ебәрергә кәрәк, тине ул."Барыһы ла килеп сығыр тип уйлайым. Беҙ республика менән бергә ковидты ла үттек. Махсус хәрби операция, иҡтисадыбыҙ өсөн ҙур проблемалар тыуҙырған ҡот осҡос баҫым, санкция сәйәсәте менән бәйле ауырлыҡтарҙы һеҙҙең менән бергә үтәбеҙ. Быны аңларға кәрәк. Шуға күрә миңә хәҙер әлеге осорҙо бергә үтергә кәрәк кеүек тойола, - тине Башҡортостан Башлығы. - Әлбиттә, ихтыяж да бар. Унһыҙ эшләргә ярамай. Аҙаҡтан республика ғорурлана алырҙай эштәр башҡарырға теләйем".

Башҡортостан Башлығы шулай уҡ ошо осрашыуҙа яңғыраған һорауға яуап биреп, Рәсәй Президенты Владимир Путин менән эшлекле осрашыуҙың ябыҡ өлөшөндә ниндәй мәсьәләләрҙе күтәреүҙәре тураһында һөйләне. Унда Махсус хәрби операцияға ярҙам күрһәтеү, шулай уҡ республикала күләмле проекттарҙы ғәмәлгә ашырыуға бәйле мәсьәләләр хаҡында һөйләштек, тип билдәләне Радий Хәбиров. "Алдыбыҙҙа Өфөнөң Көньяҡ урау юлын төҙөү бурысы тора. Быйыл комплекстың ҙур өлөшөн тамамларбыҙ. Бынан тыш, Пугачев урамында тәртип урынлаштырырбыҙ. Был иһә хаҡы 30 миллиард һумдан ашыу тәшкил иткән етди проект", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Башҡортостан Башлығы Владимир Путин менән һуғыш ветерандары өсөн клиник госпиталь, лидерҙар мәктәбен төҙөү мәсьәләләрен дә тикшереүҙәрен әйтте. Улар буйынса федераль кимәлдә ыңғай ҡарарҙар ҡабул ителеүен дә билдәләне.

# ЮБИЛЕЙ САРАЛАРЫ...

**Республика менән идара итеү үҙәгендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө ҡалаһының 450 йыллыҡ юбилейына әҙерлек барышы буйынса сираттағы кәңәшмә уҙғарҙы.**

Һөйләшеүҙең төп темаһы - алда торған ҙур байрамды бай йөкмәткеле итеү. Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев республика министрлыҡтары һәм ведомстволары менән бергә байрамдың календарь планы төҙөлөп, унда мәҙәни, спорт, мәғрифәти-ағартыу, конгресс форматындағы саралар, йәштәр проекттары индерелеүе хаҡында әйтеп уҙҙы. Билдәләнеүенсә, барлығы 100-ҙән ашыу сара ҡаралған, шул иҫәптән федераль кимәлдәгеләре лә. Ҡырҡлап үҙенә күрә уникаль күренеш булған саралар Өфөлә тәүгә уҙғарыласаҡ, ә традицион фестивалдәр һәм форумдар күләмлерәк форматта ойоштороласаҡ. Мәҫәлән, 1 июндә "Ватан" этнопаркында VK Fest тип аталған ҙур сәнғәт байрамында Рәсәйҙең әйҙәүсе башҡарыусылары сығыш яһап, Красноярск, Сочи, Санкт-Петербург һәм Мәскәүҙә уҙғарыласаҡ шундай уҡ фестивалдәр серияһын асып ебәрәсәк.

Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, 2024 йылда Өфө ҙур мәҙәни фестивалдәр һәм проекттар майҙансығына әүереләсәк, тип белдерҙе. Улар иҫәбендә - халыҡ-ара "Туғанлыҡ" театр фестивале, "Өфөлә Шаляпин кисәләре" тип нарыҡланған Халыҡ-ара опера сәнғәте фестивале, "Китап-байрам" Халыҡ-ара китап йәрминкәһе, "Денис Мацуев тәҡдим итә" фестивале, "Көҙ романтикаһы" классик музыка фестивале, "Евразия йөрәге" фестивале, "Геройҙар заманы" Бөтөн Рәсәй патриотик йыр конкурсы, "Әйҙә, уйнарға" Бөтөн Рәсәй уйындар фестивале һәм башҡа күп саралар. Унан башҡа йәй айҙарында Башҡортостандың баш ҡалаһында Ҙур театр, Александра театры, Сергей Образцов исемендәге Үҙәк ҡурсаҡ театры гастролдәре уҙғарыласаҡ, шулай уҡ Третьяков галереяһы һәм Дәүләт Эрмитажы күргәҙмәләре ойоштороласаҡ.

Өфөнөң 450 йыллығының төп байрам көнө 2024 йылдың 31 августына тәғәйенләнгән. Өфө халҡы һәм ҡунаҡтар өсөн концерт-күңел асыу программалары бер юлы өс майҙансыҡта - "Ватан" этнопаркында, Ленин исемендәге һәм Машина төҙөүселәр майҙандарында күрһәтеләсәк. Юбилей йылының иң ҙур ваҡиғаларынан "Рәсәй - спорт державаһы" Халыҡ-ара спорт форумын, "Рәсәй һәм Ҡаҙағстан араһында төбәк-ара хеҙмәттәшлек" тигән юбилей форумын атарға була. Һуңғыһы егерменсе тапҡыр уҙғарыла.

Башҡортостан Башлығы апрель аҙағына тиклем ваҡиғалар картаһын - барса юбилей сараларының ентекле графигын әҙерләргә ҡушты. Иң элгәре мәҙәни, спорт, конгресс форматындағы һәм гастрономик сараларға иғтибар ителәсәк. Ул туристарҙы һәм ҡунаҡтарҙы байрам сараларына йәлеп итеү өсөн мәғлүмәти эште көсәйтергә ҡушты.

Кәңәшмәлә эре юбилей объекттарын төҙөү барышы ҡаралды. 2024 йылдың көҙөнә Октябрь районында Көрәш һарайын сафҡа индереү күҙаллана. Унда төҙөлөш эштәре график буйынса бара. Был майҙансыҡта XII Халыҡ-ара "Рәсәй - спорт державаһы" форумы уҙғарыласаҡ. Инорс микрорайонында ишеү слаломы комплексының беренсе сиратын төҙөү тамамланып килә. Йәй айҙарында комплекстың тирәяғы төҙөкләндереләсәк. 2024 йылдың көҙөнә спорт ҡоролмаһы ярыштар уҙғарыуға әҙер булырға тейеш.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ЯРЛЫҠАПОВ АБРАР БӘҘРЕТДИН УЛЫ

А.Б. Ярлыҡапов - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, ғалим-иҡтисадсы.

Абрар Бәҙретдин улы Ярлыҡапов 1942 йылдың 12 июлендә Башҡорт АССР-ы Матрай районы (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Йылайыр районы) Матрай ауылында тыуған. Ата-бабалары түңгәүер ырыуынан. Атаһы Бәҙретдин Бөйөк Ватан һуғышында һәләк була. Абрар тыуған ауылында 7 йыллыҡ мәктәптә уҡый, урта белемде Юлдыбай мәктәбендә ала.

1964 йылда Башҡортостан ауыл хужалығы институтын тамамлай. 1964 йылдан Йылайыр районы "Башҡорт" совхозында өлкән агроном булып эшләй. 1965 йылдан ВЛКСМ-дың Хәйбулла район комитетының 1-се секретары.

1966-1968 йылдарҙа ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитетының 2-се секретары, 1968-1972 йылдарҙа - 1-се секретарь.

1974 йылда Мәскәүҙәге КПСС Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы Юғары партия мәктәбен тамамлай. 1974-1978 йылдарҙа ВЛКСМ Үҙәк Комитетының бүлек мөдире вазифаһын башҡара. 1981 йылда КПСС Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы ижтимағи фәндәр академияһын тамамлай. 1981 йылдан КПСС Үҙәк Комитетының инструкторы, консультанты булып эшләй.

1985-1987 йылдарҙа Афғанстанда оҙайлы командировкала була. 1991-1995 йылдарҙа Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан Республикаһының тулы хоҡуҡлы вәкиле. 1993 йылда Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы проектын әҙерләүҙә ҡатнаша.

1997 йылда докторлыҡ диссертацияһын яҡлай һәм иҡтисад фәндәре докторы ғилми дәрәжәһен ала. Фәнни эшмәкәрлеге агросәнәғәт комплексының инновацион үҫешенә, ерҙе иҡтисади баһалауҙың теорияһы һәм практикаһына арнала. 35-тән ашыу фәнни хеҙмәт авторы.

1999 йылдан - Мәскәү ҡалаһы хөкүмәтенең Төбәк-ара бәйләнештәр һәм милли сәйәсәт комитеты рәйесенең урынбаҫары булып эшләй. 2003 йылдан Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Рәсәй халыҡ хужалығы һәм дәүләт хеҙмәте академияһында уҡыта. 2007 йылдан профессор.

КПСС-тың XXIV съезы делегаты, ВЛКСМ-дың өс съезында Үҙәк комитет ағзаһы итеп һайлана.Башҡорт АССР-ы Юғары Советының 7-8-се саҡырылыш депутаты итеп һайлана.

Наградалары: Халыҡтар дуҫлығы (1988), "Почёт Билдәһе"(1971), Салауат Юлаев (2022) ордендары кавалеры. ВЛКСМ Үҙәк Комитетының, Рәсәй Дәүләт Думаһының, Мәскәү Хөкүмәтенең, Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумының, үҙе эшләгән академияның, башҡа юғары органдарҙың Маҡтау грамоталарына лайыҡ була.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Слива

Слива май-июндә сәскә ата. Емештәре һары, ҡыҙыл, күкһел, йәшел булырға мөмкин. Слива август-сентябрҙә өлгөрә. Емешендә глюкоза, фруктоза, сахароза, сорбит, алма, лимон, шарап һәм хинин кислотаһы бар. Витаминдарҙан Р-әүҙем берләшмәләр, В2 һәм каротин күп. Дауаланғанда емешен, ҡайырын, яңы япрағын һәм һөйәген ҡулланалар. Емешен яңы көйөнә лә, киптереп тә ашайҙар, ә ҡайырын - тик яңы көйө. Слива эс ҡатҡанда яҡшы сара. Емеше склерозға ҡаршы, бәүел ҡыуҙырыу, ауыртыуҙы баҫыусы сара. Япрағы яраны уңалтырға ярҙам итә. Яңы слива капиллярҙар көбөн нығытыуға һәм үткәреүсәнлеген яҡшыртырға булышлыҡ итә. Ә уның һөйәгенән активлаштырылған күмер әҙерләргә була.

❖ Ангина булғанда 1 балғалаҡ киптерелгән слива япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Тамаҡты сайҡатырға.

❖ Эс ҡатҡанда слива ҡайнатылған һыуҙы эсеү файҙалы, йәки 10-15 киптерелгән сливаны йоҡларҙан алда ашап ятырға кәрәк. Шулай уҡ яңы йыйылған сливаны һөйәгенән таҙартып, ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә һәм көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр стакан эсергә була.

❖ Һалҡын тейгәндә 1 балғалаҡ ваҡланған слива ҡайырына 1,5 стакан һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға. Шунан 30 минут төнәтеп, һөҙөргә. Бал ҡушып, йылы көйө эсергә.

## Лимон

❖ Оҙайлы ауырыуҙан һуң бала хәлһеҙләнгәндә, ябыҡҡанда 4 лимон һуты, 1 стакан алоэ һуты, 500 грамм әстерхан сәтләүегe, 300 грамм балды бергә ҡушырға кәрәк һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1-әр балғалаҡ йәки десерт ҡалағы менән ашатырға.

❖ Тәмәке тартыусыларға лимон ашау кәрәк. Сөнки тәмәке тартҡанда юғалтҡан аскорбин кислотаһын лимондағы С витамины тулыландырырға ярҙам итә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡарағош**

**(Большой подорлик)**



Ҡарағош бөркөттән, көсөргәндән кәүҙәгә бәләкәйерәк. Ҡарағусҡыл-һоро төҫтә, ҡойроғонон өҫкө яғы аҡһылыраҡ. Күҙе, суҡышы, тырнаҡтары ҡара, тәпәйе - һары. Башҡа бөркөттәрҙән айырмалы яғы - танау ҡыуышлығы йоморо. Ата ҡош ҡанат йәйгәндә 158-176 см-ға етә, кәүҙә оҙонлоғо - 65-70 см. Инә ҡош 67-73 см.

Тиҙ оса, ергә төшөп кимереүселәргә, бөжәктәргә һунар итә, табышын һаҡлап, ҡуҙғалмайынса ла тора ала. Уның суҡышы ла, тәпәйҙәре лә көсһөҙөрәк. Юғалып барған ҡош иҫәпләнә, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән.

Әле XX быуатта ғына ҡарағош республиканың бөтөн урындарында ла оя ҡора, хәҙер ул һирәк осрай. 1994-2001 йылдарҙа Кушнаренко районында урманда осрай, 2001 йылда беҙҙең ғалимдар уны Дүртөйлө районы Йылан дәүләт заказнигында күҙәтә. 2004, 2006 йылдарҙа Нуғай ауылы эргәһендә лә күрергә мөмкинлек тыуа. Ырымбур өлкәһендә оя ҡороп йәшәй.

Асыҡ яландары булған урмандарҙы үҙ итә, мотлаҡ һыу яткылығы ла булырға тейеш, шунда оя ҡороп, бала сығара. Кешенән ҡурҡа, хатта баҫып ултырған еренән дә осоп китә.

Башлыса ерҙә һунар итә, шулай ҙа ҡайһы саҡта һыуҙан балыҡ та тота. Ваҡ кимереүселәр, һирәгерәк ҡоштар, эре бөжәктәр менән туҡлана. Уралда көн иткән ҡарағоштар өсөн тәлмәрйендәр, кеҫәртке-ләр, йыландар ҙа ризыҡ.

Барлыҡ йыртҡыс ҡоштар кеүек, моногам. Парын оҙаҡҡа һайлай, ояларын да бер нисә йылдар буйына ҡуллана. Ҡар ирегән ваҡытта ҡайта, был сама менән апрелдең икенсе яртыһына тура килә. Ояһын ағасҡа, 3-25 м бейеклектә ҡора.

Май башында инә ҡош йомортҡа һала башлай, 1-3, һирәгерәк 2 йомортҡа була. Уны 40-42 көн баҫа, ә бәпкәләрҙе туйындырыуҙа икәүләп ҡатнашалар. Бәпкәләрҙең береһе генә, башта сыҡҡаны иҫән ҡала, ул 6-7 аҙналыҡ сағында оса башлай. Тағы ла 1 ай ғаилә ояһы тирәһендә көн итә, унан йылы яҡҡа осорға әҙерләнә.

Был төрҙө һаҡлап ҡалыу өсөн ҡурсаулыҡтар төҙөргә, шулай уҡ уларға йәшәргә шарттар тыуҙырыу өсөн яландарҙы, һыу яткылыҡтарын һаҡларға кәрәк.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА*

# БЫЛ ШАЯРЫУҘЫҢ...

## аҙағы хәйерле булырмы?



**Балалар баҡсаһында үтәсәк байрамда балаға кәнфит булып кейенергә кәрәк булды ла, кәнфиттәр һатылған магазин эҙләргә тура килгәйне. Тәүге осрағанының ишеге төбөндә 12-13 йәшлек ике ҡыҙ балаға иғтибар итә ҡуйҙым. Нык борсолоп, сиккә етеп ыуаланыуҙарына аптыраным хатта: береһе баҫҡан ерендә ҡатҡан да, һөйләшерлек тә, ҡуҙғалырлыҡ та хәле юҡ. Икенсеһе, буйға бәләкәсерәге, үҙен-үҙе дәртләндереп, ҡыйыуланып китеп магазиндың баҫҡысына баҫа ла, кире әхирәте эргәһенә китә. Мин эшемде теүәлләп сыҡҡанда ла улар ошо торошта ине.**

Ошо ваҡиға тураһында аҙаҡ та уйланып йөрөнөм. Бер ҡарағанда, ситтән көлкө тойолһа ла, уларҙың ниндәйҙер күңелһеҙ хәлгә тарыуы аңлашылып тора ине. Ни эшләп эргәләренә барманым, һораманым икән, тигәндә яуап үҙенән-үҙе килде: магазинда кәнфит кенә түгел, ә бөгөн йәштәр, үсмерҙәр араһында бик популяр булған электрон тәмәкеләр һатылған бүлек тә бар ине бит. Был ҡыҙҙар, бәлки, үҙҙәре өсөн дә түгел, башҡа берәйһе, әйтәйек, кластағы барлыҡ балаларҙы ҡурҡытып, үҙ ихтыярында бейетеп тотҡан берәйһе өсөн тап шуны һатып алырға маташҡандыр?

Йәшерерлек бер нәмә лә юҡ, тәмәке тартыусы малайҙар беҙ мәктәптә уҡығанда ла булды. Уҡытыусылар уларҙы айырым да, башҡалар алдында ла әрләй ине, тик ундайҙар, беренсенән, күп түгел ине, икенсенән, уларҙың был ҡылыҡтары нисектер балалыҡ шаярыуы булараҡ ҡына ҡабул ителде. Бөгөн, бәхетһеҙгә, уҡыусыларҙың күпселеге ошолай, әммә замансараҡ ысул менән "шаяра" - электрон тәмәке тарта. Ҡала ғына түгел, ауылдарҙа ла. Күптән түгел социаль селтәрҙәрҙә тотош башҡорт милләтенән генә тиерлек торған район уҡытыусыһының яҙмаһы күренеп ҡалды. "Дәрестә шаярып ултырғас, электрон тәмәкеһен тартып алып, атайын йә әсәйен килеп алһын тип әйткәйнем, әсәһе телефондан шылтыратып: "Улыма тәмәкеһен кире бирегеҙ, үҙем һатып алып бирҙем, ҡыйбат ҡына тора - мең ярым", - тип әрләне" - уның ҡыҫҡаса эстәлеге ошолай ине. Үткән аҙнала Башҡортостанда йәшәүсе һәр алтынсы тәмәкесе электрон сигаретка өҫтөнлөк бирә, тип яҙғайны яңылыҡ сығанаҡтары, тимәк, ошо һәр алтынсы тәмәкесе - мәктәп уҡыусыһы һәм студент. Сөнки беҙ күреп өйрәнгән тәмәкеселәр һаны ла кәмемәгән, олалар - элеккесә, ә балалар йәштәрсә тәмәке көйрәтә хәҙер. Республика буйынса был күрһәткестәр дөйөм Рәсәй кимәленә тап килә. 2023 йылда вейп һәм тәмәкене йылытыу системаһын ҡулланыусылар 14,3 проценттан 17,8 процентҡа тиклем артҡан. Быны Росстат алған яуаптарға таянып FinExpertiza аудитор-консалтинг селтәре иҫәпләп сығарған. Проценттарҙы һандарға әйләндереп ҡарағанда, Рәсәйҙә дөйөм алғанда 2023 йылда электрон ҡоролмалар менән ҡулланыусылар 4,5 миллионға етеп, һуңғы биш йыл эсендә 46 тапҡырға күбәйгән.

Баш ҡалала белем алған һәр икенсе студенттың ҡулында - ошо уҡ заманса ҡорамалдар. Элек беҙҙе яны уҡыу йылына юҡ аҡсаһын бар итеп тулыһынса кейендереп ебәрә ине әсәйҙәр, хәҙер уға ҡушып ҡулдарына вейп йәки тәмәке йылытыу системаһы ла тотторалар, ахыры - ниңә, башҡаларҙан хур булып йөрөмәһен, кемдеке - шуныҡы.

Нимә һуң ул тәмәкене йылытыу системаһы тип уҡығандар ҙа барҙыр араһыҙҙа. Тукталыштарҙа төрлө емеш-еләк еҫе сығарып төтәтеп торғандарҙы күрһәгеҙ, шул инде электрон сигарет. Никотинлы шыйыҡсаны йылытып, быуын һулайҙар. Әммә уның классик тәмәкенән өҫтөнлөгө юҡ. Интернетта уны хәүефһеҙ, тип яҙалар ҙа ул, әммә был - ялған. Психиатр-наркологтар билдәләүенсә, ундағы глицерин, пропиленгликоль, никотин үпкә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә килтерә, онкология барлыҡҡа килеү хәүефе лә арта. Ябай тәмәкене кеше бер нисә сәғәткә бер тарта, ә был ҡорамал ауыҙҙан төшмәй, тимәк, үсмер йәки йәш кеше уны күпме ҡулланғанын да контролдә тота алмай. Электрон тәмәке тартып инфаркт кисергән балалар һаны ике тапҡырға артҡан. Рәсәй ҡалаларында ошо сәбәпле ҡапыл ғына үлгән уҡыусылар ҙа булғыланы. Әммә кеше миҫалында һабаҡ алыу беҙҙенсә түгел инде ул. Эйе, тышлыҡтары береһенән-береһе стиллерәк, тимәк, ул "текә" булып күренеү сығанағы, ҡулда һәм кейемдә тәмәке еҫе ҡалмауы иһә атай менән әсәйҙән йәшенеп тартыу мөмкинлеге бирә. Теге ике ҡыҙ баланы иҫкә төшөрһәк, закон тарафынан балиғ булмағандарға хатта никотинһыҙ вейп һатыу тыйылыуға ҡарамаҫтан, уларға әйә булыу артыҡ ҡыйынлыҡ тыуҙырмай, бары тик ҡыйыулыҡ ҡына кәрәк. Йәки әсәйендә электрон тәмәке зыянлы түгел тигәнгә күндерергә ҡала, шунда инде ул һиңә уны үҙе һатып аласаҡ.

РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ла, депутаттар ҙа был бәлә тураһында яҡшы хәбәрҙар. Министрлыҡ 2024 йылдың 1 мартынан электрон тәмәке шыйыҡлыҡтарына өҫтәргә ярамай торған матдәләр исемлеген булдырҙы. Хәҙер, мәҫәлән, емеш-еләк тәме сығып торған тәмәке булмаясаҡ. Шулай уҡ илдә вейптарҙы һатыуҙы тулыһынса тыйыу хаҡында ла имеш-мимештәр ҡуйыра. Әлегә балиғ булмағандарға уларҙы һатҡан өсөн штраф күләме яраййһы ҙурайҙы.

Дәүләт был мәсьәләне хоҡуҡи яҡтан ныҡыта ла, тик бында барыбер иң мөһим эште ғаилә башҡарырға тейеш. Балалар тәмәке продукцияһын ҡулланыуҙы ғәҙәт итмәһен, ул уларға тиҫтерҙәре араһында текә булып күренергә мөмкинлек биреүсе берҙән-бер сара булмаһын ине. Быының өсөн бихисап ысулдар бар - спорт менән шөғөлләң, ижади һәләттәрендә үҫтер, ошо рәүешле үҙеңдә ышаныс тәрбиәлә, башҡалар алдында ихтирам һәм абруй яула. Бында уның төп терәге атай менән әсәй булырға тейеш. Психотроп, наркотик матдә, йәки ҡорал тип табылмағанға күрә, мәктәп уҡытыусылары вейптарҙы, электрон тәмәкеләрҙе уҡыусынан тартып ала алмай, әммә үҙ балаларыбыҙҙы бынан тыйыу өсөн барлыҡ нигеҙҙәребеҙ ҙә, хоҡуғыбыҙ ҙа бар. Электрон тәмәке генә ул, барыһы ла тарта бит тимәгеҙ, был шаярыуҙың аҙағы хәйерле булырына өмөт юҡ.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ӨЙҘӘ УЛТЫРҒАНСЫ...



**Гәзиттә ошо рубриканы гелән күҙәтеп барам. Республика халҡының аҡса эшләүҙең әллә күпме төрлө юлдарын, ысулдарын табыуына һоҡланып ҡарайым. Бигерәк тә йәштәрҙең уңышына һөйөнәм. Ата-әсәһенән генә көтөп ултырмайынса, үҙҙәре лә финанс мәсьәләһен хәл итергә тырышҡан уңғандарға "Афарин", тиергә генә ҡала.**

Мин үҙем хаҡлы ялда. Мәләүез ҡалаһында бабайым менән үҙ йортобоҙҙа йәшәйбеҙ, балаларҙың үҙ тормошо, килеп-китеп кенә йөрөйҙәр. Хаҡлы ялға сығып, бер-ике йыл ял итеп алынғайны, өйҙә ултырыуы күңелһеҙ була башланы. Баҡса эшенә әллә ни барым юҡ хәҙер, берҙән, олоғайылған. Икенсенән, икебеҙгә ҙур баҡсалар тултырып картуф һәм башҡа емеш-еләк сәсеү ҙә кәрәкмәй. Балалар бәләкәй саҡта мал тотток, ләкин бөгөнгә көндә әбей менән бабайға был мәшәҡәт тә, ауыр ҙа.

Көндәр йылытыу менән бабай үҙе һымаҡ балыҡ ҡармаҡларға яратыусылар менән йылға-күлдәр буйынан ҡайтмай. Миңә өйҙә айырыуса күңелһеҙ, шуға күрә яҡындағы баҙарға сығып, таныш-тоноштар менән аралашып, көн үткәрергә әүәҫләнеп алдым. Ара-тирә өйҙә үрсеткән гөлдәрҙе лә һатҡылаһым һәм бер көндә үҙемә өҫтәмә аҡса килтергән шөғөл дә таптым. Ауылдың уңған ҡатын-ҡыҙҙары район үҙәгенә алып килеп һөт, ҡаймаҡ, май һаталар. Ләкин барыһының да оҙаҡ ултырырға ваҡыты юҡ, өй мәшәҡәттәре көтә, балалар мәктәптән ҡайтҡансы өйҙә булырға кәрәк. Һәм мин улар менән һөйләшеп-килешеп, уларҙың һөт аҙыҡтарын күмертәләп һатып алып, бер аҙ хаҡ өҫтәп, берәмләп һата башланым. Ашығыр торған эшем юҡ, баҙарҙа оҙаҡ ҡына ултырып, һатып бөтөп ҡайтып китәм. Уларға ла файҙа, алып килеп тапшырып ҡайта ла китәләр, миңә лә килем. Өҫтәүенә, көнөм файҙалы һәм күңелле үтә.

Айырыуса һөт һәм ҡаймаҡ алыусылар күп, улар бик һирәк осраҡта ғына һатылмай ҡала. Ә май, ҡоротто өйгә алып ҡайтып, икенсе көндә тағы ла алып сығам йәки өйҙән һатам. Нисек булһа ла, был шөғөлөм минең өсөн файҙа ғына.

Бөгөнгә яҙмам, бәлки, минең кеүек хаҡлы ялда булғандарға өҡшар һәм улар ҙа ошо эш менән шөғөлләнә башлар. Пенсияға өҫтәмә килем килеп торһа, күңелдәр ҙә көрәйеп китә, шулай уҡ кеше араһында булаһың.

**Сәбилә ӘҒЛИУЛЛИНА.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Алтынсы бүлек. Башҡорт - урта быуаттарҙағы Башҡортостандың баш ҡалаһы.



Кешенең таш скульптураһы һыныҡы ҡаласыҡтың иртә этабына ҡарай (V-VII бб.).Уның битенең уң яртыһы һынландырылған: йөҙөнөң һыҙаттары, танауы, ауыҙы, мыйығы һәм муйыны оҫта итеп эшләнгән. Скульптураның тышы бик ентекле итеп шымартылған. Скульптураның ҙурлығы 20-30 см тирәһе, ул Урта Азия статуэткаларын хәтерләтә. Моғайын, ул ҡаласыҡтың тәүге кешеләренеке булғандыр. Арҡаһында түңәрәк элмәге булған күләмле ат фигураһы уникаль табылдыҡтар иҫәбенә инә. Фигурала аттың ялы, теҙген ҡайыштары асыҡ төшөрөлгән.

VI-VIII быуаттарҙа Көньяҡ Уралда ҡойоп эшләнгән яҫы ат фигуралары, сулпылар киң таралыу таба. Ҡаласыҡта IX-XII, XIII-XV быуаттарға ҡараған табылдыҡтар күп, ул хаҡта тейешле бүлектәрҙә яҙыласаҡ. Өфө-II ҡаласығының һәм Өфө ҡалаһы биләмәләрендә уның менән бәйле башҡа ҡомартҡыларҙың тарихи урынын Өфө-II ҡаласығының ҡәлғә стеналары артында бик ҙур некрополь - ҡаласыҡ кешеләренең зыяраты булыуын иҫәпкә алмайынса билдәләп булмай. Бында ҡурғандар булыуы хаҡында XVII-XX быуаттарҙа уҡ билдәле булған.Архив сығанаҡтарынан күренеүенсә, ҡурғандар Ағиҙел йылғаһының текә уң яҡ яры буйлап, Яңы мостовой урамы кимәленән Туҡай, Фрунзе (Вәлиди) Пушкин урамдары кварталдарынан мосолман зыяратына тиклем тотош массив булып ятҡан. Сутолока йылғаһынан көньягынан, йәғни Дуҫлыҡ монументы урынлашҡан ҡаласыҡтан Өфө йылғаһы тамағына тиклем шундай уҡ ҡурғандар булыуы хаҡында мәғлүмәт бар. Ҡала төньяҡҡа табан һәм көньяҡ йүнәлешендә үҫә барған һайын ҡурғандар ер эштәре барышында емерелеп бөткән, улар өҫтөнән таш түшәлгән урамдар һалынған, уларҙың байтағы XVII-XVIII быуаттарҙа Өфө кешеләре тарафынан ҡырағайзарса таланған, был хаҡта документаль раҫлауҙар бар.

Некрополь ҙурлығы менән дә, һирәк металдарҙан яһалған әйберҙәре бай булыуы менән айырылып тора. Ошо күрһәткестәр буйынса барса Көнсығыш Европала, шулай уҡ Көнбайыш Себерҙә һәм Ҡаҙағстандың яҡындағы төбәктәрендә уға тиңе юҡ. Рустарҙың бында күсеп килгән тәүге быуындары, тиҙ генә байырға теләп, ошо ҡурғандарҙы күпләп талай башлауы хаҡында мәғлүмәт бар, был хаҡтағы хәбәр батша Алексей Михайловичҡа билдәле булған, һәм ул 1669 йылда ни сәбәпле Башҡортостанда "...рус кешеләре татар ҡәберҙәренән йәки зыяраттарынан төрлө алтын һәм көмөш әйберҙәрҙе һәм һауыт-һабаларҙы ҡаҙып сығара...", - тип ҡыҙыҡһына, барса табылдыҡтар хаҡында ентекле мәғлүмәт бирергә бойора. Улар тураһында хатта Көнбайыш Европа ғалимдары ла хәбәрҙәр була. Байтаҡ ҡына оппоненттарыбыҙ Өфө-II ҡаласығын йәнәштәге шул уҡ дәүерҙең башҡа ҡомартҡыларҙан айырып ҡарарға тырыша. Әммә уларҙы иҫәпкә алмайынса тикшеренеүсе Өфө-II ҡаласығына һәм уның менән бәйле ҡомартҡылар комплексына объектив баһа бирә алмаясаҡ. Емертелгәндәр араһында алдараҡ иҫкә алынған иң бай ҡомартҡыларҙан Ленин һәм Пушкин урамдары сатында, медицина университетының административ бинаһы аҫтынан табылған ҡәберлекте атап була. Ул 1936 йылда табыла. Алтын әйберҙәрҙең бер өләшө юғала, әммә һаҡланып ҡалғандары һаны, үлсәмдәре һәм юғары сифатлы булыуҙары менән хайран итә. Улар араһында алтын бөртөктәре менән биҙәлгән һәм таштар ҡуйылған медальон-кулондар иң ҙур төркөмдө хасил итә, ике балдаҡтың ҡырыйҙарында түңәрәк үҫентеләре булған таҡтасыҡтары, алтын сымдан яһалған балдаҡҡа парлап беркетелгән өс үҫентеле ярым овал формаһындағы сулпылар бар. Йөрәккә оҡшатып эшләнгән һәм башҡа формалы, түңәрәк рамкалы ҡайыш баштары, ҡыҙыл әбәк түҡыма ҡалдыҡтары табыла. Был бай предметтар йыйылмаһының VII-VIII быуаттар сигендә йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙыҡы булғанлығы шик тыуҙырмай. Был датаны б.э. VIII быуатындағы Дунай болгарҙары мәҙәниәтенең яҡын аналогтары - медальондар, ҡайыш баштары раҫлай. 1786 йылда хәҙерге Республика Йорто районында, Туҡай урамында шундай уҡ бай ҡәберлек табыла. Ул саҡтағы төбәкте өйрәнеүселәр хәбәр итеүенсә, бында ер төҙөлөшө эштәре барышында ҙур ҡурған ҡаҙып асыла, унан 2 кг ашыу алтын әйберҙәр алына, уларҙы Өфө кешеләре императрица Екатерина II бүләк итә. Ҡомартҡының датаһы һәм мәҙәни сығышына авторҙарҙың емертелгән 10 ҡәберҙә 1977 йылда ҡатлап тикшереү барышында бер ни тиклем асыҡлыҡ инде. Был ҡәберҙәр 1786 ҡаҙылған ҡурғанға яҡын урынлашҡан, Республика Йортона табан коммуникациялар үткәреү өсөн ҡаҙылған оҙон трашеянан табылды. Ҡәберҙәрҙә түңәрәк таҡтасыҡлы алтын балдаҡ, алтын ялатылған таралғылар, ҡайышҡа беркетелгән биҙәүестәр, шулай уҡ турбаҫлылар өсөн типик булған балсыҡ һауыт-һаба арсыҡтары табылды. Күрәһең, 1786 йылда ҡаҙып асылған ҡомартҡы ла турбаҫлылар дәүеренә (V-VIII бб.) тура килә.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*ПАРСАЛАР, ӘЙТЕМСӘЛӘР*

# ФӘННИ ҺӘМ ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ



Бер заман фәнгә нигеҙләнгән медицина тыуып һәм нығынып киткәс, ул халыҡ медицинаһын танымай һәм инҡар итә башлай. Ул үҙенең халыҡсан ғилеменән үҫеп сыҡҡанын онота. Йәнәһе, фәнгә, яһалма дарыуҙарға таянған медицина ғына кеше һаулығын тәьмин итә, бөтә ауырыуҙарҙы еңә ала.

Ошо уңай менән боронғо бер грек легендаһын иҫкә төшөргә килә.

Борон гректарҙың кешеләрҙе дауалаусы Асклений исемле аллаһы булған, ти. Уны аҙағыраҡ динлеләр Эскулап тип атағандар. Иҫкесә Эскулап-врач исеме ана шунан ҡалған.

Ошо Эскулаптың Панацея һәм Гигия исемле ике ҡыҙы булған. Улар атаһынан күреп, дауалау һөнәрен үҙләштергәндәр. Оло һәм ҡыйыуыраҡ ҡыҙы Панацея кешеләрҙе төрлө ауырыуҙарҙан ҡотҡарыу өсөн берҙән-бер көслө дарыу уйлап табыу хаҡында хыялланған, ти.

- Бөтә ауырыуҙар өсөн дә берҙән-бер көслө дарыу булыуы мөмкин түгел,- тип бәхәсләшкән кесе ҡыҙы Гигия, - ауырыуҙар төрлө булғас, дарыуҙарҙың, дауалау ысулдарының да төрлө булмай сараһы юҡ.

- Улай түгел, атайыбыҙ дауалаусы алла икән, уға беҙ берҙән-бер ҡөҙрәтле дарыу табышырға тейешбеҙ,- тип һүҙен бирмәгән Панацея.

- Кеше тәбиғәт балаһы, уны тәбиғи шарттарҙа, тәбиғәт саралары менән дауаларға кәрәк, - тигән Гигия. - Кешеләргә тәбиғәт ҡанундарын өйрәтәйек, кешеләргә үҙ һаулыҡтарын үҙҙәре һаҡларға, тәбиғи дауалар ҡулланырға күндерәйек.

Панацея һеңлеһе менән килешмәйенсә, бары дарыуҙар, микстуралар, ауырыу ағзаны киҫеп ташлау ысулы менән дауалауын белгән. Гигия иһә шифалы үләндәр, таҙа аҙыҡ, физик күнегеү, рухи һауыҡтырыу ысулдарына нығыраҡ таянған. Атаһы Эскулап кесе ҡыҙының уңышлыраҡ дауалауына ышанған, ти.

Был боронғо легенда, асылда, халыҡ медицинаһы менән фәнни медицинаның үҙ-ара көрәшен һәм тәүгеһенең, ни генә тимәһендәр, күп яҡтан өҫтөнлөгөн аңлата. Фәнни медицина үҙе шул халыҡ медицинаһынан яралған, уның күп тәжрибәләрен үҙләштергән бит. Тәбиғәт кешеһен тәбиғи саралар, тәбиғәт дарыуҙары менән дауалау отошлораҡ.

Һаулыҡ ҡағиҙәләре тормош ҡанундарына буйһона.

Атаҡлы япон профессоры Кацуздо Ниши кешене дауалауҙың яңы системаһын тәҡдим итә. Ул ғалим халыҡ медицинаһы нигеҙендә тәбиғәт дарыуҙары һәм тәбиғи саралар менән дауалауҙы яҡлай.

Күберәк химик дарыуҙарға, хирургияға ҡоролған хәҙерге медицинаға кире диагноз ҡуя. Хәҙерге фәнни медицина үҙе ауырый, кешеләр һаулығына йыш ҡына зыян килтерә, ти ул. Зыянһыҙ, дарыуһыҙ дауаларға өндәй.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

1945 йылдың 19 ғинуарында корпусҡа яңы бурыс ҡуйыла: Константынув, Лютомерск; Вымуслув, Пабьянице (Лодзь ҡалаһы янында) тораҡ пункттарын, унан һуң Лодзь ҡалаһын азат итергә. Беренсе эшелонда 14-се, 15-се гв. атлы дивизиялары хәрәкәт итә, 16-сы гв. атлы дивизияһы - икенсе эшелонда. Беҙҙең атлылар 19 ғинуарҙа кис менән Лодзь ҡалаһына яҡынлаша һәм төнгә алышта ҡаланы дошмандан азат итә. 21 ғинуарҙа 14-се һәм 15-се гв. атлы дивизиялары Калиш ҡалаһын һәм бер нисә ауылды ала. 21 ғинуарҙа 16-сы гв. атлы дивизияһы полктары корпус составында Варта йылғаһына яҡынлаша. 60-сы гв. атлы полкының разведка взводы командиры, гв. старшинаһы И. П. Папышев, полктың төп көстәренең килеп етеүен көтөп тормай, взводы менән йылға аша сыға һәм Ландсберг ҡалаһына бәреп инә. Яугирҙар ҡала ситендә немецтарҙың миномет батареяһын урынлаштырылғанын күреп ҡала, һәм Папышев уны ҡулға төшөрөргә ҡарар итә. Разведчиктар, аттарында сабышып килеп, немец минометсыларына һөжүм итә. Дошмандың 9 минометы трофейға алына, уларҙың расчеттары әсиргә төшә. 60-сы атлы полктың эскадрондары, Варта йылғаһын кисеп сығып, Ландсберг ҡалаһын ала. 23 ғинуарҙа 16-сы гв. атлы дивизияһы беренсе эшелонға сыға. Авангардта барған14-се һәм 16-сы дивизиялар 24 ғинуарҙа Яроцин ҡалаһын ала. 62-се гв. атлы полкы Ниес, Клейн, Шмилен тигән ауылдарҙы азат итә. Беҙҙең атлылар, башлыса, төндәрен һөжүмгә бара, сөнки дошман авиацияһы төнөн осмай. Корпус частары Одер йылғаһына яҡынлаша, бынан Польша һәм Германия сиге үтә.16-сы гв. атлы дивизияһы Фауге - Обра каналына килеп етә. Уның көнбайыш ярында - оборонаға махсус әҙерләнгән, нығытылған Радевитш ҡалаһы. Немец окоптары алдына 5 рәттән торған сәнскеле тимер сыбыҡ һуҙылған. Унан башҡа дошман, өйҙәргә ышығланып, урам һуғышына ла әҙер. 62-се гв. атлы полкы командиры, гв. подполковнигы М. Г. Маркарян бик тәүәккәл эш итә. Ул ҡалаға ике яҡтан һөжүм итергә була. Өлк. лейтенант А. К. Кәримовтың эскадроны канал аша сығып, немец гарнизонының тылына үтеп инә. Башҡа эскадрондар ҡалаға көнсығыштан һөжүм башлай. Гвардиясылар ҡаланың көнбайыш ҡырыйына яҡынлашҡан мәлдә дошман резервтарын контратакаға күтәрә. Ауыр хәл килеп тыуа, етмәһә эскадрон командиры ла ҡаты яралана. Шундай киҫкен мәлдә взвод командиры, гв. лейтенанты Емельян Михайлюк эскадронды атакаға күтәрә. Шул уҡ ваҡытта ҡаланың көнсығыш яғынан башҡа эскадрондар һөжүмгә күсә. Шулай итеп, дошмандың Одер йылғаһынан йыраҡ булмаған ҡаршы тороу үҙәге бик тиҙ арала ҡыйратыла. 7-се гв. атлы корпусы Косьцян, Вольтшин, Цюллихау йүнәлешендә һөжүмен дауам итеп, 29 ғинуарға Ретенберг и Грюнберг ҡалаларын алыу маҡсатын ҡуя. 29 ғинуарҙа 15-се гв. атлы дивизияһы Клайниц и Швартнитц ҡалаларын ала һәм Одер йылғаһы буйында разведка башлай. Совет ғәскәрҙәре Германия еренә аяҡ баҫа. Корпус Одер йылғаһы аша сығырға әҙерләнә. Барса частарҙа Юғары Баш командующий И.В. Сталиндың бойороғон уҡып ишеттерәләр. Одерға беренселәрҙән булып14-се гв. атлы дивизияһының 56-сы гв. атлы полкы килеп етә (командиры - гв. подполковнигы Б. И. Кобяков, ул 1943 йылда 16-сы гв. атлы дивизияһында полк менән командалыҡ итә). Иң әлек Одер йылғаһы аша 14-се гв. атлы дивизияһының 54-се һәм 56-сы гв. полктары сыға. Улар артынса 16-сы гв. атлы дивизияһы ла ҡуҙғала.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Димләп өйләндереү булғанда ғаиләләр тарҡалмаған, сөнки ундай ғәмәл оят һаналған. Хәҙер заман башҡа, заң башҡа, ул йолаларға кире ҡайтыу мөмкин дә түгел.***



# БЫЛ гражданлыҡ хәлендә

**Хәлең нисек, тип һорайбыҙ дуҫ-иштәрҙән, таныштарҙан, туғандарҙан, бергә эшләгән коллегаларҙан һәм башҡаларҙан. Һәр кем кәйефенә ҡарап яуап бирә. Ә кәйеф тигәнең үҙгәреп тора - иртән салт аяҙ, кискә болотло булыуы ла ихтимал. Ә бит әҙәм балаһының үҙгәрмәй торған торошо - гражданлыҡ хәле бар. Был турала ЗАГС, йәғни Гражданлыҡ хәле акттарын теркәү бүлеге хеҙмәткәрҙәре яҡшы белә: ҡайҙа-ҡасан тыуғанһың, өйләнгәнһеңме-юҡмы, бәлки, айырылышҡанһыңдыр, әллә исемеңде үҙгәрткең киләме, был баланың атаһы һинме һәм башҡаһы. Белеү генә түгел, бында гражданлыҡ хәлең тураһында мисәт һуғып, дәүләт тарафынан нығытылған ҡағыҙ ҙа тотторалар ҡулыңа. Һине ҡыҙыҡһындырған кеше был донъяламы, әллә баҡыйлыҡҡа күскәнме - был мәғлүмәт тә бар гражданлыҡ акттарын биреүсе ойошмала. Ҡыҫҡаһы, Сибайҙың ЗАГС бүлеге етәксеһе Айгөл БОХАРБАЕВА менән ошо мөғжизәле йорттоң эштәре тураһында һөйләштек. Уны уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ:**

## Ғаилә - ил көҙгөһө

Һәр ғаиләнең именлеге илдәге иҡтисади торошҡа туранан-тура бәйле, яңы ғаиләләрҙең күберәк барлыҡҡа килеүе, йә тарҡалыуы, балаларҙың тыуыу һаны артыуы, йә кәмеүе дәүләттең социаль хәлен билдәләй. Әлеге ваҡытта 1997-2000 йылдарҙа тыуған балалар ғаилә ҡороу йәшенә етте. Иҫләйһегеҙҙер, 1998 йылдың авгусындағы дефолт арҡаһында көтөлмәгән ауырлыҡтарға дусар ителдек. Ул ваҡыттар хәтеремә нык уйылған, сөнки 99-сы йылдың ғинуарында әсәй булдым, беренсе балам тыуҙы. Талон системаһы индерелеүен, магазиндарҙа бер нәмә лә булмауын оноторлоҡ түгел.

Бөгөн йәштәргә шул осор тураһында һөйләһәң, ышанмайҙар, сөнки хәҙер ниндәй магазинға инһәң дә, бөтә нәмә лә бар, уларға гел шулай булған һымаҡ тойола. Ә минең магазиндарҙа пирамида һымаҡ теҙелеп торған консерваларҙан башҡа бер нәмә лә булмауы һаман да күҙ алдымда. Бөгөнгө кеүек смартфондар булһа, фотоға төшөрөп, хәтерҙә ҡалдырыр инек. Ҡот осҡос хәл булды, ул саҡтарҙа асыҡтыҡ тип әйтергә лә була хатта, ашарға аҙыҡ-түлеге, кейергә йүнле кейем дә булманы бит. Етмәһә, ҙур-ҙур предприятиелар ябылып, кешеләр эшһеҙ ҡалды, балалар баҡсалары ябыла башланы, сөнки ул осорҙа балалар бик әҙ тыуҙы, үҙемдең дә ҡабат бала тапмайым, тип уйлауым хәтеремдә. Шулай килеп сыҡты ла, туғыҙ йылдан ғына икенсе балабыҙ булды һәм ул ваҡытта Әсәлек капиталы барлыҡҡа килгәйне. 97-се йылда тыуған балалар төрлө уҡыу йорттарына еңел инде, хатта бюджет урындарына ла, сөнки абитуриенттар һаны бик әҙ ине. Әле улар ғаилә ҡороу йәшендә...

Һуңынан, Әсәлек капиталынан һуң, балалар баҡсаларында урындар етмәй башланы, шул балалар әле мәктәп тамамлай, уларға инде бюджет урындары етмәйәсәк, сөнки улар күп, Аллаһҡа шөкөр. Өсдүрт йылдан никахҡа торoccусылар һаны тағы артасаҡ. 2014 йылдарҙа башланған санкцияларҙан һуң балалар әҙерәк тыуа, әммә 98-се йылдарҙағы һымаҡ түгел.

## Хөрәфәт хафаға һала

Айырылышыуҙар күп, тиҙәр. Никахҡа торған мең ғаиләнең биш йөҙө айырылыша, тип уйларға ярамай, айырылышҡандар иҫәбенә яңы ҡауышҡандар ғына түгел, утыҙар йыллап бергә йәшәп, ғаиләләре тарҡалғандар ҙа инә. Тормош шулай ҡоролғандыр инде, ғаилә ҡороуҙарҙың бит аныҡ ваҡыты, самаһы юҡ. Мәҫәлән, быйылғы йыл кәбисә йылына тура килә, төрлө ырымдарға ышанғандарҙың күбеһе өйләнмәйәсәк. Ирем менән ғаилә ҡорған 96-сы йыл да кәбисә йылы булған, беҙ уны белмәгәнбеҙ ҙә, Аллаһҡа шөкөр, 28-се йыл бергә йәшәйбеҙ. Тимәк, төрлө хөрәфәттәргә ышанған шомло кешеләргә был йылда бала табырға, машина алырға, өй төҙөргә, күсенергә ярамай, килеп сыға түгелме? Йыл буйы бер нәмә лә эшләмәйек һуң әтеү.

Минеңсә, ундай хөрәфәттәргә ышанырға ярамай. Туйҙар, әлбиттә, йәй көндәрендә күберәк була, август айы иң тығыҙ осор. Мосолмандар ураҙа айҙарында туй үткәрмәйҙәр, йола һаҡлайҙар, ололарға хөрмәт күрһәтәләр. Май айында өйләнгәндәр бик һирәк, йәнәһе, ғүмерең буйы этләнеп, интегеп, "маяться" итеп йәшәйәсәкһең. Уйлап ҡараһаң, май айы ла бик ҡулай мәл: донъя йәм-йәшел, саф һауа, ағастар сәскәгә күмелгән, әйҙә, рәхәтләнеп фотоға төш, тәбиғәттең иң матур ваҡытын иҫеңдә ҡалдыр. Етмәһә, кафелар буш була ул осорҙа.

Нумерология, йәғни һандарҙың тылсымлы көсөнә ышанғандар күбәйә өйләнгән ваҡытта. Быйыл шундай дата 24.04.24, 06.06.24 көндәренә тура килә, шул көндәргә ғариза яҙғандар әле үк бар. Башҡортостандың бөтә ЗАГС бүлектәрендә график 2024 йылдың аҙағына тиклем асылған, "Госуслуги" аша йәшәгән урынға ҡарап, теләгән ваҡытта ғаризалар бирергә була.



***Айырылышыуҙар күп, тиҙәр. Никахҡа торған мең ғаиләнең биш йөҙө айырылыша, тип уйларға ярамай, айырылышҡандар иҫәбенә яңы ҡауышҡандар ғына түгел, утыҙар йыллап бергә йәшәп, ғаиләләре тарҡалғандар ҙа инә. Тормош шулай ҡоролғандыр инде, ғаилә ҡороуҙарҙың бит аныҡ ваҡыты, самаһы юҡ. Мәҫәлән, быйылғы йыл кәбисә йылына тура килә, төрлө ырымдарға ышанғандарҙың күбеһе өйләнмәйәсәк. Ирем менән ғаилә ҡорған 96-сы йыл да кәбисә йылы булған, беҙ уны белмәгәнбеҙ ҙә, Аллаһҡа шөкөр, 28-се йыл бергә йәшәйбеҙ. Тимәк, төрлө хөрәфәттәргә ышанған шомло кешеләргә был йылда бала табырға, машина алырға, өй төҙөргә, күсенергә ярамай, килеп сыға түгелме? Йыл буйы бер нәмә лә эшләмәйек һуң әтеү.***

## "Гражданский брак"

Беҙҙән йыш ҡына айырылышыуҙарҙың сәбәптәрен һорайҙар. Улар бит беҙгә судта айырылышып, ҡағыҙ артынан ғына киләләр, беҙ бары акт төҙөп, танытма тапшырабыҙ ғына. Ишетеүемсә, фиктив, уйҙырма айырылышыуҙар ҙа була икән, сәбәптәрен һорау килешмәгән эш. Айырылышып та бергә йәшәгәндәрҙең үҙ ихтыяры, әммә был хаҡта уларҙың ата-әсәһе, хатта балалары ла белмәүе бик сәйер күренеш. Бөгөнгө заманда "гражданский брак" менән йәшәйҙәр, тип уйлайым. Уйланмайынса ғына ЗАГС хеҙмәткәренә: "Эйе, риза", - тип яуап биреү етмәй. Ныҡлы ҡарарға килгәс кенә өйләнһендәр, әгәр шик булһа, өйләнергә ашығырға ярамай, ғаилә ҡорғансы уҡ егет менән ҡыҙ бер-береһенә дәғүәләрен белдереп, әңгәмәләшергә тейештәр.

Мәҫәлән, ҡыҙғанысҡа күрә, күп ҡатын-ҡыҙҙар тәмәке тарта. Ҡай саҡ егет кеше тартмай, ә ҡыҙ көйрәтергә ярата. Был бит иҫ китерлек хәл! Айырыуса ҡатын-ҡыҙ бөтөнләй тәмәке тартмаҫҡа тейеш, шундай ҡыҙҙарҙы ҡатынлыҡҡа алырға риза булған егеттәргә аптырайым. Иң тәүҙә тыуасаҡ балаһы тураһында ҡайғыртырға тейеш буласаҡ әсәй. Шуға егете баштан уҡ, һин тартыуыңды ташла, тип әйтергә бурыслы. Өйләнешкәс, һуң була, ир кешенең башта йәне көйә, конфликттар башлана, хатта айырылышыуға барып етеүҙәре мөмкин. Ә ул ваҡытта бала тыуған булһа? Рәхәт кенә хәл итеп, бала тураһында уйламай, ир бер яҡҡа, ҡатын икенсе яҡҡа таралышалар. Баланың бит ата-әсәһе булырға тейеш тә баһа! Тулы ғаиләлә үҫмәгән баланың туғандары менән рухи бәйләнеше юғала. Наркомандар, игромандар менән, әлбиттә, йәшәп булмаяsaҡ, ә ҡалған осраҡтарҙа килешеп була.

тигән аңлатма киң таралған. Ысынында, гражданлыҡ никахы - ул власть органдары тарафынан рәсми рәүештә теркәлгәндәр, тигәнде аңлата, ә никахты теркәмәйенсә бергә йәшәү законға тап килмәй. Ҡыҙғанысҡа күрә, шундай ғаиләләр һаны арта бара. Бергә йәшәп, законлы никахта булмаған ғаиләләрҙә балалар тыуһа, атайлыҡты билдәләү процедураһы үткәрелә һәм танытма бирелә. Һәр ғаиләнең үҙ сәбәбе бар, әлбиттә. Хөкөм итмәгеҙ, үҙегеҙ ҙә хөкөм ителмәҫһегеҙ, тиҙәр бит. Беҙҙең өсөн иң мөһиме - бергә булһындар, аҡыллы, һау балалар тыуҙырһындар.

## Ризамы? Риза!

Һәр бер пар өйләнер алдынан бер-береһенә: "Ғүмерем буйы бергә йәшәй алырмынмы икән?"- тигән һорауҙы ныҡлап бирергә тейештер,

## Атайлы - арҡалы

Боронғоса, ғаилә ҡороусыларҙың ата-әсәһенең бер-береһен алдан белеүе бөгөнгө көндә һирәк осрай. Димләп өйләндереү булғанда ғаиләләр тарҡалмаған, сөнки ундай ғәмәл оят һаналған. Хәҙер заман башҡа, заң башҡа, ул йолаларға кире ҡайтыу мөмкин дә түгел. Элек ул ысул үҙен аҡлағандыр ҙа, бәлки, әммә бөгөнгө көндә ата-әсәһенә ҡарап ҡына дөрөҫ һығымта яһап булмайҙыр, тим. Әлбиттә, һәйбәт булыр ине лә ул, әммә бергә йәшәмәйенсә бер-береңде белеп булмай. Ҡыҙҙарыбыҙ кейәүгә сығыу йәшенә еткәс, уны яратҡан, ул үҙе яратҡан, бер-береһен, беҙҙе хөрмәт иткән егет булһын, тип теләйбеҙ. Егет яғынан да шулай уйлайҙарҙыр инде. Буласаҡ ҡәйнә күҙлегенән ҡарап, ҡай саҡ аптырап та ҡуям. Беҙ бит балалар өсөн йәшәйбеҙ, беҙҙең бәхет балаларыбыҙҙың бәхетенән тора. Яуаплы ата-әсә булараҡ, буласаҡ кейәүҙең дә тулы ғаиләнән булыуын мөһим, тип һанайбыҙ. Әсәйем мине атайһыҙ үҫтергән бит, һин дә үҫтерерһең, тип, һис тә иҫе китмәй әйтергә мөмкин атайһыҙ үҫкән егет.

Ғаиләнең бәхете, уның күркәмлеге, уңышы 80 процент

***✓ Хәҙер яңғыҙ, аралашмай йәшәгән буйҙаҡ егеттәр бик күп. Улар бөтөнләй бер ҡайҙа ла йөрөмәй, ҡай саҡ фатиры, йәшәр өйө, машинаһы булған егеттәр ҡыҙҙар менән бөтөнләй аралашмай. Шундайҙар өсөн димләү мотлаҡ кәрәк.***

ҡатын-ҡыҙҙан тора. Ул үҙен нисек тота, сабырмы, йә киреһенсәме, ғаилә лә шундай буласаҡ, сөнки ҡатын-ҡыҙ ғаиләнең ҡото, йылы усағы. Балалар шәхсән өлгө аша тәрбиәләнә. Үҙе тәмәке тартҡан атайҙың "Тартырға ярамай", тип әйткәнен бала ҡабул итмәйәсәк. Айыҡ тормош алып барыу, спорт менән шөғөлләнеү - үҙе ҙур тәрбиә. Беҙ, мәҫәлән, шундай атай тәрбиәһендә үҫтек, ул бер ваҡытта ла аҡыл өйрәтмәне, ғәҙел булды, туҡһан йәшенә тиклем үҙ аңында йәшәне, бөтә туғандар унан кәңәш ала торғайны. Ҡыҙҙар аталарына ҡарап ир һайлай, егеттәр әсәләренә ҡарап ҡатын һайлай, тип әйтәләр бит. Ирем, ысынлап та, атайыма оҡшаған, улыбыҙға ҡарайым да, уны ла атайыма оҡшатам.

### Ҡатмарлы хеҙмәт

Ғаилә ҡороп йәшәү иң ҡатмарлы хеҙмәткә тиң. Балалар баҡсаһына ла, мәктәпкә лә, институтҡа ла, хеҙмәт коллективына ла еңел генә өйрәнергә була, иң ауыры - яңы ғаиләлә йәшәү. Көн һайын бергә уяна килә торғайнылар. Береһе ҡайтып, беҙҙең турала һөйләгән дә, ҡайынбикәм әйтә: "Икенсе тапҡыр Сулпан һеҙгә барһа, исмаһам, исем өсөн булһа ла ирешегеҙ әле, атыу бер аҙна һеҙҙә булып, "Айгөл еңгәй менән Айнур ағай бер һүҙ ирешмәнеләр", тип ҡайтты, сәпсим ирешмәйһегеҙ что ли?" Талашыуҙан ни мәғәнә, үҙ-ара мөнәсәбәттән башҡа нимә үҙгәрә? Ә ирешке килә ул, бик килә, ләкин, минеңсә, айырылышыу - проблемаларҙы хәл итеүҙең иң еңел юлы, айырылышыу ҡыйын түгел, бергә йәшәргә өйрәнеү ҡатмарлы. Бушҡамы ни, сабырлыҡ төбө - һары алтын, тиҙәр.

### Ғаилә йылы

Быйылғы йылды Рәсәй Президенты Ғаилә йылы тип иғлан итте. Йүнәлештәр билдәләнер, ғаилә мәсьәләһенә иғтибар артыр, тип өмөтләнәйек. Мәктәптәрҙә уҡыу программалары тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, унынсы кластарҙа ғаилә тәрбиәһе нигеҙҙәре дәрестәрен индереү кәрәк. ЗАГС бүлеге хеҙмәткәрҙәрен класс сәғәттәренә саҡырһалар, файҙалы булыр ине, һис юғы, яңғыҙҙарҙың ике-өс проценты ғаилә ҡорһа ла, ҙур мәртәбә бит. Димсе мотлаҡ өйләндерә тигәнде аңлатмай, бында яңғыҙлыҡтан арығандарҙың үҙ-ара аралашыуы мөһим, сөнки хәҙер яңғыҙ, аралашмай йәшәгән буйҙаҡ егеттәр бик күп. Улар бөтөнләй бер ҡайҙа ла йөрөмәй, ҡай саҡ фатиры, йәшәр өйө, машинаһы булған егеттәр ҡыҙҙар менән бөтөнләй аралашмай. Шундайҙар өсөн димләү мотлаҡ кәрәк. Әммә төшөнкөлөккә бирелмәйек, ғаиләләр буласаҡ.

### Тойоу мөһим

Беҙҙең ЗАГС бүлегендә туйҙарҙың етмеш проценты башҡорт телендә үтә, шәхсән үҙем дә ошо яҡлымын. Ҡай саҡ телде аңламайбыҙ, тиһәләр ҙә, бында аңлауҙан тойоу мөһимерәк, тип күндерәбеҙ. Өйләнешкәндәрҙең береһе урыҫ, икенсеһе башҡорт булһа, тантананы рус телендә үткәрәбеҙ, әммә музыкаль яҡтан биҙәү башҡортса бара. Сибайҙа башҡорттар күп, күбеһе Урал аръяғы ауылдарынан килеп, бында төпләнгән.

юҡ. Был ваҡытта кешеләр документтарҙы ЗАГС бүлектәре аша һорап алалар. 50, 60, 70, 75 йыл бергә йәшәгәндәрҙе лә ЗАГС бүлектәре бүләкләй. Суд приставтары, полиция, прокуратура, Федераль именлек хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре, судьялар беҙҙең аша күп документтарҙы һоратып алдыра. Никах теркәү - ул булған эшебеҙҙең 10 проценты ғына. Шулай тип теҙеп һөйләргә тура килде.

### Тормош баҫҡыстары

Мин Сибайҙа тыуып үҫтем. 8-се урта мәктәптән һуң 1991 йылда Сибай педагогия училищеһын Ҡыҙыл диплом менән бөттөм, шунан Сибай институтын тамамланым. Бындағы эштә юридик белем мотлаҡ булғас, ситтән тороп юридик белем алдым. Өс йыл һайын квалификация күтәреү курстарын үтәбеҙ. Әлбиттә, тура бында килмәнем, педучилищены бөткәс, тәрбиәсе булып эшләнем, институттан һуң инглиз теленән уҡыттым, балалар баҡсаһы етәксеһе лә булырға тура килде, урындағы радио, телевидениела, Башҡортостан сауҙа-сәнәғәт союштырыу өсөн дә теркәлгән урын буйынса түгел, теләһә ниндәй ЗАГС бүлегенә мөрәжәғәт итергә була, бөтә акттар ҙа шулай бик уңайлы эшләнә. Тик быны әле йәштәр ҙә белеп бөтмәй. Мәҫәлән, ҡай саҡ Магнитогорск ҡалаһынан "Тыуыу тураһында танытмам юғалды, ҡасан һеҙҙән барып алырға була?" тип шылтыраталар. Килеү кәрәкмәй, Рәсәйҙәге теләгән ЗАГС бүлегенән алырға була.

### Ҡайҙа һин, меңенсе?

Дәүләтебеҙҙең ғаилә сәйәсәтен тормошҡа ашырыу - беҙҙең төп маҡсат. Был юҫыҡта бик күп эш атҡарабыҙ. Мәҫәлән, Сибайҙа тыуған игеҙәктәрҙе тантаналы ҡотлайбыҙ, улар тураһында мәғлүмәт сараларына хәбәр итәбеҙ. Шулай уҡ йөҙөнсө, ике йөҙөнсө, меңенсе тыуған балаларҙы ла онотмайбыҙ. Өс йыл дауамында Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Денис Андреевич Назаров балалар өсөн бүләктәр әҙерләүҙә ярҙам итә. Үҙебеҙсә, буш һүҙ генә булмаһын, тип тырышабыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бишенсе йыл инде меңенсегә етә алмайбыҙ. Элек ҡала хакимиәте менән берлектә меңенсе балаға велосипед бүләк итә торғайныҡ.

# СИХРИ ЙОРТТА...

## белешеп була

һың, бергә ашайһың, бергә балалар тәрбиәләйһең, магазинға, театрға, ҡунаҡҡа бараһың - гел бергә, был ауыр эшкә тиң. Ҡатын-ҡыҙ өсөн бигерәк тә ҡыйын, шуға ла беҙ нығыраҡбыҙ. Ғүмеремде туйға тиклем һәм унан һуң, тип сағыштырһам, икеһе ике донъя, ғәмһеҙ генә, кинйәкәү иркә бала инем. Ирем, киреһенсә, ғаиләләрендә иң өлкәне. Уларҙың беренсе туйҙары, беҙҙең һуңғыһы. Бөтөнләй ят икенсе ғаиләлә йәшәй башла әле һин! Яҙмышыма шундай рәхмәтлемен, матур Бохарбаевтар ғаиләһенә эләктем, ҡайны-ҡәйнәмдең ғаиләһе беҙҙең өсөн фәһем алырлыҡ үрнәк, Хәйбуллала иң данлыҡлы ғаиләләрҙең береһе: ҡайным Миңлеғәле Әхмәт улы - һаулыҡ һаҡлау отличнигы, ҡәйнәм Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы - Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы. Икеһе лә, хаҡлы ялға сығып, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашалар. Өс улдары ла ғаиләле. Беҙ күп йәһәттән ҡайным-ҡәйнәмдәрҙән өлгө алып йәшәйбеҙ.

### Сабырлыҡ төбө - һары алтын

Сабырлыҡ, тигәндән, һәр ваҡыт туҡталмайынса үҙ өҫтөңдә эшләргә, сабырлыҡҡа өйрәнергә кәрәк. Шымып ҡалмай, әллә нәмәләр әйтке килә ул, ҡысҡырғы килә, әммә һин аңларға тейеш: хәҙер һин ҡысҡырһаң, ул да ҡысҡырасаҡ, шунан китәсәк талаш! Ирем яғынан туғандары бәләкәй саҡтарында Сибайға йыш бик матур әңгәмәләр үткәрер инек. Шәхсән үҙем ҡайҙа саҡырһалар ҙа ихлас йөрөйөм. Мәктәп кенә түгел, студенттар ҙа мохтаж шундай аралашыуға. Дин юлындағы кешеләрҙең айырылышыуына иҫем китә, минеңсә, улай бөтөнләй булырға тейеш түгел һымаҡ, беҙ бит уларға ҡарап фәһем алабыҙ, улар иң сабырҙар булырға тейеш. Күп ҡатынлыҡҡа кире ҡараштамын, мин үҙем һис тә риза булмаҫ инем. Ундай ғаиләләр барлығын беләм, ғәҙәттә, ул ҡатындарҙың береһе рәсми теркәлмәгән була, ҡай саҡ икеһе лә.

***Быйылғы йылды Рәсәй Президенты Ғаилә йылы тип иғлан итте. Йүнәлештәр билдәләнер, ғаилә мәсьәләһенә иғтибар артыр, тип өмөтләнәйек. Мәктәптәрҙә уҡыу программалары тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, унынсы кластарҙа ғаилә тәрбиәһе нигеҙҙәре дәрестәрен индереү кәрәк. ЗАГС бүлеге хеҙмәткәрҙәрен класс сәғәттәренә саҡырһалар, бик матур әңгәмәләр үткәрер инек. Шәхсән үҙем ҡайҙа саҡырһалар ҙа ихлас йөрөйөм. Мәктәп кенә түгел, студенттар ҙа мохтаж шундай аралашыуға. Дин юлындағы кешеләрҙең айырылышыуына иҫем китә, минеңсә, улай бөтөнләй булырға тейеш түгел һымаҡ, беҙ бит уларға ҡарап фәһем алабыҙ, улар иң сабырҙар булырға тейеш. Күп ҡатынлыҡҡа кире ҡараштамын, мин үҙем һис тә риза булмаҫ инем. Ундай ғаиләләр барлығын беләм, ғәҙәттә, ул ҡатындарҙың береһе рәсми теркәлмәгән була, ҡай саҡ икеһе лә.***

### Ғаиләләр буласаҡ

Һәр нәмәнең ыңғай һәм кире яҡтары бар, димселәр клубтарынан сығып әйтәм быны. Бар ундай осрашыуҙарҙа бербереһен тапҡандар. Тик мәжлес ҡормай, матур уйындар ойоштороп үткәрһәләр бик тә

### Документтар, документтар...

ЗАГС бүлектәрендә башлыса ҡатын-ҡыҙҙар эшләй, Әбйәлил районында ғына бер егетебеҙ бар. Әлбиттә, ир заттары ла эшләһә, бик тә һәйбәт булыр ине, сөнки беҙ тик ғаилә ҡороу менән генә шөғөлләнмәйбеҙ. Яңыраҡ такси менән Өфөнән ҡайтып килгәндә таксист: "Һеҙҙә туйҙар йома һәм шәмбе көндәре генә була, ҡалған көндәрҙә ял итәгеҙме?" - тип көлдөрөп алды. Юҡсы, ете төрлө эш башҡарабыҙ: никах теркәйбеҙ, айырылышыу тураһында акттар төҙөйбөҙ, тыуыу, үлеү тураһында документтар бирәбеҙ, атайлыҡты билдәләү, балалыҡҡа алыу, исем алмаштырыу кеүек документтар ҙа беҙҙең ҡулдар аша үтә. Тыуыу тураһында танытманды юғалтһаң, ҡайҙа бараһың? Мәҫәлән, кемдер, ҡасандыр Ҡаҙағстанда йә Үҙбәкстанда тыуған йәки өйләнгән, ҡулында танытмалары

зының Сибай филиалында эшләнем.

2010 йылдан башлап Сибай ЗАГС бүлеге етәксеһемен, ниһайәт, үҙ урынымды таптым шикелле. Бындағы эш бик үҙенсәлекле, закондар үҙгәреп тора, уларҙы ваҡытында өйрәнергә кәрәк. Элек "Находка-ЗАГС" тигән программа буйынса кемгә нисә йәш, ниндәй милләттән, нисә ҡыҙ, нисә малай тыуған, ирҙәр үлеме күпме, әллә ҡатындарҙыҡымы, шундай статитистик мәғлүмәттәрҙе ала торғайныҡ, 2018 йылдың 1 октябренән Берҙәм дәүләт реестры программаһы буйынса эшләйбеҙ, Бөтә Рәсәй буйынса "Кем, ҡасан, ҡайҙа?" һорауҙарына яуап алабыҙ. Мөрәжәғәт иткән кешеләр өсөн был бик уңайлы. Мәҫәлән, йәштәр Сургутта өйләнешкәндәр, хәҙер Сибайҙа йәшәйҙәр икән, документ кәрәк булһа, программа буйынса эҙләп табабыҙ ҙа ҡулдарына тотторабыҙ. Элек был процедураға ике-өс ай үтеп китә торғайны. Хәҙер исемде алма

### Ожмах әсәләрҙең аяҡ аҫтында

Беҙҙең ЗАГС һарайы алдында әсәйҙәргә бағышланған һәйкәл тора. Күптәр "Ниңә әсәй яңғыҙ?" тиҙәр. Ул яңғыҙ түгел, күрмәйһегеҙме, уның алдында бәләкәй малайы менән ҡыҙы баҫып тора, әсәй яңғыҙ булмай, уның балалары була, ул һеҙҙең әсәйегеҙгә лә бағышланған, тип яуап бирәм. Интернеттан да яҙып һорайҙар. Ирҙәр яҙһа, быларҙың әсәләре уларҙы ныҡлап яратмағандыр, тип уйлайым, бушҡамы ни, ожмах әсәйҙәр аяғы аҫтында, тиҙәр. Былтыр 25 июндә матур итеп ремонтланған Никах һарайы тантаналы рәүештә асылды. Башҡортостандағы иң матур залдарҙың береһе беҙҙә! Шундай ҙур шатлыҡ, ҡыуаныс, ихласлыҡ менән үткәрәбеҙ никах теркәүҙәрен...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сибай ЗАГС бүлеге етәксеһе бик ихлас, ут сәсеп торған, оптимистик рухлы ханым. Эшен яратып башҡарғанға шулайҙыр, тим. Башҡаларҙың ҡыуанысына ҡыуана белеү үҙе бер бәхет түгелме ни? Бала саҡтағы аҙнаға һуҙылған туйҙар иҫкә төшә лә, үәт, исмаһам, ул саҡта ысынлап ҡыуана белгәндәр, тип ҡуям. Һеҙҙә лә шундай уй тыумаймы, хөрмәтле гәзит уҡыусылар?**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

***✓ Улар булдыра! Улар армия хеҙмәтен үткән. Кемеһе бер, кемеһе ике йә өс йыл ҡулдарына ҡорал тотоп, илен һаҡлаған! Ошондай саҡта улар баҫмай, кем баҫһын ил һағына! Күҙҙәр яна, йөрәктәр дөп-дөп килә! Тиҙерәк юлға, тиҙерәк яу яланына!***





# ГЕРОЙҘАР ВАҠЫТЫ

Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА

(Хикәйә)

*Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һәм һәләк булған батырҙарға арнайым.*

Татлы йоҡоға сумған ғына мәл ине. Зариф төшөндә кәләшен, кескәй улы Замирҙы күреп, иҙерәп киткәйне. Ҡатыны сәй яһай, имеш. Ә ул - өҫтәл артында, тубығында аҡ ҡына йөҙлө, көләкәс кенә улы. Күпереп бешкән икмәкте инде ҡулына алғайны, даһыр-доһор итеп өйҙөң түбәһе ишелеп төштө. Күкрәк тапҡырын нимәлер өтөп алғандай булды. "Улым! Кәләш!" Үҙенең йән көсөнә ҡысҡырған тауышына Зариф терткләп уянып китте.

Снарядтар яҡында ғына шартлай, блиндажға ингән яҡ түбә менән стена емерелеп төшкән: саң-туҙан, төтөн, дары еҫе менән тулған. Һалдаттар дәррәү һикерешеп торҙо, кемеһе башына каскаһын ҡаплай һалды, икенсеһе автоматына тотондо, өсөнсөһө өҫ кейеме менән бронежилетын әләктереп ышыҡҡараҡ шылды.

- Бөтәгеҙ ҙә теүәлме? Яраланыусылар юҡмы? - Взвод командирының тауышы әллә ҡайҙан алыҫтан, мөңгөрҙәп кенә ишетелгәндәй тойолдо.

- Бар! Мин яраландым, позывной "Жираф"!

- Мин, позывной "Лев"!

Зарифтың күкрәген кескәй генә снаряд ярсығы сыйып үткән. Снаряд ярсығы оҙон буйы арҡаһында Жираф ҡушаматлы иптәшенең аяғына ҡаҙалғайны. Уларҙы тиҙ-тиҙ генә сисендереп ҡарап, Зарифтың яраһын еңелсә тип атап, спирт менән эшкәртеп, тарттырып бәйләп ҡуйҙылар. Жирафтың яраһы етдиерәк булып сыҡты, ҡанын туҡтатып, ауыртыуҙы баҫыусы укол һалып, уларҙан артта урынлашҡан часҡа ебәрҙеләр. Артабан инде тыныс ергә - госпиталгә оҙатыласаҡ. "Их, нишләп минең дә ярам ныҒыраҡ түгел икән? Бер аҙ госпиталдә ятып, ял итеп, әҙәмсә тамаҡ туйҙырып алыныр ине", - тигән уй йылт итеп ҡалды егет күңеленән. Тик ул уны шунда уҡ баҫтырып ҡуйҙы: "Юҡ! Нисек инде үҙ-үҙеңә ныҒыраҡ яра теләргә була! Ишетеп ҡалмаһын, шайтан ҡолағы һаңғырау булһын! Аллам һаҡлаһын, теге донъяға ла олаҡтырып ҡуйыр ул шайтан! Ни булһа ла, тере булайым әле! Иптәштәрем менән бергә булайым!"

Зариф янып барған күкрәген тотоп, һәндерәһенә уңайлабыраҡ ятты. Ошо мәхшәрҙән имен-һау ҡотолһа, Тыуған яғына ҡайтһа, белер ине нисек йәшәргә! Яраһы ғына йәһәтерәк уңалһын, юҡһа, бындағы дымлы һауала тән тиҙ генә эренләргә тора. Сиҡан сыҡһынмы, берәй ерең һыҙырылһынмы, шунда уҡ таҙартып, йод йә зеленка һөртә һалмаһаң, көн эсендә эренләп, боҙолоп китә. Ҡайһы бер иптәштәре аяҡтарына кейгән әйберҙәрен йүнләп ҡарамай, йыш йыуып тормай, аяҡ бармаҡтары бәшмәкләп, сейләнеп күпме ыҙаланылар. Санитар яҡын-тирәлә күренмәһә, тиҙ генә үҙе лә яраһын дымлы салфетка менән һөртөп ҡорота һалып, таҙа бинт менән бәйләргә оҫтарып алды Зариф. Тиҙерәк йүнәлергә һәм дошмандарға аяуһыҙ булырға!

* * *

Әле уйлап ҡараһа, Зарифтың тормошо хәрби операцияға тиклем аҡ, хәҙер ҡара төҫтән генә торғандай. Ә элек, бала һәм студент сағында, ул меңдәрсә төҫтән балҡып торған Яңы йыл уттарын хәтерләткән! Кескенә сағында ата-әсә ҡосағында иркәләнеп үҫеү, һеңлеләре, күрше малайҙар менән мәж килеп көноҙон уйнау, тәмле табын артында рәхәтләнеп һөйләшеп ултырыуҙар, студент тормошоноң ҡайнап торған мәле, уйын-көлкө, төнгө клубтар, ҡыҙҙар артынан сабыу, имтихан бирә алмай күңелһеҙләнеп йөрөүҙәр... Былар барыһы ла уйын ғына булған икән! Ялтыр-йолтор, албырғытҡыс, күңел елкендергес уйын ғына...

Баш өҫтөндә дрондар осоуы, снарядтар ярылыуы, позицияңды аҡтарып сығарған миналар шартлауы, иптәшеңдең ҡанһыраған үле кәүҙәһе - былар иһә бөгөнгө ысынбарлыҡ...

Өлөшләтә мобилизация иғлан ителгәс, уның тәүге тулҡыны менән бергә хәрби комиссариатҡа барып эләккән йөҙләгән ир-ат араһында Зариф та бар ине. Төҙөлгән исемлек буйынса уның ауылынан тиҫтәгә яҡын егет килергә тейеш, әммә улар өсәү генә булып сыҡты.

- Башҡалар ҡайҙа һуң? Беҙ бит туғыҙ кеше инек исемлектә? - тип аптыранды берәүһе.

- Эйе шул! Килмәгәндәргә срок сәпәйҙәр тип ҡурҡыталар ине, - тип өҫтәне Зариф.

- Эштә бит улар, - тине өсөнсөһө ауылдаштарын тынысландырырға теләп.

- Беҙ ҙә эштә инек. Повестка килгәс, ҡайтырға тура килде, - тине төндә генә Себерҙән ҡайтып төшкән Зариф. - Башҡалар ни уйлай икән?

Ул көндө егеттәрҙе исемлек буйынса тикшереп сыҡтылар, ҡасан, ҡайҙа, ниндәй ғәскәрҙә хеҙмәт итеүҙәрен тағы бер ҡат яҙып алдылар. Унан сәғәт самаһы ултырып, анкета һорауҙарына яуап бирҙеләр. Көн кискә һарҡҡас ҡына:

- Всем строиться! - тигән команда яңғыраны.

Тигеҙ сафҡа рәт-рәт булып теҙелгән ир-ат алдына хәрби комиссар сығып баҫты. Арыған, таушалған ҡиәфәт менән алдында торған төрлө йәштәге, төрлө кейемдәге, төрлө милләтле ир-атҡа аҙ ғына теклә п торҙо һәм һәр һүҙен һығып сығарғандай, өҙөп-өҙөп:

- Хөрмәтле запастағы хәрби хеҙмәткәрҙәр! Февралдән башлап Тыуған илебеҙ Европа нацистарына ҡаршы хәрби операция алып барыуы бөтәгеҙгә лә мәғлүм, - тип мөрәжәғәт итте. - Әлеге көндә беҙҙең хәрбиҙәребеҙ, һалдаттарыбыҙ алыҫ Украина ерендә Рәсәй үҙаллылығы, Рәсәй берҙәмлеге өсөн көрәшә. Запастағы хәрбиҙәр булараҡ, һеҙҙе беҙ резерв частаргә саҡырабыҙ. Ярҙам кәрәккәндә, ниндәй генә ваҡытта ла, һеҙ ҡоралға тотонорға әҙер булырға тейешһегеҙ. Әлбиттә, бәлки бындай осраҡтың булмауы ла мөмкин. Шуға күрә, паника тыуҙырмай, тыныс ҡына өйөгөҙгә ҡайтығыҙ. Тап өс көндән, 2022 йылдың 25 сентябрендә, бөтәгеҙ ҙә иртәнге сәғәт 8-ҙә ошонда булырға тейеш. Кемдер килмәй ҡала икән, ул енәйәт яуаплылығына тарттырыласаҡ!

...Өйҙәгеләр был хәбәрҙе тыныс ҡабул итте. Хәрби йыйынға йыйырҙар ҙа, ҡайтырҙар. Кәрәк булһа, берәй заман саҡырырҙар әле, тигән кеүек уй ине һәр кемдең башында.

- Бер ниндәй ҙә һуғышҡа ебәрмәйҙәр! Афғанда, Чечняла халыҡты йыйҙылармы ни? Һалдаттар ғына ҡатнашты, һәм тик үҙ теләктәре менән генә! Был юлы ла шулай буласаҡ!

- Эйе шул. Яңынан баш ҡалҡытҡан Европа фашистарына Путин илебеҙҙең ҡөҙрәтен күрһәтергә генә теләй! Йәнәһе, бына беҙҙең резервта күпме һалдат бар!

Халыҡ ошолайыраҡ фекер йөрөттө, бер кем дә армияға оҙатҡандағы ише ҡунаҡ-фәлән йыйманы. Шулай ҙа күп егеттәр алып килергә ҡушылған әйберҙәр исемлеген тотоп, ҡала магазиндарын айҡаны, кәрәк-ярағын тупланы. Камуфляж йылы кейем, берцы, балаклава, йоҡлау өсөн тоҡтар, рюкзак, бронежилет, фонарь, аҙыҡ-түлек һатып алды. Бер нәмә лә алмай, еңелсә генә пакет тотоп барыусылар, митингыла тороп ҡына ҡайтып китергә өмөтләнеүселәр ҙә бар ине араларында.

25 сентябрь иртәнге 8-ҙә хәрби комиссариат алды ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтте. Ҡатындары, ата-әсәһе, бала-сағаһы, туған-тыумасаһы менән бергә һәр резервисты биш-алты кеше оҙатырға килгәйне. Йөҙләгән егет китергә йыйылһа, оҙатыусылар менән бергә меңгә яҡын кеше бар майҙанды, яҡын-тирә урамдарҙы тултырғайны.

Бындай мәхшәрҙе көтмәгән етәкселек бер аҙ аптырап ҡалды. Тиҙ генә урындағы полиция бүлексәһенә, юл-патруль хеҙмәтенә хәбәр итте: килеп етергә, тәртип һағына баҫырға, бер ниндәй ғауға, тауыш сығырға тейеш түгел! Улары үҙ бурыстарын бик тырышып башҡарҙы, былай ҙа талаш сығарырға, бола ҡуптарырға уйлаған әҙәм юҡ ине юҡлыҡҡа. Бер-ике һалмыш резервистың ғына йә ҡысҡырып йырлап, йә һаһылдашып көлөшөп, кешеләрҙең күңелен күтәрергә маташыуын иҫәпкә алмағанда, ир-ат тыныс, етди, уйсан ине.

- Ҡәҙерле яҡташтар! Резервистар, уларҙың ҡатындары, ата-әсәләре, балалары һәм яҡындары! Бөгөн мин һеҙҙең бөтәгеҙгә лә өндәшәм! Мин һеҙҙе хөрмәт итәм һәм ғорурланам! Кем бөгөн сафта - улар барыһы ла ысын һалдат, ысын ил һаҡсыһы! Рәсәй Федерацияһының составына ҡушыласаҡ славян халҡына ярҙамға тип Ватан һағына баҫҡан ир-ат барыһы ла батыр! Армия сафында хеҙмәт итеп ҡайтҡан ир-егеттәр һаҡламаһа, ярҙам итмәһә, Рәсәй халҡына, рус халҡына кем ярҙам итер! Беҙ туғандарыбыҙҙы, илдәштәребеҙҙе ауыр ваҡытта ташлай алмайбыҙ! Тиҫтә йылға яҡын иҙелеп йәшәгән Луганск, Донецк кеүек республика халҡын ярҙамһыҙ ҡалдырырға хаҡыбыҙ юҡ! - Хәрби комиссарҙың шартлап торған көр тауышы махсус хәрби операцияға юлланасаҡ егеттәрҙең йөрәктәрен елкендерҙе. Улар булдыра! Улар армия хеҙмәтен үткән. Кемеһе бер, кемеһе ике йә өс йыл ҡулдарына ҡорал тотоп, илен һаҡлаған! Ошондай саҡта улар баҫмай, кем баҫһын ил һағына! Күҙҙәр яна, йөрәктәр дөп-дөп килә! Тиҙерәк юлға, тиҙерәк яу яланына! Тиҙерәк ер йөҙөндә һуғыш көҫәүселәрҙең муйындарын бороп ырғытырға!

Ошондай дәртле уйҙар менән, йырлай-йырлай, бейей-бейей юлға сыҡты Башҡортостан егеттәре... Билдәһеҙ, ауыр, әммә данлы юлға! Ҡайта алырмы улар был юлдан? Ул хаҡта уйламанылар ҙа...

* * *

Н. ҡалаһы янында, күҙ асып йомған арала ғына, теҙелеп киткән йәшелле-һоро-ло, аҡлы-һарылы палаткалар ҡаласығы барлыҡҡа килде. Таныштарҙы ҡысҡырып эҙләү, йыр-моң, көлөшөү-һөйләшеү - оло ялан гөрләп торҙо. Әйтерһең, байрамға йыйылғандар! Әйтерһең, һабантуй! Алыпһатарҙарҙың машина-автобустары юлдан саң туҙҙырып тауар ташыны: аҙыҡ-түлеге, кейем-һалымы, көнкүреш техникаһы... Араҡы иһә йылға булып аҡты. Тәүге ике аҙна байрам итеп үткәрелде: эстеләр, йырланылар, бейенеләр, таныштылар, ҡосаҡлаштылар, һуғыштылар... Бер кемдең дә уларҙа эше юҡ, улар үҙҙәренә үҙе хужа. "Һуғышҡа алып бармайҙар икән! Меңәрләгән егеттең резервта тороуын телевизор аша күрһәтәләр ҙә, Европаның ҡото осһа, беҙҙе кире ҡайтаралар, ти!" Ошондай хәбәрҙәр ҡуйырғандан-ҡуйырҙы, яңынан-яңылары өҫтәлде. "Рәхәтләнеп, бушҡа ашап, бушҡа эсеп, ял итеп ҡалыр кәрәк! Ҡайтһаң, беҙҙе буш аҫрап ятҡырмаҫтар!" Төшөрөргә ятраҡандарға, эш һөймәҫтәргә был аҙналар тотош байрамға әйләнде...

Ай тулып килгәндә, ниһайәт, медкомиссия эшләй башланы: һәр береһен айырым-айырым индереп тикшерҙеләр, ниндәй ауырыуҙары барлығын белештеләр. Хроник ауырыуҙарҙы, наркомандарҙы, яңыраҡ операция яһатҡандарҙы тағы бер ҡат ныҡлап тикшергәндән һуң, ҡайтарып ебәрҙеләр. Улар артынан, яңы ҡабул ителгән закон буйынса, балиғ йәшкәсә өс балаһы булған атайҙар ҡайтарылды. Зариф та, уның менән килгән ике ауылдашы ла, танышып, уртаҡ табаҡтан ашап дуҫлашып өлгөргән яңы иптәштәре лә, был категория араһында юҡ ине. Уның өсөн ҡайғырманылар ҙа, шулай булырға тейеш. Уларҙың да ҡайтырға сираты етер берәй заман. Бәлки, ул арала был ҡапыл килеп сыҡҡан ҡанҡойош туҡтап та ҡуйыр әле. Рәсәйҙең башлығы әлдән-әле һөйләшеүгә ынтылып ҡарай түгелме һуң? Бынау байлыҡтан-муллыҡтан туйып һикергән Европа менән мәңге нефть-газға туймаған Американың батшалары ғына һаман ҡан көҫәй. Килешеүгә ебәрмәйҙәр тегене - уларҙың рөхсәтенән тыш сөскөрөргә лә ҡурҡҡан Украина етәксеһен! Шулай инде: уларҙың ерендә ҡан-йәш түгелмәй, уларҙың ҡалалары харабаға әйләнмәй, уларҙың ере мина-снаряд ярылыуҙан телгеләнмәй, уларҙың тупраҡтары ҡанға һуғарылмай! НАТО етәкселеге өсөн Рәсәйҙе үҙҙәре алдында теҙләндереү, хатта Ер йөҙөнән юҡҡа сығарыу, халҡын ҡырыу ғына мөһим! Башҡаларҙың түгелгән күҙ йәше һәм ҡаны, етемдәре һәм толдары улар өсөн сүп тә түгел! Байлыҡ, ер, яғыулыҡ, аҡса - бына нимә улар өсөн иң мөһиме! Нацистарҙың йөрәгендә кешелеклелеккә, миһырбанлыҡҡа, йәлләүгә, мәрхәмәтлеккә, һөйөүгә урын юҡ! Улар бөгөнгө замандың хаиндары, йәлләттәре, ә уларҙың ҡул аҫтында йәшәгән халҡы иһә - батшаларҙың һәр һүҙенә ышанған зомби хәлендәге һарыҡ көтөүе! Бәлки, аңлағандары барҙыр ҙа бит, ләкин "Король ялан-ғас!" - тип әйтергә батырсылыҡ итеүсе юҡ араларында!

Бындай уйҙар ярты йыл самаһы утты-һыуҙы кискәс кенә киләсәк Зарифтың башына.

* * *

✓ ***Рәмил өсөн көрәшеп, директор менән һөйләшеп алып ҡалһалар, кем белә, бәлки, уның эшмышы бөтөнләй икенсе һуҡмаҡтан китер ине. Кем белә...***



Позывнойы "Лев" - Зариф Арыҫлан улы Азаматов, башын ҡаушырған ҡулдары өҫтөнә һалды ла, күккә төбәлде. Бында күк тә икенсе: нисектер, тәпәш, болоттары аҡһыл-һоро, йондоҙҙары кесерәк һәм төҫһеҙ. Ә уның тыуған яғында күк йөҙө күҙ ҡамаштырырлыҡ зәңгәр, болоттары аяҙ көндә ап-аҡ, йонсоу көндәрҙә иһә ҡап-ҡара, йондоҙҙар иҫ китмәле яҡты һәм сағыу була торғайны! Арала ике мең самаһы саҡрым ята, бәлки, бында ысынлап та күге тәпәш, ай-йондоҙҙары бәләкәй һәм яҡты түгел, шуға ла йәнгә яҡын түгелдер? "Үҙ илемдә булһам!- тигән уй үтә егеттең башынан. - Үҙ илемдә булһам, был ваҡытта нимә эшләр инем икән? Бер ни уйламай, әсәйемдең йылы түшәгендә иҙрәп йоҡлап ятыр инемме? Улым Замир менән уйнар инемме? Әллә йәштәр менән бушты-бушҡа ауҙарып, музыка аҡыртып, машинаға тейәлешеп, ауылдан-ауылға йөрөр инекме? Бәлки, телефонға ҡаҙалып, интернеттың бөтмәҫ яңылыҡтарын сүпләп, кәрәкмәгән негативты уҡып, башымды тубал итеп ятыр инемме икән?"

Ҡасандыр тап ошолай йәшәне бит ул: бер ни уйламай, иртәгәһе көнөн иҫенә лә алмай, әҙер тамаҡ, өҫ-баш йыуып-үтеклән. Кеҫәлә аҡса, янда дуҫтар - тағы ни кәрәк 25 йәшлек егеткә! Бөтәһе лә алда, бөтәһе лә булыр, Ер йөҙөндә унан да бәхетле кеше юҡтыр, ул Ерҙең кендеге, бөтөн донъя бары уның тирәләй генә әйләнә төҫлө ине! Бөгөн килеп Зариф үҙенең янғыҙлығын аңланы. Был олонан оло Йыһанда ул бер кем дә түгел икән дә баһа! Ул бары бер сүп кенә! Ошо ваҡытта ҡапыл ғына Зариф юҡҡа сыҡһын, хатта бер кем дә белмәй ҙә ҡалыр! Көндәр-төндәр үҙ яйы менән үтә торор, балалар тыуыр, завод-фабрикалар эшләр, кемдер туйҙар яһап, тормош юлын парлап башлар, кемдер космосҡа осор... Һәм берәү ҙә Зарифтың юҡлығын абайламаҫ та...

Был уйҙан егеттең йөрәге дарҫлап типте, кинәт ҡалҡынды ла, көслө ауыртыуҙан ыңғырашып, кире урынына һеҙде. Уйҙарға сорналып, яралы күкрәге тураһында онотоп ебәргән икән! Шулай ҙа, унайлап ятҡас та, еп осон сеймәлтмәҫкә теләп, йәнә баяғы уйына кире ҡайтты. Зариф сүп кенә булырға тейеш түгел! Ни өсөн йәшәне һуң 25 йыл? Уны онотоrға тейеш түгелдәр! Шундай егет бар ине, Азаматов тигән! Шәп егет ине! Ил һаҡсыһы! Яҡшы яугир! Позывнойы "Лев"! Ни өсөн үҙенә ул "Лев" тигән позывной алды һуң, атаһының исеме Арыҫлан булғанға ғынамы ни? Арыҫлан - хайуандар батшаһы, Зариф та арыҫлан ише көслө, ҡыйыу, иптәштәренең ышаныслы терәге, хатта башлап йөрөүсеһе, лидеры булырға тейеш түгелме ни? Зариф күкрәгендәге яраһының туктауһыҙ һыҙлап, әрнетеп тороуына ла ҡарамай тороп ултырҙы, йөҙроҡтары йән көсөнә йомарланды, күңелендә нимдәйҙер көс, уҫал көс, ышаныс уянды! Ул кеше, ул тере, ул көрәшергә тейеш.

**(Дауамы бар).**

*ИШАРА*

# РУХИ МАЯҠТАРҘЫ ЕМЕРМӘЙЕК



**Әгәр үткән йәй һәм көҙ айҙарында берелһенең - әсәһен, икенсеһенең һеңлеһен осратып, танышмаһам, был хаҡта мин бер ваҡытта ла яҙырмын тип уйламаным. Һүҙем Ришат менән Рәмил исемле егеттәр хаҡында. Икеһе лә был донъяла булмаһа ла, исемдәре үҙгәртеп алынды.**

Ришат беҙҙең класташ ине, ә Рәмил бер йылға кесерәк булды. Ауылыбыҙҙа башланғыс мәктәп кенә булғанлыҡтан, күрше ауылға ете саҡрымға яҙлы-көҙлө йөрөп уҡыйбыҙ. Ҡыш интернатта ятабыҙ. Ришаттың ауылы 15 саҡрым алыҫлыҡта ине. Рәмил иһә бөтөнләй икенсе районда килгәйне.

Элек байрамдар унар көнгә һуҙылмаңы. 1 Майҙа ла бер генә көн ял иттек. Ауылыбыҙ яҡын булғас, беҙ ҡайтып киттек. Ер һырыҡҡас, былай ҙа көн дә йөрөп уҡыйбыҙ инде. Ә Ришат менән Рәмил интернатта ҡалды. Буш ваҡыттарын нисек үткәрергә белмәй йөрөгән егеттәр (элек бит телевизор ҙа юҡ ине) кискеһен мәктәп ҡаҙанлығына барып ингән. Унда ике өлкән ағай күңелләнеп ултырған. Байрам хөрмәтенә тип, быларҙы ла табынға саҡырғандар. Эскелек менән мауыҡмаған йәш егеттәр тиҙ бирешкән һәм шунда ятып йоҡлап киткәндәр.

Иртәгәһен директор мәктәпкә килгән, котельныйға ингән. Кочегар ағайҙар янында төн уҙғарған уҡыусыларҙы күреп, байрамдан һуң быларҙы мәктәптән ҡыуыу тураһында ҡарар сығарған. Ришатҡа уҡыуҙы тамамларға бер ай ваҡыт ҡалған, йәғни имтихандар тапшырып, аттестат алып, белем усағы менән хушлашып, үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫаһы мәл еткән. Ә Рәмилгә бер айҙан туғыҙынсы класты бөтөрөргә кәрәк.

Ошондай яуаплы мәлдә директорҙың хәбәре аяҙ көндә йәшен атҡандай тойолдо. Беҙ, унынсы кластар, нисек тә Ришатты алып ҡалырға булдыҡ. Һөйләштек тә, директорға инергә ҡарар иттек. Иптәштәр, ышаныс күрһәтеп, һөйләшеүҙе минә тапшырҙы. Нисек ингәнмен, нимә тип әйткәнмен - хәҙер иҫләмәйем, әммә директорҙың бөтә класыбыҙ менән яуаплылыҡты үҙ өҫтөгәҙгә алып, үҙе менән һөйләшһәгеҙ, ҡарарбыҙ, тигән яуап алып сыҡҡаным хәтерҙә. Класс йыйылышына уҡытыусылар ҙа, директор үҙе лә килде. Ришаттың тәртибен тикшерҙек. Үҙен баҫтырып ҡуйып, бөтә иптәштәре, уҡытыусылар алдында ғәфү үтендереп, башҡа ундай хәл булмаясағына вәғәҙә иттереп тамамланды ул йыйылыш. Шулай итеп, беҙ класташыбыҙҙы ҡотҡарҙыҡ. Имтихандарын тапшырып, урта мәктәпте тамамлау тураһында аттестат алып сыҡты. Ә Рәмилде класташтары беҙҙең кеүек яҡлап сыҡманы...

...Тормошта һис уйламағанда көтөлмәгән осрашыуҙар булып тора. Үткән йәй һуғыш балалары тураһындағы китапҡа иҫтәлектәр йыйып йөрөгәндә районыбыҙҙа әлеге класташыбыҙ Ришат йәшәгән ауылда 90 йәшен үткән инәй барлығын әйттеләр. Киттем шунда. Бәлки, Ришатты ла күрермен әле, тип уйлайым үҙемсә. Ни тиһәң дә, мәктәпте тамамлағаны бирле осрашҡаныбыҙ юҡ бит. Мәктәп юбилейҙарына ла килгәне булманы, бәлки, үткән хәтирәләрен иҫенә төшөрөргә теләмәгәндер.

Инәй бик хәтерле булып сыҡты. Һуғыш тамамланыуға һигеҙ тиҫтә йылға яҡын ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, бөтәһен дә иҫләй. Ҡалала йәшәгән ҡыҙы ғаилә альбомын алып, ата-әсәһенең йәш саҡтарын күрһәтте, шунда балалар бергә төшкән фотоларҙағы туғандарын исемләп һанап сыҡты. Һәм шунда Ришат тигән таныш исем ишетеп ҡалдым. Бәй, был беҙҙең класташ табаһа. Һораша башланым. Мәктәптән һуң артабанғы яҙмышы нисек булған? Ҡайҙа йәшәй? Баҡһаң, мин Ришаттың әсәһе менән һөйләшкән булып сыҡҡанмын. Бына бит ниндәй осрашыу! Үкенескә, Ришат бынан бер нисә йыл элек кенә вафат булған икән. Мәктәпте тамамлағас, водителгә уҡыған һәм ғүмере буйы шул һөнәре буйынса эшләгән. Өйләнмәгән. Балалары бар. Әгәр теге ваҡыт, уҡыуын тамамлап бөтөргә лә ирек бирмәйенсә мәктәптән сығарылып ебәрелһә, артабанғы яҙмышы нисек булыр ине икән, тип уйланым...

...Баҡса урамынан китеп барам. Шунда бер йәш ҡатын минә: "Апай, һеҙгә балан кәрәкмәйме? Бына йыйыусы юҡ, әсәйем дә яратмай, йыл да йыйылмай әрәм булып тороп ҡала", - тип өндәште. Ҡараһам, ысынлап та, шундай сусым тәлгәштәр. Мин йыйып алдым да ҡайнатма яһап, үҙҙәренә лә алып килеп биргәйнем, иҫтәре китте. Баландан да шулай тәмле ризыҡ әҙерләп булғанына аптыраны улар. Баҡһаң, Башҡортостандан ситтә йәшәп, янырак ҡына ҡайтып, баҡса өйө һатып алып, тәҙәләш эштәре менән мәж килеп йәшәп ятыуҙары икән. Икенсе килгәнемдә әсәһе менән дә таныштым. Инсульт кисергәндән һуң әкрен генә йөрөп ята ине. Һөйләшеп киттек. Рәмилдең районлашы икән. Шуға уның хаҡында һораштым.

- Ул минең бер туған ағайым бит, - тип альбом килтереп сығарып һөйләй башланы. - Беҙ ете бала үҫтек. Атайыбыҙ һуғыштан инвалид булып ҡайтты. Бер аяғы юҡ ине, үҙе эшләп алған ғына протез менән йөрөнө. Әсәйем бик матур йырлай ине. Рәмил ағайым да бәләкәйҙән йырлап, конкурстарҙа ҡатнашып йөрөнө, баянда уйнаны. Ҡарағандала шахтала эшләгән туғандарыбыҙ ауылға ҡайтҡайны, Рәмил ағайым шуларға эйәреп китте. Шахтала эшләгән. Мәрйәгә өйләнгән. Балалары булмаған. Шахта емерелеп, ағайым шунда һәләк булған...

...Мин тағы уйҙарым менән ярты быуаттан ашыу үткән мәктәп йылдарына әйләнеп ҡайттым. Әгәр шунда туғыҙынсы кластар ҙа, беҙгә эйәреп, Рәмил өсөн көрәшеп, директор менән һөйләшеп алып ҡалһалар, кем белә, бәлки, уның яҙмышы бөтөнләй икенсе һуҡмаҡтан китер ине. Матур йырлап, баянда ла уйнаған, ошо һәләтен үҫтерер өсөн, бәлки, сәнғәт юлын һайлар һәм күренекле артист та булып китер ине. Кем белә...

...Йылдар үткәс, бөгөнгө күҙлектән ҡарап, мин шулай уйлайым. Барыбер мәктәп директоры был осраҡта шулай ҡәтғи ҡарарға килергә тейеш булмағандыр, тим. Уҡыусының үҙе менән атайҙарса ныҡлап һөйләшергә булманымы икән ни? Ғәҙәттә, кешенең тәүге насар ҡылығына ҡарата йә киҫәтеү, йә шелтә һымаҡ баһа бирергә мөмкин түгелме ни? Әгәр ихлас кешесә мөнәсәбәттә, аңлап ҡарағанда. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, ете бала тәрбиәләгән атай кешенең урынына үҙендә ҡуйып ҡарар кәрәк булғандыр бит? Класта һөйләшеп, иптәштәре алдында оялтып та ғүмерлек һабаҡ бирергә мөмкин дә баһа.

...Элек класс етәкселәренә бик ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелә ине. Улар үҙ фәненән дәрес бирер генә ҡалмай, төрлө әхлаҡи темаларға класс сәғәттәре, донъя хәлдәре тураһында политинформациялар үткәрә торғайнылар. Һуңғы йылдарҙа уҡытыусыларҙы ҡағыҙ эштәре күмеп китте, балалар менән тәрбиәүи сараларға иғтибар бөтөнләй кәмене. Быйылһы-быйыллы мәктәптәрҙә директорҙың кәңәшсеһе тигән яңы вазифа булдырылды. Класс етәкселәренә 5 мең һум өҫтәмә эш хаҡы ла түләнәсәк хәҙер.

...Үҙ класы өсөн янып-көйөп эшләгән уҡытыусылар элек тә булды, әле лә барҙар. Өфө ҡалаһындағы мәктәптәрҙең береһендә башҡорт теленән белем биргән бер уҡытыусы һөйләгәндәре ҡайһы ағы менәндер Рәмил яҙмышын хәтерләтеп ҡуйҙы. Проблемалы ғына ғаиләлә үҫкән (ата-әсәһе айырылышып, һәр ҡайһыһы икенсе ғаиләләре менән йәшәй, ә үсмер өләсәһе тәрбиәһендә ҡала) дәрестәренән бик үк һәйбәт өлгәшмәһә лә, етди мауығыуына ҙур иғтибар бүлеп, И. Якутов исемендәге паркта ойошторолған Йәш тимер юлсылар түңәрәгендә ихлас шөғөлләнә. Предметтар буйынса баһалары насар булыу сәбәпле IX класты бөтөү тураһында аттестат бирмәү яғында икән мәктәп коллективы. Әлеге уҡытыусы директорға инеп, һөйләшеп, баланың яҙмышын боҙмайыҡ, тормошта бит аттестаттағы билдәләр менән генә йәшәп булмай, бына күрерһегеҙ, унан шәп хеҙмәт кешеһе сығасаҡ, тип, тулы булмаған белем алыуы тураһында документын бирҙертеүгә өлгәшә. Әлеге көндә шул уҡыусы яратҡан һөнәре буйынса тимер юлында машинист булып эшләй, уҡытыусыһына рәхмәттәр әйтеп бөтә алмай, яйы тура килгән һайын күстәнәстәр тотоп килә...

Педагогтар кластарындағы һәр уҡыусының нисек өлгәшеүен генә түгел, ә нисек йәшәүен, ғаиләләренең тормошон, баланың нимә менән мауығыуын белеп, улар өсөн яҡын дуҫ та, кәңәшсе лә булһын ине.

Бына шундай уйҙар уйлатты мәктәп йылдарында булған ваҡиғаларҙы хәтерләү һәм иптәштәребеҙҙең яҡын кешеләре менән осрашыуҙар. Мәктәп йылдарынан тик яҡты иҫтәлектәр генә ҡалһын ине. Сөнки улар бит оло тормошҡа аяҡ баҫҡанда һәм артабанғы ғүмер юлыбыҙҙа йәшәү көсө биргән рухи маяҡтар булып ҡаласаҡ.

**Зәһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

✓ Ҡалаларҙағы транспорт туҡталыштарында кешеләрҙең ласҡ-лосҡ төкөрөнөүенән, сүп-сар ташлауынан баҫырлыҡ та таҙа урын ҡалмай. Автобусҡа инһәң, ололар, ҡатын-ҡыҙҙар баҫып килә, йәштәр ултырып бара...



ИНТЕРНЕТТАН



# АРТЫҠ КҮП ЙОҠЛАМА

■ Артыҡ күп йоҡларға ярамай, сөнки оҙаҡ йоҡлау һөҙөмтәһендә ҡандағы шәкәр күләме арта. Артыҡ ауырлыҡтан яфаланыусы балаларҙы тикшергәндән һуң, ғалимдар ошондай фекергә килгән. Шулай уҡ аҙ йоҡлау ҙа организм өсөн зарарлы, был осраҡта инсулин секрецияһы ҡыҫҡара. Филадельфияның балалар дауаханаһы эндокринологы Дорит Корен әйтеүенсә, глюкоза күрһәтестәре үҙгәреп тормаһын өсөн төндә 7,5-8,5 сәғәт йоҡларға кәрәк.

■ Статистика буйынса, рәсәйҙәрҙең 10 проценты аҙнаһына бер тапҡыр фаст-фуд ашай. Америка менән сағыштырғанда, был һан ҙур түгел, шулай ҙа табиптар тиҙ туҡланыу урындарының йылдан-йыл күбәйә барыуына хәүефләнә башлаған да инде. Башлыса май, тоҙ, тәм көсәйтеүсе матдәләрҙән торған бындай аҙыҡ икенсе төрлө "Джанк-фуд" ("сүп-сарлы" аҙыҡ) тип йөрөтөлә. Һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, фаст-фуд күнегеүгә алып килә. Ундағы ҙур күләмдәге май һәм шәкәр баш мейеһендә үҙгәрештәр барлыҡҡа килтерә, шуға ла көндән-көн фаст-фудтан баш тартыуы ауыр була башлай. Вашингтондың табиптар комитеты хот-догты ла зыяны буйынса тәмәке менән тиңләгән. Медиктар иҫәпләүенсә, хот-догтың составындағы 50 грамм ғына эшкәртелгән итте көн һайын ашау яман шеш ауырыуына килтереүе ихтимал.

■ Ғалимдар физик көсөргәнештең психикаға ыңғай тәьҫир итеүен күптән дәлилләгән. Табиптар әйтеүенсә, физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүленеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта. Көньяҡ Каролина университеты ғалимдары фаразлауынса, был матдәләр баш мейеһендә лә әүҙемләшә. Һөҙөмтәлә, хәтер яҡшыра, депрессия, күңел төшөнкөлөгө юҡҡа сыға.

■ Әгәр ҙә телефондан шылтыратҡан ваҡытта теге яҡтан яуап оҙаҡ булмай тора икән, шылтыратыусы кеше көслө стресс кисереп өлгөрә, ти ғалимдар. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан 2 мең кешенең 64 процентында артериаль ҡан баҫымы күтәрелеүе лә күҙәтелгән. Доктор Роджер Хендерсон аңлатыуынса, хәҙерге заман кешеләрендә сабырлыҡ, көтөү тойғолары бөтөнләй юҡ. Уларға бар нәмә лә ошо урында һәм хәҙер уҡ кәрәк. Был бигерәк тә йәштәрҙә асыҡ сағыла. Әгәр ҙә теләгәненә өлгәшә алмаһа, кешелә стресс кимәле шунда уҡ күтәрелә, йөрәк тибеше йышая, устар тирләй башлай, баш ауырта. Быларҙың барыһы ла хроник хәүеф тойғоһо кисереүгә генә түгел, ә аҙыҡ һеңдереү менән проблемаларға, мускулдар тартышыуына, башҡалар менән мөнәсәбәттәрҙең насарайыуына килтереүе ихтимал.

■ Кешелә үҙ-үҙенә ышаныс тойғоһо ни тиклем юғарыраҡ була, шул тиклем яҡшыраҡ, ти психологтар. Был ышаныс тормоштоң бөтөн өлкәләрендә лә: эштә лә, шәхси мөнәсәбәттәрҙә лә, спорт ярыштарында ла кәрәк. Калифорния университеты ғалимы Дэймс Фоулер әйтеүенсә, үҙ-үҙеңә ышана башлау өсөн үҙеңде аҡыллы һәм көслө итеп иҫәпләү ҙә етә. Статистика күрһәтеүенсә, тормошта күптәр ысынлап та үҙенең мөмкинлектәрен булғанынан күпкә юғарыраҡ, тип иҫәпләй. Мәҫәлән, вуз уҡытыусылары үҙенең уҡытыу һәләтен уртасанан юғары тип тапһа, юғары синыф уҡыусыларының 70 проценты үҙенең һәләттәрен юғары баһалай. Шулай уҡ ир-егеттәр араһында үҙҙәрен үтә сибәр тип һанаусылар күберәк икән.

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

# ӘҘӘМ КҮРКЕ - ӘҘӘП



**Әҙәп - ул иң тәүҙә аралашыу сараһы, кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә тәртипкә һалыу ысулы. Әҙәп донъяһы бер-береңде ихтирам итеүгә, әйләнә-тирәләге кешеләр тураһында хәстәрлек күреүгә йүнәлтелгән мәҙәни көнкүрештең айырып алғыһыҙ сифаты ул. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөнгө көндә күптәрҙең тәрбиә, әҙәп кимәленең түбән булыуы, аралашыуҙың ябай ҡағиҙәләрен белмәүе йә һанға һуҡмауы етди борсолоу тыуҙыра.**

Күптән түгел генә Ҡырғыҙ яҙыусыһы Сыңғыҙ Айтматовтың "Быуаттан да оҙайлы көн..." тигән романын ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡтым. Бында һүрәтләнгән йөрәктәрҙә өшөткөс маңҡорт образы һаман да күҙ алдынан китмәй.

...Ҡаҙаҡ далаларында йәшәгән жунжуандар ҡәбиләләре әсирҙәргә ифрат шәфҡәтһеҙ булған, уларҙың ҡанһыҙ ҡулына эләккән меҫкен кешеләрҙе ҡот осҡос яҙмыш көткән. Әсирҙең башын бер бөртөк сәс ҡалдырмай ҡырып алғас, яңы ғына һуйылған ҡарт дөйә тиреһенең иң ҡалын өлөшөн - муйын тиреһен уларҙың башына кейҙереп ҡуйғандар. Аҙаҡ, аяҡ-ҡулдарын бәйләп, үҙәк өҙгөс ҡыҫҡырыу тауыштарын ишетмәҫлек ергә алып барып ташлағандар. Тире эҫе ҡояшта кибеп, тарайғандан-тарая барып, әсирҙең сәсһеҙ башын тимер ҡоршау кеүек ҡыҫа, тарттыра башлай. Үҫә башлаған сәс йә дөйә тиреһен тишеп керә, йә иһә кирегә бөкләнеп, баш тиреһенә табан үҫә башлап, ауыртыныуҙарҙы арттыра. Ахыр сиктә, ауыртыныуҙан хәлһеҙләнгән әсирҙәр йән бирә, йә ғүмерлеккә иҫен-аҡылын юйып, маңҡортҡа, үҙенең элек нисек йәшәгәнен, кем икәнлеген дә хәтерләмәгән мәхлүккә әүерелә. Маңҡорт үҙенең ҡайһы ырыу кешеһе икәнен, исемен, тыуған ерен белмәй, атаәсәһен иҫләмәй, ҡыҫҡаһы, ул үҙенең кеше затынан булыуын аңламай. Маңҡорттарҙан да ҡиммәтлерәк баһалanған ҡол булмай. Сөнки хужаһынан башҡа бер кемде лә танымаған хәтерһеҙ, аңһыҙ, исемһеҙ мәхлүк буйһоноусан, тыңлаусан була, бер ҡасан да ҡасыу йәки фетнә күтәреү тигәндә уйына ла индереп сығармай...

Эйе, был бик боронғо легенда. Әммә, ни эшләптер, йүгерек уй, боронғолоҡто хәҙерге заманға ҡушып бәйләп, йәшәйешебеҙҙәге тарихи оҡшашлыҡтарҙы эҙләй. Халҡыбыҙ мәҙәниәтенең һәм рухиәтенең хәҙергә торошона баһа биргәндә, шундай күңелһеҙ һығымта яһала: үкенескә ҡаршы, беҙҙең милләттәштәрҙең дә ҡайһы берҙәре туған телен онотоп, рухи тамырҙарынан айырылып, тарихи һәм милли хәтерен юғалтып, маңҡортҡа әйләнде. Шуныһы асыҡ: үҙенең теленән, милләтенән оялған кешегә ситтәрҙән ниндәй мөнәсәбәт көтөргә кәрәк? "Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр", тип юҡҡа әйтмәгән бит боронғолар. Телһеҙ кеше - илһеҙ кеше, ерһеҙ кеше. Бәхет ҡошон ҡунып һайрарлыҡ үҙ ереңдә үҫкән ағасы, бер ҡасан да һинә хыянат итмәҫ тыуған төйәге, башҡалар араһында аҙаштырмаҫ туған теле, үҙ мөхите кәрәк һәр кешегә. Үҙенең киләсәге, балаларының яҙмышы өсөн борсолған һәр кем шуны аңларға тейеш.

Башлаған һүҙем әҙәпһеҙлек күренештәре хаҡында ине. Бала сағымдан халҡымдың тарихы менән ғорурландым. Элек, хәтерләүемсә, халыҡ ихлас, асыҡ, ярҙамсыл, йомшаҡ күңелле ине. Бөгөн милләтебеҙҙең йөҙө, холҡо насар яҡҡа үҙгәрә бара. Әлбиттә, донъя алға барғас, кешеләр ҙә үҙгәрмәй тормаҫ, тиерһегеҙ, әммә ыңғай яҡҡа ыңғайлаһын ине ул...

Шәхестең юғарылығы, киләсәктә уның ниндәй урын яулауы, һис шикһеҙ, әҙәплелеккә лә бәйле. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һуңғы ваҡытта йәмғиәттә был юҫыҡта проблемалар байтаҡ. Тирә-яғыбыҙға ентекләп күҙ һалһаҡ, быны аҙым һайын күрергә була. Ҡалаларҙағы транспорт туҡталыштарында кешеләрҙең ласҡ-лосҡ төкөрөнөүенән, сүп-сар ташлауынан баҫырлыҡ та таҙа урын ҡалмай. Автобусҡа инһәң, ололар, ҡатын-ҡыҙҙар баҫып килә, йәштәр ултырып бара... Ауылдарҙа ла хәҙер йәшелоһо "бисмиллаһ" һүҙен белмәй, ә һүгенә белә. Урамда иҫерек йөрөүҙән, урлашыуҙан, мәсхәрәләшеүҙән тартынмайҙар. Типһә тимер өҙәрҙәй, баҫһа баҡыр иҙерҙәй ирҙәрҙең, ихтыяр көсөн юғалтып, араҡы ҡоло булып, эшләмәй ятыуына ҡарауы ытырғаныс.

Ошондай әҙәпһеҙлектәрҙе күреүсе лә, тыйыусы ла юҡ. Элегерәк ололар әҙәпһеҙлек, тәртипһеҙлек осрағы күрһә, йәштәргә өгөт-нәсихәт уҡый башлар ине, ә хәҙер бер кем дә өндәшмәй. Әллә ошо йәшәү рәүешенә күнделәр, әллә ҡурҡалар... Беҙ йыш ҡына дөрөҫлөктө күрмәҫ өсөн, күҙәребеҙҙе йомабыҙ ҙа, ҡолаҡты томалайбыҙ. Ә шулай ҙа, ҡайҙа булып бөттө беҙҙең тәртип һаҡлаған, барыһына өлгө булған аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр? "Ололарҙы ихтирам итергә, хөрмәтләргә кәрәк", "Ирҙәрҙең дәрәжәһе юғары", "Атай һүҙе - ҡанун", "Йәннәт - әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында" тигән һүҙҙәр ҙә онотолоп бара. Халҡыбыҙҙа булған изге йолалар, юғары төшөнсәләрҙең юғала барыуы бик үкенесле...

Халыҡтың мәҙәни кимәле бер аҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрһен, тиһәк, ҡайһы бер тәрбиәүи саралар хөкүмәт кимәлендә ҡаралырға тейешле. Мәҫәлән, ҡала урамдарында, автобустарҙа социаль рекламалар элергә кәрәктер: йәштәрҙе әҙәпкә саҡырыр өсөн автобуста "Һүгенеү - әҙәпһеҙлек", "Ололарға урын бир!" тигән һымағыраҡ иҫкәрмәләр яҙып эленһә, һәйбәт булыр ине. Ғалимдарҙың, яҙыусыларҙың китаптары бик аҙ барып етә халыҡҡа, сөнки элекке кеүек башҡортса китап һатҡан сауҙа нөктәләре юҡҡа сыҡты. Шуға ла ошо китаптар авторҙары үҙҙәре сыҡһын ине халыҡ араһына, төрлө төбәктәргә барып сығыш яһаһын ине. Миңеңсә, муллаларға ла мәсеткә килгән кешегә генә вәғәз уҡыу менән сикләнмәй, өйҙән-өйгә йөрөргә кәрәктер. Сөнки иман йорттарына былай ҙа әҙәпле һәм мәғлүмәтле кеше килә. Дин әһелдәренә лә күпме яҙыҡ эштәрҙән (эсеү, тартыу, фәхишәлек һ.б.) тыйған ислам динен ҡурҡмайынса таратырға кәрәк.

Көслө милләт, иманлы милләт булып һаҡланып ҡалырға була икәненә һәр саҡ ышанам мин. Бының өсөн эште ғаилә тәрбиәһенән башларға кәрәк. "Оянында ни күрһә-осҡанында шул булыр" тип өйрәтә бит халыҡ аҡылы. Мәҫәлән, бала саҡтан уҡ ололарға ҡарата шәфҡәтлелек, мәрхәмәтлелек тәрбиәләү - тәрбиәнең башы, тип уйлайым. Ошо тәрбиәнең булмауы һөҙөмтәһе инде бөгөнгө ҡарттар йорттарының шығырым тулы булыуы. Унда йәшәүсе ҡарттарҙың күбеһенең балалары бар бит. Тимәк, улар балаларына йүнле тәрбиә бирмәгән, йә насар тәрбиә өлгөһө күрһәткән. Халҡыбыҙҙа шундай аҡыллы риүәйәт бар. Бер ир ҡартайып, бөлтөрәп бөткән әсәһен ярыҡ ялғашҡа ултыртып, упҡынға ташламаҡ булып, юлға сыға. Йәк тартырға ярҙамлашыр тип, үҙенең кескәй улын да эйәртә. Ялғашты төртөп төшөрәм тигәндә генә малай атаһына йәбешә: "Туҡта, туҡта, ялғашты төшөрмәйек, өйгә алып ҡайтайыҡ". Атаһынын: "Нимәгә ул һиңә ярыҡ ялғаш?" - тигән һорауына малай бик етди төҫ менән яуап бирә: "Бәй, үҙең ҡартайғас, әләсәйҙеке кеүек тештәрең төшөп бөткәс, мин һине был упҡынға нимәгә ултыртып килтереп ташлармын һуң?"

Был риүәйәттәге хәл һәр кемгә киҫәтеү, иҫкәртеү булып яңғырай.

Эйе, тормошобоҙ, мөнәсәбәттәребеҙ ҡатмарлана, ер йөҙөндә тупаҫлыҡ, йәмһеҙлек күбәйә бара. Әммә оҙаҡ ялҡытҡыс ҡыштан һуң наҙлы яҙ килә, ҡара болоттарҙы йырып, ҡояш сыға, төпһеҙ тойолған ҡараңғылыҡты еңеп, яҡтылыҡ хакимлыҡ итә. Минең уйлауымса, бөгөнгө ауырлыҡтар ҙа мәңгелек түгелдер, тик уларҙың тантанаһы оҙаҡҡа һуҙылмаһын өсөн һәр кемдең аҙ ғына булһа ла көс һалыуы фарыҙ...

Гөлназ ХӘСӘНОВА.

**✓ Төрлө урындарҙа эшләп йөрөүҙәренә ҡарамаҫтан, йома һайын йәмәғәт намаҙына мәсеттәргә йөрөгән йәш егет һәм ҡыҙҙарыбыҙҙың да күпселеге шәриғәт ҡанундарын һәүетемсә яҡшы белә.**



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Ике-өс йыл элек интернет селтәрендә Төркмәнстандың баш ҡалаһы Ашхабадта бер-береһенә ҡан туғанлығы булмаған егет-ҡыҙҙарға ҡала паркы эскәмйәһендә йәнәшә ултырыу тыйылыуы тураһындағы мәғлүмәт күптәрҙе шаҡҡатырғайны. Ил башлығының ҡарарына ярашлы, хоҡуҡ һаҡлау органдарының парктарҙа тотолған йәштәрҙе полиция бүлегенә индереп, уларҙың документтарын тикшереүе, һорау алыуы хаҡында халыҡ береһенән-береһе уҙҙырып интернет аша фекер алышты. "Төркмән ҡатын-ҡыҙҙарының хоҡуғын ҡыҫыу был!" тип, күпселек ах та ух килде. Мин үҙем дә шәхсән быны "Таяҡты саманан артыҡ бөгөргә маташыу" һымағыраҡ ҡабул иттем...**

# ТАЯҠТЫ АРТЫҠ НЫҠ БӨГӨҮМЕ?



Әшулай ҙа ҡыҙыҡ өсөн күҙ алдыбыҙға килтереп ҡарайыҡ әле: бындай осраҡҡа беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ нисек ҡарар ине икән? Бөгөнгө заманда ғәҙәттән тыш булып тойолған ошо хәл беҙҙең тарихыбыҙ төпкөлөндә лә урын алмағанмы? Әйтәйек, бынан ике быуат элек Төркмәнстанда ла түгел, ә үҙебеҙҙең Башҡортостанда ошондай тыйыу ҡабул ителде икән, ти. Халыҡ аптырар инеме? Юҡ, әлбиттә! Киреһенсә, Ислам динендә булған, шәриғәт ҡанунына буйһоноп йәшәгән ата-бабаларыбыҙ бындай ҡарарҙы ифрат та дөрөҫ ҡабул итеп алған булыр ине, минеңсә. Ул ғына ла түгел, күпселек халыҡ уны дәррәү күтәреп тә алыр ине, шәйт. Ә инде осраҡлы ғына әлеге "аҙғын парҙы" күреп ҡалһалар, ауыл кешеләре быға ысынлап та бот сабып аптырап: "Ишеттеңме әле, ана күрше ауылда Фәләнбайҙың ҡыҙын Төгәнйәндең улы менән бергә күргәндәр, ти. Аулаҡта хатта бер-береһенә яҡын ғына ултырып, быш-быш һөйләшкәндәр ҙә имеш... Ғибрәт бит был! Ата-әсәләре нимә ҡараған икән! Әстәғфируллаһ!.." - тиер ине. Сит ир-ат менән һөйләшеп ултырғаны өсөн ҡыҙыйға атаһынан, йә ағаһынан ныҡ ҡына "эләгер" ине. Егеттән дә, әлбиттә, башынан һыйпамаҫтар ине...

Ни өсөн төркмәндәрҙәге ошо хәл бөгөн сәйер тойола? Уҙған быуатта элекке Советтар Союзы составында булған бөтә илдәрҙә лә (шул иҫәптән, Төркмәнстанда ла) "Дин - иҫкелек ҡалдығы", "Дин - халыҡтар әфиуны" тигән һәм башҡа бик күп лозунгылар ярҙамында Ислам дине ҡанундары буйынса йәшәгән халыҡтарҙың аңынан "иман" төшөнсәһен бер нисә тиҫтә йыл эсендә "ҡаҡҡылап-һуҡҡылап" сығарып ташлап бөткәндәре хаҡында беләбеҙ. Шул арала дини йәһәттән бөтөнләйгә наҙан булған байтаҡ быуын үҫеп сыҡты. Шуға күрә лә беҙҙең дәүер кешеләре ошо тыйыуҙы "кеше хоҡуғын ҡыҫыу" тип һанай... Әлеге сикләүҙәрҙе бөгөнгө көн беҙҙең төйәгебеҙҙә булдырылған осраҡта, халҡыбыҙ, әлбиттә, уны һис кенә лә ҡабул итеп алмаясаҡ (Эскәмйәлә йәнәш ултырыуҙарҙан тыш, төркмән ҡатын-ҡыҙҙарына ирендәргә "бүлтәйтеүсе", түштәргә "көпәйтеүсе" пластик операцияларҙы, яһалма керпек, тырнаҡ йәбештереп йөрөүҙе, һылашып торған ҡыҫҡа күлдәктәрҙе лә тыйыу хаҡында һүҙ барғайны шул). Күптәргә был саманан тыш ҡаты, хатта кешелекһеҙ тәртип булып тойоласаҡ. Ғөмүмән, бындай сараларҙы бөгөн "нормаль" тип һанау мөмкин дә булмаҫ ине, сөнки илебеҙҙә шәриғәт ҡанундарын белмәгәндәр абсолют күпселек. Ә белергә теләмәгәндәр - тағы ла күберәк. Рәхәтләнеп кәнфит һурып ултырған балаға татлы нәмәләрҙең зыяны (ҡанда шәкәр күбәйеүе, артыҡ һимереүгә килтереү ихтималлығы) хаҡында нәсихәт һөйләй-һөйләй, уның ҡулынан тәмлекәсен кинәт кенә тартып алһаҡ, ни күрер инек? Ифрат та дөрөҫ: бер ни ҙә аңламаған сабый оло кешенең был ҡылығына тик аптыраясаҡ ҡына. Ул ғына ла түгел, хатта шарылдап илап, кескәй генә йоҙороғо менән һинә килеп "тондороп" та ебәрәсәк! Тап шуның кеүек, динебеҙҙе тәрәндән өйрәнеп, уның хаҡлығына инанмай тороп, башта күтәрелгән мәсьәләне дөрөҫ аңлау бөтөнләй мөмкин түгел, тимәксемен.

"Улым, һинә әйтәм, ҡыҙым, һин тыңла", тигәндәй, ошо етди мәсьәлә төркмәндәргә генә ҡағылмай. Борон шундай сикләүҙәр, тураһын ярып әйткәндә, никахһыҙ бәйләнештәргә юл ҡуймауға йүнәлтелгән ҡәтғи тыйыуҙар үҙебеҙҙең динле халҡыбыҙҙың да иғтибар үҙәгендә булған бит. Халҡыбыҙҙа "Ҡыҙыңды ҡырҡ урындан тый", тигән әйтем дә бик электән килгән. Шуға күрә был тыйыуҙарҙы "революциянан алда башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының изелеп йәшәүенең күрһәткесе" тип түгел, ә йәштәргә "зина" тигән оло гонаһҡа юлды ябырға тырышыу тип аңлаһаҡ, хата булмаҫ тип уйлайым.

Төркмәнстан хоҡуҡ һаҡлау органдарының ошо тыйыуы нилектән килеп сыҡҡанлығын Ислам дине ҡанундары менән таныш булған әҙселек бик яҡшы аңлай. Ныҡлы инаныуымса, халҡыбыҙҙың ҡасандыр ауыр "сир"ҙе - атеизм дәүерен кисереүенә ҡарамаҫтан, беҙгә лә барыбер дини асылыбыҙға ҡайтыу кәрәк. Тик шул төркмәндәр һымаҡ радикаль ысулдар аша түгел! Йәштәрҙе башҡасараҡ тәрбиәләү, уларға шәриғәт ҡанундарын "аҡыллы ғына" итеп өйрәтеү кәрәк.

Әйткәндәй, егет менән ҡыҙҙың бергә ултырыуы хаҡында һүҙ сығыу менән Мәжит Ғафуриҙың "Кара йөҙҙәр" әҫәре күҙ алдына килә... Эйе, тормош - ифрат та ҡатмарлы. Уҫһыҙ төтән сыҡмай, тигәндәй, баштараҡ иҫкә алған һымаҡ, элегерәк тә йәштәр араһында һирәк-һаяҡ "аулаҡлап" алырға йөрьәт иткәндәр булғылағандыр, күрәһең. Бала саҡта мин шул повесты уҡып, Ғәлимәнең атаһы Фәхри ҡарттың: "Шәриғәт тип харап иттеләр баланы..." - тип, ҡыҙын йәлләп ҡайғырғанына нык тетрәнгәйнем. Ошо повесть яҙған әҙиптең утыҙынсы йылдар башында атеистик рух менән һуғарылған, дингә кире ҡарашлы шундай әҫәр яҙырға мәжбүр булыуын аңлауы ҡыйын түгел. Ә ул осорҙа башҡа төрлө яҙып ҡына ҡара!.. Хатта яңы совет ҡоролошон "күккә сөйөп" маҡтап яҙыусы бик күп әҙиптең дә "халыҡ дошманы" тип ғәйепләнеп, баштары киткәнлеген беләбеҙ. Шуға күрә, ул дәүерҙә йәшәгән яҙыусы халҡының хәлен дә аңларға тырышайыҡ, тимәксемен.

Был повестағы ваҡиғаларҙың "эсенә инеп", улар хаҡында һүҙ йөрөтөр өсөн дә динебеҙ ҡанундарын яҡшы ғына белеү кәрәк. Минең инаныуымса, ошо әҫәрҙә "зинасылыҡта" ғәйепләнгән Закир менән Ғәлимә һис кенә лә шәриғәт ҡорбандары түгел, ә, киреһенсә, улар тарыҡан оло бәлә - Ислам ҡанундарын белеп етмәүҙең, дини наҙанлыҡтың касафаты ул. Туп-тура итеп әйтмәһә лә, мәҙрәсәлә дин ғилеме алған яҙыусыбыҙҙың тел төбөнән тап ошондайыраҡ фекер һиҙелә. Повеста дингә ҡағылышлы күп нәмәнең бик дөрөҫ итеп һүрәтләнеүен күрәбеҙ. Шәриғәт ҡанунына ярашлы, кешеләрҙе зина ҡылыуҙа ғәйепләү ябай ғына эш түгел. Хәҙрәт тә йыйылышҡан халыҡҡа "Кемгәләр ошо ғәйепте тағыр өсөн мотлаҡ дүрт шаһит булырға тейеш" тип, Ҡөрьән аятынан дәлил килтерә. Икенсенән, әҫәрҙә бөгәс кешеләрҙең ялған шаһитлыҡ ҡылып, шәриғәт ҡанунын боҙоуы хаҡында һүҙ барғаны ла асыҡтан-асыҡ. "Ялған шаһитлыҡ ҡылған кешенең үҙен яҙаға тыртырыу лазым (тейешле)", тип тә иҫкәртә халыҡты имам ошо турала. Тик уның был һүҙҙәренә иғтибар итеүсе булмай, йәштәрҙе "күреп тороусы" бер-ике алдаҡсы кешенең һүҙенә ышаналар. Әҫәрҙә ауыл кешеләре араһында шәриғәт ҡанунын дөрөҫ итеп аңларға теләмәгән фанаттарҙың-провокаторҙарҙың да булыуы һүрәтләнә. Йәштәргә ҡаты яза биреүҙе талап итә улар. Һөйләшеп кенә ултырған Закир менән Ғәлимәгә тик киҫәтеү яһап, уларҙы өйҙәренә ҡайтарып ебәреү һәм ата-әсәһенә хәбәр итеү урынына, зина ҡылынғаны ла иҫбат ителмәгән көйө, уларҙы кәмһетеүҙәр, мәсхәрәләүҙәр башлана...

Бөгөнгө көнөбөҙгә килгәндә, әлхәмдүлиллаһ, Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с. аша төшөрөлгән динебеҙ ҡанундарын өйрәнергә, уны дөрөҫ кенә итеп аңларға теләүселәргә бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡтар юҡ. Һәр төрлө зинаға, урлыҡҡа, енәйәтселеккә илтеүсе юлдарға кәртә булып торорҙай ҡат динебеҙҙе өйрәтеүсе ғилемле имам-мөғәллимдәребеҙ ҙә бар. Махсус уҡыу йорттарында уҡып белем алған улар. Бынан тыш, төрлө урындарҙа эшләп йөрөүҙәренә ҡарамаҫтан, йома һайын йәмәғәт намаҙына мәсеттәргә йөрөгән йәш егет һәм ҡыҙҙарыбыҙҙың да күпселеге шәриғәт ҡанундарын һәүетемсә яҡшы белә. Дин мәсьәләләренән унанбынан ишеткән хәбәрҙәрҙән өйрәнмәй хәҙерге йәштәр, ә тейешле китаптарҙан уҡый. Кистәрен, ваҡыт табып, имам-мөғәллимдәрҙең дәресенә лә йөрөйҙәр. Йәштәребеҙ ары-бире намаҙ уҡыуҙан башҡа бер нәмә лә белмәй, тип уйлаған кешеләр, әлбиттә, бик нык хаталана. Динебеҙ ҡанундарын ары-бире ишетеп түгел, барыбер ҙә асылында өйрәнеү кәрәктер ул, хаталанмау, гонаһҡа батмау өсөн, тимәксемен. Ә гәзит уҡыусылар ошо тема буйынса ни уйлай икән?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Тиңлек һәм ғәмәлгә ҡаршы ғәмәл ҡануны

Был - барлыҡ ҡанундарҙың башы һәм уға камил ғәҙеллек принцибының асылы һалынған. Тиңлек һәм ғәмәлгә ҡаршы ғәмәл ҡануны - ул Ньютондың өсөнсө ҡануны һәм ул һәр ғәмәлгә ҡарата ҡаршы йүнәлештә тиң ғәмәл барлығын аңлата.

Стенаны ҡулығыҙ менән этеп ҡарағыҙ. Урынынан да ҡуҙғалмаймы? Сөнки ул да һеҙҙе шундай уҡ көс менән кире этә. Һөҙөмтәлә көстәр тинләшә һәм стена урынында ҡала.

Хәҙер этеүегеҙҙән туҡтағыҙ. Стена һеҙгә табан шылдымы? Юҡмы? Һеҙ уны этеүҙән туҡтанығыҙ, әммә ни өсөн стена һеҙгә табан шылып, һеҙҙе этмәй? Белеүемсә, һеҙ аң көсө менән был кирбес, бетон йәки ағас конструкцияға йоғонто яһай алмайһығыҙ, тимәк, стена һеҙҙе артабан да этергә тейеш һәм, ҡаршылыҡ булмаһас, һеҙгә табан шылырға тейеш ине, шулаймы? Әммә ул быны эшләмәне. Был аңлатманы ныҡлы аңлап уҡығыҙ: һеҙҙең стенаны этергә тигән ҡарарығыҙ бер үк ваҡытта стенаның да рекацияһын тыуҙыра. Һеҙ эттегеҙ, ул да этте. Һеҙ туҡтанығыҙ, ул да туҡтаны. Икенсе төрлө әйткәндә, тигеҙләмәне тотош контролдә тотоу өсөн уның бер өлөшөн контролләү ҙә етә. Был ҡанундан сыҡҡан эҙемтәләр күп һәм мөһим. Әммә иң мөһиме - һеҙгә яуап эҙләп баш ватырға кәрәкмәй. Иң эшлекле кешеләр яуап эҙләп баш ватамай, улар үҙ ваҡытын һорауҙар эҙләүгә өсөн файҙалана. Ҡыҫҡаһы, һорау ҡуйыу үҙе үк автоматик рәүештә яуап тыуҙыра. Шуға күрә яуап эҙләп баш ҡатырмағыҙ, ә һорауҙар эҙләгеҙ!

## Ғаләм тигеҙһеҙлек торошон күрә алмай

Беҙҙең стена менән бәләкәй генә тәжрибәбеҙ Ғаләмдең һәр саҡ тигеҙлектә булырға тырышыуын күрһәтә. Физика ҡанундарына ярашлы, тигеҙлек, нигеҙҙә, бының өсөн энергия аҙ кәрәк булған урында күҙәтелә. Быны бит, Ғаләмебеҙ ни тиклем ялҡау икән! Ул иң түбән ҡаршылыҡ принцибин изге итеп һаҡлай. Ә тәбиғәттәге барлыҡ тереклек ошо ҡағиҙәгә буйһона. Әлбиттә, беҙҙән, кешеләрҙән тыш, сөнки беҙ бит үҙебеҙҙе иң аҡыллылары тип уйлайбыҙ һәм хәлебеҙ бөткәнсе эшләүҙе хуп күрәбеҙ!

Әгәр һеҙ ысынлап та нимәләр булдырырға теләйһегеҙ икән, Ғаләмде тигеҙһеҙлек торошона килтерергә кәрәк. Нимәләр уйлап сығарып, уй тулҡыныгыҙҙы Ғаләм төпкөлөнә ебәрһәгеҙ, тигеҙлек юғаласаҡ.

Быны миҫалдар менән ҡарайыҡ. Һеҙ ниндәйҙер яңы компания булдырырға теләйһегеҙ, буласаҡ предприятиеғыҙҙы бәләкәй генә деталенә тиклем уйығыҙҙа булдыраһығыҙ. Клиенттарығыҙға нимә тәҡдим итергә хәл итәһегеҙ, офис йәки завод өсөн урын табаһығыҙ, эшселәр һанын асыҡлайһығыҙ, баҙар күләмен һәм клиенттар һанын иҫәпләйһегеҙ, продукцияғыҙҙың иң перспективалы дистрибьютерҙарын эҙләйһегеҙ һ.б. Һиһайәт, һеҙҙең аныҡ планығыҙ бар.

Ә хәҙер ошо күҙаллауығыҙҙы файҙаланып, Ғаләм төпкөлөнә яңы тулҡын оҙатаһығыҙ, ул һеҙҙең теләгегеҙ формаһын ала. Уның хаҡында ни тиклем күберәк уйлайһығыҙ, һеҙҙең арҡа мейеһендәге антеннанан сыҡҡан сигнал шул тиклем көслө була. Ул Ғаләмдең тигеҙлеген боҙа. Ғаләмгә был оҡшамай һәм ул быны ятратмай! Нәҡ күршегеҙ төнгө өстә музыка ҡуйып, һеҙҙең йоҡоғоҙҙо осорған кеүек. Ғаләм нимә эшләргә тейеш инде, эйе, ул һеҙҙе туҡтарға мәжбүр итергә тейеш. Был осраҡта инде ул һеҙгә теләгән нәмәгеҙҙе бирә йәки һеҙ тулҡын ебәреүҙе үҙегеҙҙең шикләнеүегеҙ менән туҡтатаһығыҙ. Бында ике генә юл бар: йә һеҙ үҙегеҙҙең уй тулҡынын ҡурҡыу, шик менән туҡтатаһығыҙ, йәиһә ғаләм үҙе һеҙҙе туҡтатыу өсөн теләгәнегеҙҙе бирә. Шәп бит!

**Пьер МОРАНСИ.**



## 29 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.20, 6.10 Х/ф "Укротительница тигров". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.20 Х/ф "Белые росы". [12+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.15 Премьера. "Модный приговор". [0+]
11.10 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Повара на колесах". [12+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.10 Т/с "Собор". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. Церемония вручения народной премии "Золотой граммофон". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с "По законам военного времени. Битва за Ростов". [12+]
23.35 Х/ф Премьера. "Джильда". [16+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
2.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Баден-Баден". [16+]
4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
4.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]

### РОССИЯ 1
5.15 Т/с "Принцесса и нищенка". [16+]
6.50 Т/с "Две жизни". [12+]
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.40, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.55 О самом главном. [12+]
11.50 Жизнь и судьба с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.15, 14.30 Т/с "Невеста комдива". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
21.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
0.30 Т/с "Доктор Анна". [12+]
2.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.00 "Ете егет". [12+]**
**8.45 Орнамент. [12+]**
**9.00 "Звездный Байыҡ". [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**9.45 История одного села. [12+]**
**10.00 "Атайсал. [6+]**
**10.30 Детский концерт. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**12.00 Дарю песню. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30 Письма солдатам. [12+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Это моя профессия. [12+]**
**18.00, 18.15 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00 Концерт Искандера Газизова. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 3.30 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Красный Паша". [12+]**
**4.00 Интервью. [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 30 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Белая ночь, нежная ночь..." [16+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.15 Премьера. "Модный приговор". [0+]
11.10 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Повара на колесах". [12+]
13.05 "Видели видео?" [0+]
14.00 Т/с "Собор". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Эээх, Разгуляй!". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Х/ф Премьера. "Мажор в Сочи". [16+]
23.45 Х/ф Премьера. "Мегрэ и таинственная девушка". [16+]
1.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Фокусы". [16+]
2.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
2.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
3.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]
5.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". [16+]
5.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]

### РОССИЯ 1
5.15 Т/с "Принцесса и нищенка". [16+]
6.50 Т/с "Две жизни". [12+]
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.40, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.55 О самом главном. [12+]
11.50 Жизнь и судьба с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.15, 14.30 Т/с "Невеста комдива". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
21.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
0.30 Т/с "Доктор Анна". [12+]
2.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.00 "Ете егет". [12+]**
**8.45 Орнамент. [12+]**
**9.00 Тормош. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**9.45 История одного села. [12+]**
**10.00 "Атайсал. [6+]**
**10.30 Детский концерт. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Специальный репортаж. [12+]**
**11.45 Тайм-аут. [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30 Д/ф "В простоте - величие". [12+]**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Спектакль "Голобушки мои". [12+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Это моя профессия. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Концерт Назифы Кадыровой. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Хаджи Эфенди женится". [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 1 МАЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Высота". [0+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.15 Премьера. "Модный приговор". [0+]
11.10 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Повара на колесах". [12+]
13.05 "Видели видео?" [0+]
14.20, 18.20 Т/с "Собор". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Слышишь, время гудит - БАМ!" Большой праздничный концерт. [0+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Враг за спиной". [12+]
23.30 Х/ф Премьера. "Эта безумная любовь". [16+]
1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
2.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]
4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". [16+]

### РОССИЯ 1
5.15 Т/с "Принцесса и нищенка". [16+]
6.50 Т/с "Две жизни". [12+]
9.00, 11.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.40, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.55 О самом главном. [12+]
11.50 "Аншлаг и Компания". [16+]
14.00 Х/ф "Одесский пароход". [12+]
15.35 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
21.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
0.30 Т/с "Доктор Анна". [12+]
2.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.00 "Ете егет". [12+]**
**8.45 Орнамент. [12+]**
**9.00 Автограф. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**9.45 История одного села. [12+]**
**10.00 "Атайсал. [6+]**
**10.30 Детский концерт. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Әлләсе… [6+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30 Д/ф "В простоте - величие". [12+]**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Спектакль "Аҡ ҡалфаҡ". [12+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Это моя профессия. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 "Концерт Сагидуллы Байегет". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Позывной "Имран". [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Сваха". [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 2 МАЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Враг за спиной". [12+]
0.10 Д/ф "Непереводимая игра слов". К 85-летию Леонида Каневского. [12+]
1.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". [16+]
1.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
2.40, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
3.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". [16+]
4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]

### РОССИЯ 1
5.15 Т/с "Принцесса и нищенка". [16+]
6.50 Т/с "Две жизни". [12+]
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.40, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.55 О самом главном. [12+]
11.50 Жизнь и судьба с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.15, 14.30 Т/с "Город невест". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
21.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
0.30 Т/с "Доктор Анна". [12+]
2.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Территория женского счастья. [12+]**
**10.15, 3.45 История одного села. [12+]**
**10.30 "Дорога к храму". [6+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 17.00, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 История признания. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 "Эх, невеста, невестушка!.." [12+]**

## 3 МАЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Враг за спиной". [12+]
23.45 "Закрытый показ" с Александром Гордоном. Премьера. Фильм "Варавва". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Театральный подкаст". [16+]
4.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]

### РОССИЯ 1
5.15 Х/ф "Майский дождь". [12+]
6.50 Т/с "Две жизни". [12+]
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.40, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.55 О самом главном. [12+]
11.50 Жизнь и судьба с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.15, 14.30 Т/с "Город невест". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
21.30 "Удивительные люди. Новый сезон". [12+]
23.55 Х/ф "Новый муж". [12+]
3.25 Х/ф "Заповедник". [16+]
5.17 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". [6+]**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.00 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 4.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Лит-ра. [6+]**
**15.45 "Этно-краса". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 6.00 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Ете егет". [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". [12+]**
**23.45 Концерт Рушана Биктимирова. [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Любовница. [12+]**

## 4 МАЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Путь Христа". [0+]
12.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.15, 23.30 Д/ф "Храм Гроба Господня". [12+]
12.55, 17.10, 18.20 Д/ф "Империя: Екатерина II". [12+]
15.00 Схождение Благодатного огня. Прямая трансляция из Иерусалима.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 Светлой памяти Вячеслава Зайцева и Валентина Юдашкина. [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
0.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
1.10, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". [16+]
1.30 Пасха Христова. Прямая трансляция богослужения из Храма Христа Спасителя.
4.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". [16+]

### РОССИЯ 1
5.55 Х/ф "Красавица и Чудовище". [16+]
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Х/ф "Под дождём не видно слёз". [12+]
13.55 Д/ф "Русские у Гроба Господня".
14.30 Вести. Специальный выпуск.
15.00 "Схождение Благодатного огня". Прямая трансляция из Иерусалима.
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.20 Х/ф "Ошибка". [12+]
23.30 Х/ф "Семейное счастье". [12+]
1.30 "Пасха Христова". Прямая трансляция Пасхального богослужения из Храма Христа Спасителя.
4.15 Х/ф "Найдёныш". [16+]
5.54 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.00 "Бай". [12+]**
**8.30 "Ете егет". [12+]**
**9.15, 19.00 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 Детей много не бывает. [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". [6+]**
**11.45 Апчхи. [6+]**
**12.00 Сулпылар. Финалисты-2023. [6+]**
**12.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 Концерт Государственного академического симфонического оркестра РБ. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Д/ф "От улыбки станет всем светлей". [12+]**
**23.45 Пасхальная служба из кафедрального собора Рождества Богородицы г.Уфы. [12+]**
**3.00 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона. [6+]**
**3.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**4.00 Спектакль-балет "Журавлиная песнь". [12+]**
**6.00 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 5 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Премьера. "Играем свадьбу!". [12+]
11.05 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
13.15 "Видели видео?" [0+]
15.15 Х/ф "Мачеха". [0+]
17.00 Д/ф "Святая Матрона. "Приходите ко мне, как к живой". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. Финал. [16+]
22.55 Х/ф "Одна". История чудесного спасения. [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
2.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Фокусы". [16+]
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]

### РОССИЯ 1
5.55, 1.05 Х/ф "В тесноте, да не в обиде". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.05 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]
14.30 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.35 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.03 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45, 15.15 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона. [6+]**
**9.00 Д/ф "Вера вечна, вера славна". [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Ете егет". [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30, 3.15 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**16.45, 18.45, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Спектакль "Керчь". [12+]**
**19.00 Патриот РФ. [12+]**
**19.15 Әлләсе… [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 3.45 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 2.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Алены Завьяловой. [12+]**
**0.30 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**2.30, 5.30 История одного села. [12+]**
**4.30 Счастливый час. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1445 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (20) дүшәмбе | 3:14 | 5:42 | 13:30 | 18:21 | 20:45 | 23:14 |
| 30 (21) шишәмбе | 3:12 | 5:40 | 13:30 | 18:23 | 20:47 | 23:15 |
| 1 (22) шаршамбы | 3:11 | 5:38 | 13:30 | 18:24 | 20:49 | 23:16 |
| 2 (23) кесе йома | 3:10 | 5:36 | 13:30 | 18:25 | 20:50 | 23:17 |
| 3 (24) йома | 3:09 | 5:34 | 13:30 | 18:26 | 20:52 | 23:18 |
| 4 (25) шәмбе | 3:08 | 5:32 | 13:30 | 18:27 | 20:54 | 23:19 |
| 5 (26) йәкшәмбе | 3:06 | 5:30 | 13:30 | 18:28 | 20:56 | 23:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ Ҡояшҡа бәйле тағы бер шундай ҡыҙыҡлы күренеш: күп халыҡтар Ҡояшты ир-егет башланғыслы итеп ҡабул итһә, башҡорттарҙа ул - ҡатын-ҡыҙ.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 3 МАЙ - БӨТӘ ДОНЪЯ ҠОЯШ КӨНӨ

**Был көн 1994 йылда Халыҡ-ара ҡояш энергияһы йәмғиәтенең Европа бүлексәһе тарафынан булдырыла. Ошо йылдан алып Ҡояш көнө был ойошмала торған һәр илдә билдәләнә. Был рәүешле экология проблемаларына, Ер байлыҡтарына теймәйенсә, электр һәм йылылыҡтың башҡа төр сығанаҡтарын табыуға йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итергә ниәтләйҙәр.**

Ҡояш - ергә иң яҡын урынлашҡан йондоҙ, ҡалғандары беҙҙән бик алыҫта. Әйтәйек, сағыштырмаса яҡын урынлашҡан Проксима тигән йондоҙ Ҡояштан 4,22 яҡтылыҡ йылы алыҫлығында тора. Ғалимдар Ҡояшыбыҙ 4,57 миллиард йыл яҡтыртып тороуын асыҡлаған.

Кешеләр борондан Ҡояшты аллаһтар затынан тип уйлаған һәм табынған, уға арнап төрлө байрамдар уҙғарған. Рустә Масленица, Йәйге ҡояш торошо һәм Яҙғы көн менән төндөң тигеҙлеге кеүек байрамдар булған. Ҡояш культы инктар, мысырлылар, ацтектар динендә бар. Ҡояшҡа бәйле бик күп боронғо ҡомартҡылар һаҡланған, шуларҙың иң ҙуры һәм киң билдәлеһе - Англиялағы Стоунхендж тораташтары. Әйткәндәй, борон беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа белгән был ҡоролмаларҙың серен - Учалы районындағы Ахун ауылына яҡын ерҙә урынлашҡан шундай уҡ тораташтар быға бер дәлил. Был таштар йондоҙҙарҙы күҙәтеү өсөн эшләнгән, унда 26 мең йыллыҡ циклда төрлө дәүерҙәрҙәге поляр йондоҙҙарҙың урынлашыу тәртибе сағылған, ти ғалимдар.

Ҡояшҡа бәйле тағы бер шундай ҡыҙыҡлы күренеш: күп халыҡтар Ҡояшты ир-егет башланғыслы итеп ҡабул итһә, башҡорттарҙа ул - ҡатын-ҡыҙ. Мәҫәлән, "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосында Ҡояш - Самрау батшаның ҡатыны, Һомайҙың әсәһе итеп кәүҙәләндерелә. Халыҡ телмәрендә лә ул "Ҡояш апай" тип йөрөтөлә.

Ҡояш үҙәктә тора һәм планеталар уның тирәләй әйләнә, тигән фекерҙе тәүге тапҡыр Аристарх Самосский менән Боронғо Һиндостан ғалимдары күтәреп сыға. Ә 16 быуатта был фаразды билдәле Коперник яңынан яҡлай. Ерҙән Ҡояшҡа тиклемге араны ла Боронғо Греция астрономы Аристарх Самосский башлап үлсәп ҡарарға маташа. Ә бөгөн ғалимдар был күк есемен төрлө заманса ҡорамалдар ярҙамында өйрәнә. Әйткәндәй, Ҡояштың нурҙары аҡһыл, әммә Ер атмосфераһы аша үткәндә улар һарғылт төҫ ала икән.

Был көндә Ҡояштың Ерҙәге тереклек өсөн мөһимлеге, ҡояш энергияһын ҡулланыуҙың яңы мөмкинлектәре, экология мәсьәләләре кеүек темаларға ғалимдар араһында фекер алышыуҙар, төрлө саралар уҙғарыла.

Башваҡыста "ҡояш" һүҙе ҡулланылған башҡорт халыҡ мәҡәлдәрен табырһығыҙ.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**15-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Автобус. Батыр. Агроном. Аҡын. Әлифба. Астана. Лувр. Әсе. Седжон. Минск. Галле. Шэньян. Аппалачи. Яҡтау. Уҡ. Көрт. Ҡала. Ринг. Янут. Ауыл.

**Вертикаль буйынса:** Альманах. Астрономия. Квант. Анкара. Ашҡаяҡ. Гәп. Тубырсыҡ. Фа. Умарта. Нөсхә. Арҡа. Сер. Мәжлес. Шиңмәҫгөл. Донецк. Фураж. Арҡан. Ниәт.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 май "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 16+

**3 май "Килен"** (З. Мусина), драма. 16+

**4 май "Ете быуын. Һаҡлаусылар"** спектакль-вербатим. 18.00 16+

**5 май "Ете быуын. Йәштәр"** спектакль-вербатим. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**30 апрель "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович), трагикомедия. 18.00 12+

**1 май "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айытматов), драма. 18.00 16+

**3 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. 15.00 12+

**5 май "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 11.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 май "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 15.00 0+

**2 май "Два кота"** (О. Штырляева). 18.00 0+

**3 май "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский), спектакль-синестезия. 18.00 6+

**4 май "Винни-пух"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 6+

**5 май "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 15.00 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**29 апрель "Бейеү ғали йәнәптәре"** концерт. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4 май "Өс сусҡа балаһы"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 13.00 0+

## БР Милли музейы

**4 май "Һуғыш геройҙары: тарих буйынса мәсьәләләр"** ҡыйыулыҡ дәресе. 12.00 12+

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ЯЛДА ЛА ЭШЛӘЙҘӘР...

**Был юлы май байрамдары 8 көн дауам итә. Ял көндәре хаҡында һәм медицина учреждениеларының нисек эшләйәсәген иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

Шәмбе, **27 апрелдәге** ял көнө **29 апрелгә** күсерелә, шуға күрә был эш аҙнаһы - алты көнлөк. Ҡыҫҡартылған эш көнө **8 майҙа** ғына, сөнки ул байрам алды көнө. **28 апрелдән 1 майға** тиклем - **Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы** уңайынан, ә **9 майҙан 12-һенә** тиклем - **Еңеү көнөнә** ҡарата ял көндәре. Был көндәрҙә медицина учреждениеларының эш ваҡыты түбәндәгесә:

- Травмпункттар һәм ҡабул итеү бүлмәләре Башҡортостандың барлыҡ муниципалитеттарында ла тәүлек әйләнәһенә эшләйәсәк.
- **29, 30 апрелдә** һәм **1, 4, 9, 10, 11 майҙа** поликлиникалар сәғәт иртәнге 8-ҙән киске 6-ға тиклем эшләй. Өйгә саҡырыуҙар (шул иҫәптән кисекмәҫтән ярҙам) буйынса мөрәжәғәттәр көндөҙгө сәғәт 4-кә тиклем ҡабул ителәсәк. Был көндәрҙә шулай уҡ диспансеризация, һөнәри тикшеренеүҙәр һәм гинекологик тикшереү үтергә мөмкин.
- Йөклө ҡатындар **29 һәм 30 апрелдә, 10 майҙа** ультратауыш скринингы үтә аласаҡ.
- Өфөнөң дәүләт дарыуханалары һәм дарыухана пункттары **28-30 апрелдә** һәм **1, 4, 5, 9-12 майҙа** ял көндәре графигы буйынса эшләйәсәк. Үҙәк район дарыуханалары - шәмбе графигы буйынса. Шул көндәрҙә дарыуҙар, дауалау аҙыҡ-түлеге һәм медицина изделиелары ла яҙҙырып алып буласаҡ. Ташламалы рецептар буйынса дарыуҙарҙы ял көндәрендә ваҡлап һатыу бүлектәрендә алырға мөмкин.

***✓ Әле беҙ Дуҫлыҡ йорто өсөн яҡшы урын һайлайбыҙ һәм шунан һуң бинаны проектлау эшенә тотонабыҙ, унда шул иҫәптән милли кейемдәр тегеү оҫталары өсөн дә урын табылыр.***



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 9 апрелдә Өфөлә Милли музейҙа уҙған милли кейем тегеү оҫталары менән осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙың һорауҙарына яуап бирҙе.**



Башҡорт милли кейемен тергеҙеү, һаҡлау һәм популярлаштырыу менән шөғөлләнгән "Селтәр" башҡорт костюмы студияһы вәкилдәре республика етәксеһенә Милли кейем көнөн булдырырға тигән ҡарары өсөн рәхмәт белдерҙе. Уларҙың фекеренсә, был оҫталарға яңы һулыш бирҙе, уларҙың эшенең абруйын күтәрҙе. Былтыр үҙенең ун йыллыҡ юбилейын билдәләгән студия Рәсәй Президенты Грантына тормошҡа ашырылған "Башҡорттарҙың һуғылған шәле" проектын тамамланы. Оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашып, йөҙгә яҡын кеше шәл һуғырға өйрәнде. Уларҙың эштәре М. Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейындағы күргәҙмәлә күрһәтелде. Улар республика етәксеһенән үҙҙәренең белемен һәм оҫталығын йәштәргә тапшырыу мөмкинлеге биреүен һораны һәм Башҡортостан халыҡтарының дуҫлыҡ йорто өсөн яңы бинаға бәйле һорау бирҙе.

"Әле беҙ Дуҫлыҡ йорто өсөн яҡшы урын һайлайбыҙ һәм шунан һуң бинаны проектлау эшенә тотонабыҙ, унда шул иҫәптән милли кейемдәр тегеү оҫталары өсөн дә урын табылыр. Шулай уҡ Өфө колледждарының береһенә милли кейемдәр һәм атрибутика тегеү буйынса оҫталар әҙерләү белгеслеген кире ҡайтарыу мөһим тип иҫәпләйем. Мәғариф министрлығына тәҡдимдәр индереү бурысы йөкмәтелә", - тине Радий Хәбиров.

Тарих фәндәре кандидаты, Р. Кузеев исемендәге Этнологик тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре Елена Нечвалода башҡорт костюмы буйынса альбом-каталог сығарыуҙа ярҙам һораны. Унын һүҙҙәренсә, бөгөнгә ҙур, шул иҫәптән архив материалдары йыйылған, уникаль даналар бар.

Радий Хәбиров ошо проектты бюджеттан тейешенсә аҡса бүлеп, өс йыл дауамында тормошҡа ашырыу мөмкинлеге булһын өсөн республиканың Мәҙәниәт министрлығына альбом-каталогты әҙерләү һәм нәшер итеү өсөн дәүләт заказы буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты. "Милли кейемдәргә ҡыҙыҡһыныуҙы тергеҙеү менән бәйле мәсьәләләргә беҙҙең кеүек күп милләтле республикала дәүләт сәйәсәтенең мөһим өлөшө тип ҡарайбыҙ. Мәҙәниәтебеҙ бик бай һәм уны киләсәк быуындар өсөн һаҡлап ҡалырға кәрәк. Бөгөн тағы бер идеябыҙ хаҡында әйтмәксемен. Республикала Милли бейеү көнөн булдырырға теләйбеҙ. Ул шул иҫәптән милли кейемдәрҙе күтәреү өҫтөндә эшләйәсәк, сөнки милли бейеү улар менән айырылғыһыҙ бәйләнгән", - тине Радий Хәбиров.



# ФИЛАРМОНИЯ ЮБИЛЕЙЫ

**Күптән түгел Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының юбилей кисәһе булып үтте.**

Байрам концертында филармонияның барлыҡ профессиональ ижади коллективтары - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фирғәт Сафуанов етәкселегендәге тынлы оркестр, ҡурайсылар квинтеты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Алһыу Хәсбиуллина етәкселегендәге Таһир Сәйфуллин исемендәге дәүләт академия хор капеллаһы, Башҡортостандың халыҡ артисы Олег Ҡасимов етәкселегендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы эстрада-джаз оркестры, Ринат Мөхәмәтйәнов етәкселегендәге Милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры, музыкаль-әҙәби лекторий, эстрада артистары ҡатнашты. Башҡортостандың Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова филармония коллективын Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров исеменән ҡотланы. Ул Башҡорт дәүләт филармонияһының республика мәҙә-ниәтенә индергән өлөшөн билдәләне.

- Мин 80-се йылдар уртаһында органды реконструкциялауҙы тулҡынланып көтөп тороуыбыҙҙы хәтерләйем. Бында орган һәм беҙҙе рухландырған иҫ киткес артистарҙы, оркестрҙарыбыҙ башҡарыуында музыка тыңларға килдек. Мартта республика һәм филармония өсөн тағы ла бер мөһим ваҡиға булды, республика Башлығы указы менән Дәүләт ҡурайсылар ансамбле ойошторолдо. Бөгөнгө концерт программаһы милли музыка ҡоралы ҡурай башҡарыуында Моцарт музыкаһынан башланды. Быларҙың барыһы ла органик рәүештә берләшә. Һәм уларҙың ошо матур формаларҙы табыуы беҙҙе ҡыуандыра һәм һоҡландыра, - тине Әминә Шафиҡова.

Әминә Ивнәй ҡыҙы филармония артистарына дәүләт наградалары тапшырҙы. Башҡортостан Башлығы указы менән эстрада солисы Заһир Иҫәнсуринға "Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исем бирелде. "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре" тигән маҡтаулы исемгә музыка белгесе Оксана Семенова лайыҡ булды. "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы " исеме Башҡортостан Милли халыҡ инструменттары оркестры артисы Адель Киселевскаяға, эстрада-джаз оркестры Константин Украдыженкоға һәм аккомпаниатор-концертмейстер Ольга Хәйруллинаға бирелде. "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" маҡтаулы исемдәре менән әҙәби-редакция бүлеге начальнигы Оксана Иванова, ойоштороу һәм концерт эштәре буйынса бүлек начальнигы Марина Луговая билдәләнде. "Хеҙмәт батырлығы өсөн" миҙалы менән вокал репетиторы Нурия Мортазина һәм тынлы оркестрҙың баш художество етәксеһе, баш дирижеры Фирғәт Сафуанов бүләкләнде.

Ҙур залдың фойеһында тынлы оркестр байрам мөхитен булдырҙы, тамашасы филармонияла 85 йыл дауамында яңғыраған республиканың алтын фонды әҫәрҙәрен тыңланы. Кисә барышында республиканың төп концерт ойошмаһының барлыҡҡа килеү тарихын, милли эстрада этаптарын, беренсе музыкаль-әҙәби лекторийҙың тәүге лекцияларын, башҡорт хор капеллаһы, эстрада-джаз оркестры, милли халыҡ инструменттары оркестрының тәүге концерттарын иҫкә төшөрҙөләр.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙОМШАҠ ЙӘЙЕП...

## ҡатыға ултырта

Ағайым өйө - аҡ йәйләү, энем өйө - өң төбө.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Еңә алмаҫтай кешене үҙең менән көрәшергә саҡырма.

**(Атилла).**

Алланан тормошоңдо еңеләйтеүҙе һорама, ә һине көслө итеүен һора.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Әгәр баланың шаянлығын баҫаһың икән, унан аҡыл эйәһе тәрбиәләй алмаясаҡһың.

**(Жан-Жак Руссо).**

Алла бөйөк кешенең мәхрүмлек менән көрәшкәнен күҙәтергә ярата.

**(Роберт Бартон).**

Ахмаҡтар ғына үҙ хаталарында өйрәнә. Үҙ тәжрибәһен һанламағандар ысынлап та бөйөк.

**(Томас Фуллер).**

Дандың һәр төрлөһө ҡурҡыныс: изгеһе көнләшеү тыуҙыра, ялған данды күтәреүе оят...

**(Синди Адамс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ бер батша урман буйлап йөрөп ятһа, ҡаршыһына бер ҡарт осраған. Һөйләшеп киткәндәр. Һөйләшә торғас, батша был ҡарттың оло аҡыл эйәһе икәнен аңлап ҡалған. Шуға ла ул ҡартты бүләкләргә булған һәм был тура-ла уның үҙенә әйткән. "Был урманда миңә кәрәк булғандың барыһы ла бар: ашарға ла, эсергә лә бар, көндөҙгө эҫелә ағастар үҙенең күләгәһенә һыйындыра, төнөн мәмерйә йоҡлар урын бирә. Шулай булғас, ниңә кәрәк миңә һинең бүләгең?" - тип, батшаның тәҡдименән баш тартҡан ҡарт. Ләкин батша ныҡышыуын белгән. "Әйҙә инде минең һарайыма, - тигән ул ҡартҡа. - Шунда минән бүләк алырһың һәм был минең күңелемде күтәрер..." Ҡарт батшаның өгөтләүенә ҡаршы тора алмаған, һарайға барырға ризалашҡан. Бына улар ҙур һарайға барып ингән. Батша шунда уҡ тубыҡланып, Аллаға доғаларын һәм теләктәрен яуҙыра башлаған: "Аллам, миңә тағы ла байлыҡ бүләк ит, минең биләмәләремде киңәйт, ҡеүәт һәм һаулыҡ бир..." Батшаның доғаларын тыңлап торған ла ҡарт, иплəп кенә һарайҙан сығыу яғына йүнәлгән. Быны шәйләп ҡалған батша: "Ҡайҙа киттең? Һин бит әле минең бүләгемде алманың..." - тип ҡысҡырған. Ҡарт башын бороп: "Ә мин теләнселәрҙән бер нимә лә алмайым. Һин бит үҙең дә Алланан теләнселәйһең. Шулай булғас, һин миңә нимә бирә алаһың инде!" - тигән дә юлын дауам иткән".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
25 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 111776

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.